*Ваҡытлыса ғына булһа ла тереләрҙең үлгәндәр тураһында яҙғандарын уҡыуҙан туҡтағыҙ ҙа, күптән үлгән кешеләрҙең тереләр тураһында яҙғандарын уҡығыҙ әле.*

*(Г. Честертон).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4 - 10 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№18 (540)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ...**



3

**Өләсәй-олатаһы өлгөһөндә...**

ейәндәре лә бында уҡырға килә



5-6

**Геройҙар ҡасан яҡлау табыр,**

йәки Сит дошмандан әҙәмһеҙ күршең яман...



8-9

**Нух пәйғәмбәр хөрмәтенә...**

ятҡан ерҙә ҡат, йылан!



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йортона һуғыш еле ҡағылмаған бер генә ғаилә лә юҡтыр ул. Бөйөк Ватан һуғышы хаҡында һеҙҙең ғаилә ниндәй хәтирәләр һаҡлай?

***Әминә ВӘХИТОВА, пенсиялағы уҡытыусы, Ғафури районы Туғай ауылы:*** Бөйөк Ватан һуғышы йылдары минең хәтеремдә уңалмаҫлыҡ эҙҙәр ҡалдырҙы. Ул минең ғәмһеҙ бала сағымды урланы, атайымды һыңар аяҡ менән ҡайтарҙы, ағайымдың ғүмерен өҙҙө. Был ҡәһәрле һуғыш әҙәм балаһының кескәй генә шатлыҡтарын, оло өмөттәрен юҡҡа сығарҙы.

Тотош ауыл типһә тимер өҙөрлөк көслө, имәндәй ныҡлы улдарын һуғышҡа оҙата. Һәр кем үҙ яҡындарын гармун моңона, күңелдәрҙең иң нескә ҡылдарына ҡағылырлыҡ һағышлы йырҙарына әсе күҙ йәштәрен ҡушып, оло юлға сыҡҡансы оҙатып барҙы. Ошо мәлдәге илаш-һыҡташты, хатта беҙ, 10 йәшлек бала-сağа ла, бик ауыр кисерҙек. Тап ошо ваҡыт беҙҙе балалыҡтан сығарҙы.

Ир-егеттәр һуғышҡа китеп бөткәс, бөтә эш ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ һәм үҫмерҙәр иңенә төштө. Кесе йәштән оло апайҙарға эйәреп, ураҡ урырға, көлтә бәйләргә һәм башҡа эштәргә өйрәндек. Һуңынан ул көлтәләрҙе ат арбаһына тейәп, ырҙын табағына ташыйбыҙ, олораҡтар бәләкәй движок менән иген һуға, ә беҙ, үҫмер ҡыҙҙар, көнө-төнө ҡул менән шул ашлыҡты елгәрәбеҙ. Хәлдән тайып, арып, шул иген өҫтөнә йығылып йоҡлап китә торғайныҡ. Эйе, һуғыш беҙҙең бала саҡты урланы, йәшел сирәмдә рәхәтләнеп уйнар урынға, ашарға яраҡлы үлән эҙләп, ялан-урмандар гиҙергә мәжбүр итте. Ә атай, ағайҙарыбыҙ утлы, ҡанлы юлдарҙы үтеп, илем, Ватаным азатлығы, балаларҙың тыныс, бәхетле киләсәге өсөн тип фашистар менән алышты. Яуға киткән ауылдаштарҙың барыһы ла әйләнеп ҡайта алманы, бөгөнгө имен тормошобоҙ өсөн үҙ ғүмерҙәрен ҡорбан итте. Ҡайтҡандары ла алған яраларынан йүнәлә алмайынса, күптән вафат инде. Бына, мәҫәлән, беҙҙең Ғафури районы Туғай ауылында бер генә һуғыш ветераны ла ҡалманы (иң һуңғыһы үлгәнгә лә 10 йыл инде). Тыл ветерандары ла, һуғыш осорона тура килгән тиңдәштәрем дә бик әҙ ҡалып бара инде.

Эйе, һуғыш хәсрәтен, юғалтыуын күрмәгән бер генә ғаилә лә юҡтыр ул.

Атайым Хәбибнәжәр Вахитов (Ҡотлоғужа ауылы) Ленинград фронтында минаға баҫып, бер аяғын тубыҡтан киҫтереп ҡайтты. Инвалид булыуына ҡарамаҫтан, тырышып эшләп, беҙҙе, 5 баланы, тәрбиәләп үҫтереп, уҡытып, оло тормошҡа сығарҙы. 83 йәшендә вафат булды. 1926 йылғы Миңнеәхмәт ағайым 16 йәше тулыу менән фронтҡа китеп, Чехословакияны азат иткәндә һәләк булды.

Ошоларҙы уйлаһам, йөрәгем әрней, күҙҙәремә йәш тула. Халҡыбыҙҙың ул йылдарҙағы берҙәмлегенә, тырышлығына, сыҙамлығына хайран ҡалам. Эйе, ошо сифаттар менән еңеүгә өлгәштек беҙ. Бөгөн, шөкөр, тормошобоҙ тыныс, имен. Ҡарттар тураһында хәстәрлек күрелә. Тик шулай ҙа ҡайһылыр тарафта һуғыш уты тоҡаныуы һәм үҙ-ара ярышып үлтереш, утлы ҡорал етештереү хафаға һала. Шуға ла үткән һуғыштың бөтә михнәттәрен кисергән оло кеше булараҡ, илебеҙҙә һәр саҡ тыныслыҡ булһын, килер быуын һуғыш күрмәй үҫһен ине, тип теләйем.

**(Дауамы 2-се биттә).**



✓ *Бер тапҡыр ҙа күрмәгән атайым рухы һәр саҡ минең күңелемдә йәшәй, ғүмер буйы мине йәнәшәмдән оҙатып килә. Ут эсенән яҙған хаттарында ул миңә гел бәхет, оҙон ғүмер теләп, айырым сәләмдәр юллай торған булған.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йортона һуғыш еле ҡағылмаған бер генә ғаилә лә юҡтыр ул. Бөйөк Ватан һуғышы хаҡында һеҙҙең ғаилә ниндәй хәтирәләр һаҡлай?



(Башы 1-се биттә).

***Хәсән НАЗАР, шағир, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Бөйөк Ватан һуғышы башланып, атайым фронтҡа киткәндә, мин әсәйем ҡорһағында ете айлыҡ ҡына булып, тыуырға ла өлгөрмәй ҡалғанмын. Атайыма улдарын (игеҙәк һыңарым Хөсәйен исемле ине, ул биш йәшендә үлеп ҡалды) ҡулына алып, күккә сөйөргә, күкрәгенә ҡыҫып һөйөргә насип булмаған. Миңә лә атайҙың көслө иңенә һыйынып, иркәләнеп үҫергә, ғүмерҙә лә "атай" һүҙен әйтергә тура килмәне: ул Ленинград өсөн барған ҡаты һуғышта һәләк була. Һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа, үҫмер генә йәштәреңдә яныңда атайың булмауы ниндәй оло фажиғә икәнен ошо хәлде башынан кисергәндәр генә аңлайҙыр, аңлаһа... Етемлек нужаһы минең кеүектәрҙе иртә эшкә екте, ләкин эштән үлмәнек - теләһә ниндәй этлектәргә, ауырлыҡтарға сыҙам, эт ҡайышы, йәғни ныҡ характерлы булып үҫтек. Әсәйем менән яҙғы һары һыуҙар кисеп, утынын да һөйрәп ташыным, сыбыртҡы урынына ҡуйыныма китап ҡыҫтырып, көтөүен дә көттөм, һабансы булып, бураҙналар ярҙым, бесәнен дә саптым... Атайым тураһында әсәйем һөйләгәндәрҙән генә беләм: ауыл советы рәйесе вазифаһын башҡарған, абруйлы, уңған кеше ине, ти торғайны. Малай буласаҡ, тип әйтеп, мин тыуырҙы дүрт күҙ менән көткән атайым. Фронтҡа китер төндә йоҡламайынса, миңә сәңгелдәк яһап бөтөрөп киткән. Хөсәйен менән мин тыуғас, ҡыуанысы күккә ашып, хаттар яҙа, беҙгә хат аша исем ҡуша, бөткөһөҙ сәләмдәрен юллай. Үкенескә күрә, уның хаттары һаҡланмаған. Документҡа тип төшкән бәләкәй генә фотоһүрәтенән башҡа бер нәмәһе лә юҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бер тапҡыр ҙа күрмәгән атайым рухы һәр саҡ минең күңелемдә йәшәй, ғүмер буйы мине йәнәшәмдән оҙатып килә. Ут эсенән яҙған хаттарында ул миңә гел бәхет, оҙон ғүмер теләп, айырым сәләмдәр юллай торған булған. Күрәһең, атам фатихаһы йәшәтәлер мине был донъяла...

***Флүрә ЙӘРМӨХӘМӘТОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, ветеран педагог, Мәләүез ҡалаһы:*** Атайым Хәсәнов Хәкимйән Дәминдар улы Хәйбулла районы Рафиҡ ауылынан 1939 йылда уҡ фин һуғышында, Халхин-Голда булып ҡайтҡан. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, 1942 йыл йәнә фронтҡа китә, әсәйем миңә ауырлы булып, өҫтәүенә, ҡулында тағы дүрт бала менән уны оҙатып ҡала. Атайым ҡыйыу булған, легендар командарм, маршал Жуков етәкселек иткән армия сафында һуғышҡан. Ә был армияны, тарихтан белеүебеҙсә, ҡайҙа эш хөрт, шунда ебәргәндәр, шуға күрә мин йыш ҡына, Георгий Жуков етәкселегендә тап минең атай һымаҡ батыр йөрәкле, илһөйәр коммунистар ғына хеҙмәт иткәндер, тип уйлап ҡуям. Әйткәндәй, шуныһы бер ғәжәп: дошман өҫтөнә ҡурҡыуһыҙ ташланған ҡыйыуҙарҙы, бәхеткә, пуля ла алмаған. Курск дуғаһының утлы ғәрәсәтенән иҫән сыға атайым. Ике тапҡыр ауыр яраланып, күкрәге тулы орден-миҙалдар менән иҫән-һау ҡайтып төшә ул фронттан. Уның бер туған ҡустыһы Ғәлимйән ағайыбыҙ ҙа, башына бик ауыр яра алһа ла, шулай уҡ иҫән ҡайтты. Уның да түше тулы орден-миҙал ине. Ҡайтыу менән икеһе лә колхоз эшенә сумдылар: атайымды бригадир итеп ҡуйҙылар, көнө-төнө колхоз баҫыуынан ҡайтып инмәне, арыуҙың ни икәнен дә белмәне. Һуғыш йылдарында, үҙегеҙ беләһегеҙ, тылда балалар күпләп ҡырылды. Атайым ҡайтыуға, әсәйем биш баланы ла ҡарап, иҫән-аман һаҡлап ҡала алды. Һуғыш бөткәс, тағы өс туғаныбыҙ донъяға килде. Әсәйебеҙ ҙә бик уңған, тырыш булды. Оҫта тегенсе ине, ауылдаштарын да, күрше-тирә ауыл халҡын да ул кейендерҙе. "Зингер" машинаһында ул хатта толобона хәтлем тегеп бирер ине. Атайыбыҙ зарлана белмәһә лә, һуғыш яраларынан һыҙланғандыр. Еңеү менән ҡайтыу оло бәхет булһа ла, фронтовиктарҙың күбеһе ана шул яраларҙан мандый алмайынса, вафат булып бөттө. Әсәйебеҙ ныҡ ҡараны, бала тәрбиәләгәндәй ҡәҙерләне атайыбыҙҙы, уның тәрбиәһе арҡаһында атайыбыҙ 89 йәшкә етте. 2010 йылда атайыбыҙ вафат булды. Теүәл ике ай үткәс, уның исеменә нилектәндер ваҡытында тапшырылмаған Ҡыҙыл Йондоҙ ордены килеп төштө...

***Илгиз ИШБУЛАТОВ, журналист:*** Беҙҙең ғаилә Бөйөк Ватан һуғышында Смоленск янындағы ҡаты һуғыштарҙың береһендә башын һалған Заһит Ишбулатовтың - ҡартатайымдың атаһының - иҫтәлеген ҡәҙерләп һаҡлай. Һуғышта уның менән бергә булған ауылдашы ҡайтып һөйләүенсә, ҡартатайым атакаға ташланғанда фашист пуляһынан һәләк була. Был, туғандарым раҫлауынса, Термино тип аталған хутормы, станциямы булған. Заһит ҡартатайымдың үлеме тураһында килгән "ҡара ҡағыҙ" һаҡланмағанға күрә, был атаманың дөрөҫлөгө шик тә тыуҙырып ҡуя, сөнки шул яҡтарға юл төшкәндә, урындағы кешеләрҙән һорашып, эҙләп ҡараһам да, ул урынды таба алманым. Бәлки, уның исемен үҙгәрткәндәрҙер, бәлки, бәләкәй генә хутор булған булһа, ул ер йөҙөнән юҡҡа сыҡҡандыр... Заһит ҡартатайымдың өлкән улы Рәхмәтулла олатайыма иҫән-һау әйләнеп ҡайтырға насип иткән. Һуғышта ул разведчик булған. Әсәйем яғынан өләсәйемдең Әбделхан менән Әбделәхәт тигән ике ағаһы һуғышҡа китә. Икеһе лә Темәс педучилищеһын бөтөргән шәп егеттәр була. Әбделәхәт олатайым истребителдә осҡан, икеһе лә ҡыйыу һуғышҡан. Үкенескә күрә, был бөркөттәр ҙә яуҙан әйләнеп ҡайта алмаған. Яугир олатайҙарым менән ғорурланам, әммә уларҙың аҫыл ғүмерҙәре шулай өҙөлөп ҡалыуына әрнейем дә. Нисек кенә булмаһын, мин уларҙың яҙмышына битараф ҡала алмайым, ҡайҙа нисек һуғышыуҙары, ниндәй ерҙәрҙе мәңгелек төйәк итеүҙәре хаҡында бәләкәй генә булһа ла хәбәр, мәғлүмәт алыуҙан төңөлмәйем - эҙләнәм, яҙмыштарын үҙемсә ҡат-ҡат күҙ алдына килтереп, уйланам, һыҙланам...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзитебеҙгә яҙылып, һеҙ баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләйһегеҙ, туған телгә, мәҙәниәткә тоғролоҡто, ихтирамды, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтәһегеҙ икәнен иҫегеҙҙән сығармаһағыҙсы.**

● Шулай итеп, 2013 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **378 һум 36 тингә** яҙылырға була. Майҙа гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ Гүзәл Ситдиҡованың **"Күсле ил - көслө ил"**, 10 уҡыусыбыҙ Мәрйәм Бураҡаеваның **"Көҙгө ысыҡ"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.



● **Тағы.** Гәзитебеҙгә бар йәмәғәт менән яҙылған Баймаҡ районы Ярат ауылы халҡы өлгөһөнә эйәргән ауылдарға, коллективтарға **"Кескәй китапхана"** бүләк итәбеҙ. Был китапханала **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, башҡортса **"Ҡөрьән-Кәрим"**, С. Руденконың **"Башҡорттар"**, **"Башҡорт костюмы"** баҫмалары, Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"** һәм башҡа китаптар бар.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ. Бында ла өлгөләр етерлек. Әле генә бына Өфө ҡалаһынан Гөлсәсәк Әлибаева Хәйбулла районының Мәмбәт ауылындағы ветерандарға "Киске Өфө"гә яҙҙырыуы тураһында хәбәр итте. Әбйәлил районының Асҡар ауылынан Нәғимә Илһамова ла гәзитебеҙҙе Рауил балалар йортона яҙҙырып бүләк иткән. Рәхмәт был милләттәштәргә!

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә Рәсәйҙең спорт министры Виталий Мутко менән осрашты. Осрашыуҙа Башҡортостанда яңы спорт объекттарын, атап әйткәндә, Өфөлә Паралимпия үҙәген һәм яңы Спорт һарайын төҙөү тураһында һүҙ барҙы. Рөстәм Хәмитов федераль министрға Өфөлә 2013 йылдың 1-19 июнендә - ир-егеттәр араһында халыҡ-ара шашка буйынса донъя чемпионатын, 2014 йылда Бөтә донъя интеллектуаль уйындарын үткәреүгә әҙерлек тураһында, шулай уҡ Өфөнө 2015 йылда XVIII Сурдлимпия уйындарын үткәреүгә кандидат итеп тәҡдим итеү хаҡында һөйләне. Виталий Мутко билдәләүенсә, барлыҡ был йүнәлештәр буйынса министрлыҡ республикаға ярҙам итәсәк.

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министры Вероника Скворцова менән осрашты. Вероника Скворцова Өфөлә 200 урынға иҫәпләнгән перинаталь үҙәк төҙөү идеяһын хупланы. Проекттың дөйөм хаҡы 3,3 миллиард һум тәшкил итә. Үҙәкте 2015 йылда файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла.

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә Хеҙмәт һәм мәшғүллек буйынса федераль хеҙмәт етәксеһе Всеволод Вуколов менән осрашты. Всеволод Вуколов билдәләүенсә, эш урындарының сифатын яҡшыртыу буйынса эште дауам итергә кәрәк, бының өсөн урындарҙа хеҙмәт инспекцияларын көсәйтеү мотлаҡ. Башҡортостанда 1,2 миллион хеҙмәткәргә ни бары 20 дәүләт хеҙмәт инспекторы тура килә. Бынан тыш, Хеҙмәт һәм мәшғүллек буйынса федераль хеҙмәт етәксеһе фекеренсә, халыҡ мәшғүллеге хеҙмәтенең эшмәкәрлеген яңыртырға кәрәк. Рөстәм Хәмитов Башҡортостандың был йүнәлештәр буйынса пилот төбәк булырға әҙер булыуын билдерҙе.

✓ Туймазы районына эш сәфәре барышында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Баҡалы, Бүздәк, Туймазы, Саҡмағош һәм Шаран райондары активы менән осрашты. Республика Президенты билдәләүенсә, ауыл хужалығы өлкәһенә ярҙам күрһәтеү дауам итәсәк. Бөгөн урындағы етештереүселәр башҡа илдәрҙең ауыл хужалығы продукцияһы етештереү буйынса юғары технологиялары менән конкурентлыҡ итергә мәжбүр. Шуға күрә дәүләт ярҙамынан тыш, был көрәштә еңеүгә өлгәшеп булмаясаҡ. Быйыл сәсеү кампанияһына 1,5 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленәсәк.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# КҮҢЕЛЕБЕҘҘӘ УҪАЛЛЫҠ ЮҠ...

**"Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ..." тигән һүҙҙәр Салауат яуы ваҡытында 1774 йылдың 10 сентябрендә Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналиндың Ҡатау заводы эшселәренә яҙған мөрәжәғәтендә әйтелә. Был документты тәүге тапҡыр тарихсы Ә.Н. Усманов 1962 йылда "Ағиҙел" жураналының 8-се һанында (86-93-сө биттәр) баҫтырып сығара. Рауил Бикбаевтың "Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ..." тигән шиғыры ла бар.**



Тәнзилә Ғәйфуллина һүрәте.

Хәрби писарь Ғәбдрәшит уғлы ҡул ҡуйған тарихи документ "Салауат менән Юлайҙың Ҡатау заводы эшселәренә мөрәжәғәте" тип атала. Уның тексы түбәндәгесә: "Беҙ главный атаман Юлай Аҙналы улынан һәм бригадирлыҡ эшен башҡарыусы баш полковник Салауат Юлай улынан һүҙ шулдыр: Һеҙ, Ҡатау заводында командир булып тороусы приказчиктарға һәм ҡарттарға! Әгәр һеҙҙең кешегеҙ беҙгә тотолһа, беҙ уларҙы үлтермәйенсә һәм зарар килтермәйенсә һеҙгә ҡайтарабыҙ. Әгәр беҙҙең кешебеҙ һеҙгә тотолһа, итәһегеҙ уны тотҡон һәм бәгзеләрен үлтерәһегеҙ, имеш. Беҙ, әгәр беҙҙең күңелебеҙҙә уҫаллыҡ булаһы булһа, Алла теләһә, һеҙҙән артығыраҡ тотоп һәм һеҙҙән артығыраҡ үлтерер инек. Беҙ теләмәйбеҙ, күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡлыҡтан. Инде күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ. Әгәр татыулыҡты теләй торған булһағыҙ, ебәрегеҙ Мусабай Бикйән улын (ул 14 июндә завод етәкселеге менән һөйләшер өсөн Юлай менән Салауат тарафынан ебәрелә һәм унда ҡулға алына **- Ә.Ғ.-Ү.**), аралыҡта йөрөп татыулаштырыу өсөн. Һеҙҙең беҙгә тотолған ике урыҫтың береһен ҡайтарҙыҡ, яҙыу менән һәм Мусабай ҡайтып килгәндән һуң кизин (аҙаҡ, һуң - **М.Х. Иҙелбаев аңлатмаһы**), бында беҙҙең ҡулыбыҙҙа ҡалған берәүһен дә ҡайтарырбыҙ.

Беҙ бер-беребеҙ менән бәхәсләшеп, бер вә беребеҙҙе бөлдөрөшөп торорға мөмкин түгелдер: көллөбөҙ ҙә бадишаһыбыҙ император Петр Федорович хәҙрәттәренең ҡолобоҙ һәм беҙгә даим изге хәбәрҙәр килә, указдар арҡыры: улы Павел Петровичҡа ҡушҡандыр, тип, һеҙ ҙә уларҙың сәләмәтлеген теләгеҙ, тип. Изгелек теләүсе дуҫығыҙ баш атаман Юлай Аҙналы улы ҡулым ҡуйҙым һәм бригадирлыҡ эшен башҡарыусы баш полковник Салауат Юлай улы ҡулым ҡуйҙым.

1774-се аһ рәжәптең 15 көнөндә Войсковой писарь Ғәбдрәшит улы ҡулым ҡуйҙым".

Был хат уларҙың авторҙары тарафынан ике яҡты, йәғни баш күтәреүселәр менән Ҡатау заводы етәкселеге араһындағы мөнәсәбәтте көйләү, килешеү маҡсатында яҙыла. Тарихтан билдәле булыуынса, көҙөйҙәрҙең һәм ҡыуаҡандарҙың аҫаба ерендә рөхсәтһеҙ, баҫып алыу юлы менән һалынған был завод ҡоролмалары һуңынан баш күтәреүселәр тарафынан яндырыла. Был ҡаршылыҡ Салауат яуы тарихының әллә ни ҙур әһәмиәтле, һыҙлышлы ваҡиғаһын тәшкил итмәһә лә, Юлай Аҙналин менән Салауат Юлаевтың завод етәкселегенә яҙған өндәмәһе тексы, ундағы айырым һүҙбәйләнештәр һәм фразалар күп кенә нәмәләр хаҡында тәрән уйланырға мөмкинлек бирә. Бер яҡтан уйлағанда, улар был хаты менән "Пугачев бунты тарихы" авторы Александр Пушкинға ла яуап бирә. Шағир был әҫәрендә Салауатты "свирепый" тип атай, йәғни уны ҡанһыҙлыҡта, мәрхәмәтһеҙлектә ғәйепләй. Ҡыҙыҡ, бер сикәһенә һуҡҡандан һуң икенсе сикәһен ҡуйған кеше образында күрергә теләнеме икән башҡортто Александр Пушкин? Әгәр шулай икән, шағир башҡорт тарихы хаҡында урыҫ феодалдары мәнфәғәте күҙлегенән генә сығып фекер йөрөтә. Ваҡытында дөрөҫ ҡулланмаған бер генә һүҙ өсөн быуаттар үткәндән һуң да шағирҙы хәкиҡәт алдындағы намыҫ яуаплылығы хөкөмөнә баҫтырырға була, тигәнде аңлата булыр был хәл. Шағир һәр һүҙе өсөн тарих алдында яуаплы.

Икенсе яҡтан ҡарағанда, башҡорттоң ни өсөн шулай үҙ дошманына ҡарата аяуһыҙ көрәшеүенең дә тарихи сәбәптәре асыҡлана Юлай менән Салауаттың өндәмә тексында. "Һеҙ беҙгә ҡарата ниндәй мөнәсәбәттә булһағыҙ, беҙ ҙә һеҙгә шундай уҡ юл менән яуап бирәбеҙ, һеҙ беҙгә ҡарата аяуһыҙ булһағыҙ, беҙ ҙә һеҙгә ҡарата шулай уҡ аяуһыҙ", тигәнде аңлата булыр был принцип. Был осраҡта "Һорауына күрә яуабы" тип тә әйтәләр. Американың билдәле киноактеры, музыканты һәм продюсеры Брюс Уиллистың был йәһәттән башҡорт милләтенең тарихи характерын да асып бирергә булышлыҡ итерлек, шулай уҡ Пушкиндың Салауат хаҡындағы һүҙҙәренә яуап булырлыҡ бик тәрән мәғәнәле һүҙҙәре бар. "Аяуһыҙлыҡ, ҡанһыҙлыҡ - изге кешеләрҙең характер һыҙаты, ул һыҙат башҡалар һинең изгелегенә аяҡ һөртә, төкөрөп ҡарай башлағанда барлыҡҡа килә", ти актер. Был һүҙҙәрҙе ул ниндәй сәбәптән һәм ниндәй маҡсатта әйткәндер, әммә Салауаттың "Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ" тигән һүҙҙәрен киң мәғәнәлә һәм дөрөҫ итеп аңларға мөмкинлек биреүе көн кеүек асыҡ.

Салауат Юлаевтың ҡулға алынғандан һуң Шайтан-Көҙәй волосына иректәге туғандарына хакимдар алдында ғаиләһе мәнфәғәттәрен ҡайғыртыу тураһында һорап яҙған хаты ла айырым иғтибарға лайыҡ. Унда ла тәүге документтағы кеүек "Ни өсөн күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ?" тигән һорауға яуаптар бар: "Мәғлүм булһын: бөгөнгө көндә үҙ йорттарында йәшәүсе старшиналарҙан беҙҙең эштәр тураһында һорашһалар, беҙгә юҡ-бар яла яҡмаһындар, дөрөҫөн күрһәтһендәр: Пугачевтан беҙгә генә түгел, бөтә дүрт юлға ла приказ булды бит, беҙ заводтарҙы яндырыуҙы һәм көрәште шул приказ арҡаһында ҡылдыҡ. Ә бер рус менән бер сыуаш кешеһе аҫылһа, уларҙы атаман Белобородовтан (шундай) указ бар, тип, Ибрәш Галин тотоп алып килеп аҫты. Был ысынлап та дөрөҫ. Әйберҙәрен һәм бурыл атын алып, шуның менән йөрөнө, үҙегеҙ ҙә күрҙегеҙ бит.

Беҙҙән шикләнмәгеҙ. Беҙ хәҙерге көндә өйҙәрендә йәшәгән халыҡҡа бер ниндәй ҙә ғәйеп ташламаныҡ, ә уларҙың именлеген генә ҡайғырттыҡ. Шуға күрә улар ҙа беҙҙе изге доғаларынан ташламаһын ине...

Ҡатындарыбыҙ һәм балаларыбыҙ хаҡында Ырымбурға хәбәр бирегеҙ: беҙҙе ҡәрҙәштәребеҙ ҡотортманы, шуға уларҙы азат итһендәр, тип яҙығыҙ. Әгәр быны губерна канцелярияһы эшләй алмай икән, Сенатҡа ебәрһен: ғәзими хәҙрәттәренең ҡолдары уға бойһоноусылар ҡулы аҫтында хеҙмәтсе булмаһын. Балаларҙың йәшен күрһәтегеҙ.

Ғүмерҙәре юҡ ителеүселәрҙең (йәғни, аҫып йә яҙалап үлтерелеүселәрҙең) ғаиләләрен тартып алырға тигән указ ысынлап юҡ. Беҙ, Хоҙай ҡушһа, яҙаланмабыҙ тигән өмөттә торабыҙ, сөнки хәҙер үлем яҙаһы тыйылған. Әгәр һеҙ ошолар хаҡында ҡайғыртмаһағыҙ - кеше түгелһегеҙ: кешеләр аттар тураһында ла юллайҙар һәм хәстәрлек күрәләр.

Беҙҙең турала ла хәбәр бирегеҙ, Салауаттың ҡатынын һәм бер улын комендант ҡарауылы һаҡлай, тип яҙығыҙ. Резолюцияға тиклем уларҙы (комендант) һәләк итеп ҡуймаһын, тип ҡурҡабыҙ. Бер улымды секретарҙа фатирҙа тороусы генерал алған. Бүтән ҡатындар һәм балалар ҙур (түрәләр) тарафынан таратып алынған, һәм улар көн һайын бергә ашайҙар, йөрөйҙәр, ҡатындар һәм балалар алдында ҡыланалар. Күрһәтмәләрҙе дөрөҫ ҡарамаҫтар, тип уйлайбыҙ. Чукаловтан күҙ йәштәре менән һорағыҙ - беҙҙе һәм беҙҙең эште губерна канцелярияһы ҡарамағына алһындар, мең һум кәрәк булһа ла - бурысҡа булһа ла алығыҙ, өҫтәүенә, мишәрҙән аҡсалы һандыҡ алынған, тип ишеттем, (шуның) табылыуы ихтимал.

Был хатта яҙылғандарҙы (үтәргә) тырышығыҙ, һәм беҙҙән һуң ҡалып йәшәгәндә йорттарығыҙҙа тороғоҙ һәм мөлкәт йыйнағыҙ.

Тәржемәсе Андрей Васильев тәржемә итте".

Ниндәй билдәле хатты иҫкә төшөрә был документ? Эйе, Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты"н.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы киләһе һанда.)**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Рәсәйҙең иң бәхетле ун төбәге иҫәбенә инде. Иң бәхетле кешеләр йәшәгән төбәктәр исемлегендә республика алтынсы баҫҡысты биләй. Йәмәғәтселек фекере фондының "Дөйөм алғанда, һеҙ бәхетлеме әллә бәхетһеҙ кешеме?" тигән һорауына республика халҡының 80 проценты ыңғай яуап биргән. Халыҡтың иң күп бәхетле кешеләр булған төркөмө - студенттар (88 процент), бынан һуң килеме 25 мең һумдан ашыу булған кешеләр һәм етәкселәр килә. 60 йәштән олораҡ кешеләр, эшләмәгән пенсионерҙар һәм эш эҙләүселәр үҙҙәрен бәхетһеҙ тип атаған. Йәмәғәтселек фекере фонды - бойондороҡһоҙ социологик хеҙмәт. 1992 йылға тиклем Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге ҡарамағында эшләгән, 1992 йылдан башлап үҙ аллы эшмәкәрлек алып бара.

✓БР Үҙәк һайлау комиссияһы округ һайлау комиссияларының рәйестәре, уларҙың урынбаҫарҙары һәм секретарҙары өсөн уҡытыу семинарҙары ойоштора. Дүрт көнгә иҫәпләнгән белем биреү программаһы сиктәрендә семинарҙар, лекциялар үткәреү ҡаралған, тип хәбәр ителәр республиканың Үҙәк һайлау комиссияһынан. Дәрестәр БР Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе урынбаҫары Нәйлә Алтынова, Комиссия секретары Марина Долматова, Комиссия ағзаһы Ришат Лоҡманов етәкселегендә үткәрелә.

✓Өфөнөң "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында "Студент яҙы-2013" фестиваленең гала-концерты үтте. Сарала студенттарҙың иң яҡшы концерт номерҙары тәҡдим ителде. Быйыл фестивалдә йәмғеһе 70 меңдән ашыу кеше ҡатнашты. Фестивалдә еңеүселәр артабан Ульяновскиҙа үтәсәк Бөтә Рәсәй студент яҙы финалында ҡатнашасаҡ. Әлеге ваҡытта унда ҡатнашыу өсөн делегация формалаштырыла.

✓Рәсәйҙең Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығы инвалидтарҙы эшкә урынлаштырыуға булышлыҡ итеү буйынса саралар комплексы әҙерләне. Алдағы өс йыл дауамында инвалидтар өсөн йыл һайын 14,2 меңгә тиклем махсус эш урыны булдырыу планлаштырыла. Был маҡсаттарға ҡушып финанслау шарттарында төбәктәр быйыл 792,5 миллион һум аҡса алаҫаҡ. Билдәләнеүенсә, эш тәҡдим итеүселәрҙе инвалидтар өсөн эш урындарын булдырыуға дәртләндереү маҡсатында Дәүләт Думаһына тейешле федераль закон проекты тәҡдим ителәсәк. Бөгөнгө көндә Рәсәйҙә 15,8 миллион инвалид йәшәй, уларҙың 3,6 миллионы - эшкә яраҡлы йәштә. Әммә эш менән ни бары 817 мең инвалид тәьмин ителгән.

**"Башинформ"дан.**

ТАРИХ ЯРСЫҒЫ

# "НИ ШАГУ НАЗАД!"

## Был фарман нисек яҙылған?

**1942 йылда Сталинға, Аҡһаҡ Тимерҙең мавзолей-ҡәберен асыу һуғыш башланыуға сәбәпсе булған, тигән мәғлүмәт еткерәләр. Йәш сағында дини белем алған Сталин был хәлгә осраҡлы күренеш тип ҡарамай һәм тәрән борсолоу кисерә.**

Сталин бөйөк хәрби етәксе Аҡһаҡ Тимерҙе ҡайтанан ерләү, мавзолейын тәртипкә килтереү өсөн 1 миллион һум аҡса бүлергә фарман бирә, шунда уҡ консультация өсөн ислам динен тәрән белгән берәр инсанды табып килтерергә бойора. Ярҙамсылары Сталинға башҡорт халҡының рухи короле Зәйнулла ишандың улы мөфтөй Абдрахман хәҙрәт Рәсүлевтың кандидатураһын тәҡдим итә. Был хаҡта Асҡын районының Ҡашҡа ауылында йәшәүсе 85 йәшлек Гәйзуллин Әгзәм Гәйзулла улы һөйләгәйне. Әгзәм Гәйзуллинды ул төбәктә ололап, хөрмәтләп, Аҡ бабай тип атап йөрөтәләр. Уға илебеҙҙең барлыҡ төбәктәренән тиерлек кәңәш, башлаған эштәренә фатиха биреүен һорап киләләр. Аҡ бабай Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, күп тапҡырҙар яраланған, яуҙа уң ҡулын юғалтҡан. Ул йәшлегендә бик күп арҙаҡлы мосолмандар, шул иҫәптән Зәйнулла ишан Рәсүлев әл Нәҡшбәндиәнең улы Абдрахман Рәсүлев менән дә таныш була. Аҡ бабай һөйләүҙәре буйынса, 1946 йылда ул хәрби госпиталдә ауыр яраларын һауыҡтырып, тыуған яғына ҡайтып килгәнендә, Европа һәм Себер мосолмандары дини идаралығы мөфтөйө Абдрахман хәҙрәткә һуғыла. Хәҙрәт уға бик ҡыҙыҡлы ваҡиға хаҡында бәйән итеп, 1945 йылда донъя күргән "Ислам дине" тигән китап бүләк итә.

Хәҙер теге ваҡиға хаҡында. 1942 йылда фашистар Волгаға яҡынлай. СССР бик ауыр хәлдә тороп ҡала, сөнки Гитлер Волгаға үтә ҡалһа, быға нейтралитет һаҡлаған илдәр фашистар яғында Советтар Союзына ҡаршы һуғышырға әҙер тора. Бына шундай саҡта Абдрахман хәҙрәт Юғары хәрби командующий И. В. Сталиндың ставкаһына килтерелә. Сталин хәҙрәткә Икенсе донъя һуғышының артабанғы ваҡиғаларын нисегерәк күҙаллауы хаҡында һорау бирә. Абдрахман хәҙрәт Сталиндың һорауына яуап биреү өсөн төндә махсус истихар намаҙы башҡарырға, шунан һуң Аллаһы Тәғәләнең яуабын ишетер өсөн ятып йоҡларға тейешлеге хаҡында белдерә.

Истихар намаҙын уҡығас, хәҙрәт йоҡларға ята һәм төш күрә. Төшөндә Аллаһы Тәғәләнең, совет ғәскәрҙәре тағы ла бер аҙымға ғына сигенһә, һуғыш Гитлерҙың еңеүе менән тамамланасағы хаҡындағы иҫкәртеүен аңғара. Иртәгеһен хәҙрәт Сталинға төшөндә күргәндәрен һөйләп биргәс, Юғары хәрби командующий тарихта "Ни шагу назад!" тип аталған киң билдәле директиваһына ҡул ҡуя.

Ошо ярҙамы һәм СССР мосолмандарын фашизмға ҡаршы изге һуғышҡа әйҙәгәне өсөн Сталин Абдрахман хәҙрәткә ярҙам йөҙөнән дин тотоусыларҙың йолаларын башҡарыуҙа бер аҙ ташламалар яһай, ошо юҫыҡта 1945 йылда "Ислам дине" тигән китап сығарырға рөхсәт бирә. Әйткәндәй, был китап Сталиндың Указы буйынса сығарылған берҙән-бер дини китап иҫәпләнә.

"Һеҙ Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәтен тойғанығыҙ булдымы?" тип һораным мин Аҡ бабайҙан. "Аллаһы Тәғәләнең иң ҙур мөғжизәһе - Уның барыбыҙға ла мәрхәмәтле булыуында. Ә һуғышта иһә Аллаһы Тәғәлә минә атыусы немец снайперының йөрәгенә шул мәрхәмәтлекте индерҙе, ул мине атып үлтермәне, ҡулымды ғына яраланы...", тип яуапланы ул.

**Сәғит ИСМӘҒИЛЕВ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҺӘР ЯҢЫЛЫҠ...

## онотолған иҫкелек ул

**Был хәҡиҡәт хәҙер инде бер кемгә лә сер түгел. Бары тик ҡасандыр ҡулланылып, һуңынан инде туҙанға күмеп ҡайҙалыр һалып ҡуйылған барлыҡ нәмә, ваҡыты еткәс, ҡабат һөйрәп сығарылып, саҡ ҡына үҙгәртелеп, заманса телмәргә яраҡлаштырып әйткәндә, модернизацияланып, ҡабат тормошта үҙ урынын ала. Өфө ҡала округы хакимиәтенең сираттағы матбуғат конференцияһында ла ошо хәҡиҡәт баш ҡалҡытты - һүҙ транспорт төрҙәрен үҫтереү, аныҡлап әйткәндә, тиҙ йөрөшлө тауышһыҙ трамвай юлының беренсе сиратын төҙөү хаҡында булды.**



Атай-әсәйҙәр иҫләүенсә, улар йәш саҡта баш ҡалала трамвай юлдары саҡ һалынып, ул транспорттың иң уңайлы төрө булып һаналһа, бер заман бындай составтар, кирећенсә, уңайһыҙлыҡ тыуҙырыу сәбәбе булып күренә башланы: трамвай юлы эргәһендә урынлашҡан йорттарҙа йәшәгән халыҡ был транспорт төрөнөң ҡара таңдан ҡараңғы төнгәсә туҡтау белмәгән тауышынан шаңҡыны. Октябрь проспекты буйлап бер заман тауышһыҙ линиялар ҙа һалып ҡаранылар, ләкин юлдарҙа транспорт ағымының артыуы, тығындар барлыҡҡа килеүе сәбәпле, уларҙы бөтөнләй һүтеп алдылар. Һөҙөмтәлә баш ҡаланың көньяғы менән төньяғы араһындағы трамвай бәйләнеше өҙөләп ҡалды. Граждандар Өфөнөң бер осонанан икенсеһенә транспорттан-транспортҡа күсеп ултырып ҡына барып етә алды. Ошо бушлыҡты тултырырға була, хакимиәт етәкселеге ҡалаға модернизацияланған транспорт төрө - тиҙ йөрөшлө тауышһыҙ трамвай маршрутын индерергә ҡарар итте. Матбуғат конференцияһында сығыш яһаусылар белдереүенсә, бөгөн Европаның күпселек илдәре тиҙ йөрөшлө трамвайға өҫтөнлөк бирә һәм транспорттың ошо төрөнә ҡабат урап ҡайта.

Быйыл уҡ маршруттың беренсе линияһы төҙөлөшөн башлау планлаштырыла ла инде. Ул Зорге - Урман техникумы - Галле урамдарын тоташтырып, 4,2 километр оҙонлоҡтө ялғарға тейеш. Мәсьәләнең шул яғы ла бар: бөгөн трамвай паркының 95 проценты туҙған һәм яңыртыуҙы талап итә. Шуға күрә киләсәктә йәйләп 140 берәмек состав, йәғни парк тулыһынса алмаштырыларға тейеш. Шул уҡ ваҡытта заманса транспорттың иҫке юлдар буйлап йөрөмәйәсәген иҫәпкә алғанда, трамвай линиялары ла тулыһынса реконструкция үтәсәк. Шулай уҡ тиҙ йөрөшлө тауышһыҙ трамвай линияһын булдырыуҙың икенсе иғтибарға лайыҡ мәлдәре лә бар: ул ҡала электричкаһы проектының бер өлөшө булып торасаҡ, йәғни трамвай тимер юлы туҡталыштарына яҡынаясаҡ. Был үҙ сиратында халыҡтың бер урындан икенсе урынға барыу ваҡытын ҡыҫҡартасаҡ. Әле Рәсәйҙә тиҙ йөрөшлө трамвайҙар хеҙмәтләндергән ҡалалар булһа ла, Өфө проекты - Рәсәйҙә тәүгеһе, сөнки ул ҡайһы бер урындарҙа эстакада ҡоролмалары буйлап үтәсәк. Йәғни башҡа төр транспортҡа уңайһыҙлыҡ тыуҙырмаясаҡ. Туҡталыштар урынына ябыҡ станциялар буласаҡ һәм улар физик мөмкинлектәре сикләнгән граждандар өсөн дә уңайлы итеп төҙөләсәк: эстакадаға күтәрелеү өсөн махсус лифттар, эскалаторҙар эшләйәсәк, хатта уларҙа кафе, юл ыңғайы инеп, кәрәкле аҙыҡ-түлек һатып алыу өсөн магазиндар ҙа урынлашыуы мөмкин. Өс станция махсус рәүештә икенсе төр транспортҡа - метробусҡа, ҡала электричкаһына - күсеп ултырыуға ҡулайлаштырыласаҡ. Шулай уҡ һәр станцияла, транспортта именлек һаҡлау маҡсатынан махсус камералар, махсус компьютерҙар урынлаштырыласаҡ. Был инде ҡалала енәйәтселекте кәметеүгә лә килтерәсәк.

Яңы проекты тормошҡа ашырыуҙың тағы бер ыңғай яғы - ҡаланың экологик торошон яҡшыртыу буласаҡ. Әлбиттә, кемдеңдер, трамвай юлдары һалыу өсөн ағастарҙы ҡырҡалар, тип һуҡыраныуы ихтимал, әммә матбуғат конференцияһында белдерелеүенсә, ҡырҡылған һәр ағас урынына ошо тирәләгә территорияла ағастар ултыртыласаҡ. Ә экологик мәсьәләгә килгәндә инде, әгәр бөгөн һауаны бысратыуҙа завод-предприятиеларҙың өлөшө 35 процент булһа, 65 процент автомобилдәр һәм башҡа транспорт өлөшөнә төшә. Шул йәһәттән ҡарағанда ла, граждандар трамвайҙың ыңғай яғын баһаларына өмөт ҙур. Икенсе яҡтан, ҡаланың бер осонан икенсе осона барыу ваҡыты күпкә ҡыҫҡарып (мәҫәлән, Пушкин урамынан "Гастелло" исемендәге стадион" туҡталышына тиклем 40-45 минут кәрәк буласаҡ), ошо ваҡыт эсендә пассажирҙар сымһыҙ интернет менән файҙалана аласаҡ.

Әйткәндәй, әлеге ваҡытта Рәсәйҙең генә түгел, хатта сит илдәрҙең трамвай төҙөү заводтарынан да үҙ хеҙмәттәрен тәҡдим итеүселәр булған. Әммә ҡала округы хакимиәте етәкселеге республика етештереүсеһенең хеҙмәтенән файҙаланыу мөмкинлеген дә инҡар итмәй. Кемгә өҫтөнлөк бирелер - унынһын инде ваҡыт күрһәтер. Әлегә түҙемһеҙлек менән 2015 йылды көтөргә ҡала - тәүге тиҙ йөрөшлө трамвай тап шул йылда маршрутҡа сығасаҡ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Башҡортостанда Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылына арналған "Минең Республикам" йәштәр социаль-экологик акцияһының беренсе этабы старт алды. Төбәктә экология торошон яҡшыртыу, ауылдарҙа уңайлы мөхит булдырыу һәм Башҡортостан экологияһы өсөн йәштәрҙең яуаплылығын арттырыу сараның төп маҡсаты булып тора. Акция республиканың барлыҡ ҡала һәм райондарында май аҙағынаса дауам итәсәк. Тәүге төҙөкләндереү саралары Ағиҙел йылғаһының Салауат Юлаев һәйкәленән алып автомобиль күперенә тиклемге өлөшөндә үтте. Уларҙа ҡаланың юғары һәм урта махсус уҡыу йорттары студенттары - йөмғеһе 400-ҙән ашыу кеше ҡатнашты.

✔Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты Рәсәй Федерацияһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссияһы ярҙамында "Европа контекстында креатив компетенциялар" халыҡ-ара мәғариф проектында ҡатнашты. Был проект сиктәрендә БР ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты делегацияһы Лондонға барып ҡайтты. Делегация составына республикалағы ЮНЕСКО хәрәкәтенең йәш активистары - Өфө, Салауат, Сибай ҡалаларынан мәктәп уҡыусылары, студенттар һәм уҡытыусылар - йөмғеһе 27 кеше инде.

✔Башҡортостанда "Таҙа республика өсөн!" экологик акцияһы үтте. Был көндө ҡала һәм район халҡы экологик өмәләр үткәрҙе һәм территорияларҙы, парктарҙы, скверҙарҙы, юлдарҙы, урмандарҙы таҙартыуҙа, ағас һәм ҡыуаҡтар ултыртыуҙа ҡатнашты. Дөйөм республика өмәһенә Өфө лә әүҙем ҡушылды. Башҡортостан баш ҡалаһында экологик өмәлә 53 мең кеше ҡатнашты, 814 берәмек техника файҙаланылды. Өфөнө йәшелләндереүгә айырыуса иғтибар бүленде - 2,5 меңдән ашыу ағас һәм 1,6 мең ҡыуаҡ ултыртылды.

✔М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты студенткаһы Рида Тимершәйехова төрөк теле буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһында өсөнсө урын яуланы. Мәскәүгә Рәсәйҙең төрлө субъекттарынан килгән 240 кеше араһынан ул иң яҡшыларҙың береһе тип танылды. Быйыл олимпиада туғыҙынсы тапҡыр үткәрелде. Уны ойоштороусылар булып Төркиәнең Мәскәүҙәге илселеге ярҙамында М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының Азия һәм Африка илдәре институты, "Академия" үҙәге, Рәсәй дәүләт китапханаһы сығыш яһаны.

АБРУЙЛЫ БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Республикала абруйлы уҡыу йорттары бихисап. Шулар араһында Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжы айырым урын алып тора. Һәр ваҡыт заман менән бергә атлаусы, белем биреү процесындағы инновацион йүнәлештәрҙе тиҙ тотоп алыусы һәм үҙ эшмәкәрлегендә уңышлы ҡулланыусы, хеҙмәт баҙарында һәр ваҡыт ҙур һорау менән файҙаланған юғары квалификациялы белгестәр әҙерләп сығарыусы уҡыу йорто ошо көндәрҙә үҙенең 80 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Яуланған уңыштар, белем усағы алдына ҡуйылған маҡсаттар һәм уҡыу йортоноң бөгөнгө йәшәйеше хаҡында колледж директоры Сәйфетдин Зәйнетдин улы ҠУНЫСБАЕВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# ӨЛӘСӘЙ-ОЛАТАҺЫ ӨЛГӨҺӨНДӘ...

## ейәндәре лә бында уҡырға килә



➔ **Юбилейына колледж ниндәй ҡаҙаныштар менән килде? Яуланған уңыштарға бер аҙ байҡау яһап үтәйек әле.**

- Һәр уҡыу йорто тере организм кеүек - барлыҡҡа килә, үҫешә, формалаша, уның үҙенә генә хас матур традициялары һәм йолалары хасил була. Беҙҙең колледж да ошо юлдан атлай. Әлеге ваҡытта ул замана талаптарына яуап биргән, киләсәккә оптимистик рух менән ҡараған, динамикалы үҫешкән һәм инновацион режимда эшләүсе уҡыу йорто. Был йылдар эсендә, әлбиттә, уҡыу йортоноң яулаған уңыштары һәм бейеклектәре күп. Шулай ҙа колледждың иң ҙур уңышы - уның оҙаҡ йылдар ихтирамлы, халыҡ араһында киң танылыу яулаған һәм йәштәр тарафынан ҙур һорау менән файҙаланған уҡыу йорто булып ҡалыуы. 80 йыл эсендә колледж 25 меңдән ашыу студентҡа белем биргән, һөнәрле иткән, оло тормошҡа юл асҡан. Әлеге ваҡытта ла был тенденция юғалмаған, тимәк, колледждың киләсәге ныҡлы һәм яулаһаһы уңыштарҙың тағы ла күберәк буласағына шик юҡ.

Ниндәһе ҡыуаныслы, Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжы менән эшлекле бәйләнештәр урынлаштырырға һәм хеҙмәттәшлек итергә теләүселәрҙең дә һаны кәмемәй. Республика ҡалаларының төрлө ойошма һәм предприятиелары хеҙмәткәрҙәре рәтендә беҙҙең колледжды тамамлаусыларҙың бихисап булыуы быға асыҡ миҫал. Һәр эш биреүсе юғары квалификациялы, үҙ һөнәрен һәйбәт белгән белгесте эләктерергә тырыша һәм, әйтергә кәрәк, ҡулында беҙҙең колледждың дипломы булған белгестәр хеҙмәт баҙарында юғары баһалана. Был да уңыштың бер асҡысы, тип иҫәпләйем.

Беҙҙең уҡыу йорто республика, Рәсәй, халыҡ-ара конкурс, фестиваль, күргәҙмәләрҙә һәр ваҡыт ҡатнашып тора һәм призлы урындар яулай. Мәҫәлән, республиканың юғары һәм урта профессиональ белем биреү учреждениелары араһында уҙғарылған "Алтын өкө" конкурсында төрлө дәрәжә дипломдарға лайыҡ булыуҙы, "Европа сифаты" бөтә Рәсәй конкурсының "Рәсәйҙең иң яҡшы 100 урта махсус белем биреү учреждениелары" номинацияһында һәм "Global Education - Сикһеҙ белем алыу" Халыҡ-ара конгресс-күргәҙмәлә лауреат исемдәрен алыуҙы билдәләп үтеү мөһим. Шулай уҡ колледжда белем алыусы студенттар төрлө фестиваль, олимпиада һәм фәнни-ғәмәли конференцияларҙа уңышлы сығыш яһай һәм, тәбиғи, уҙҙәренең ҡаҙаныштары менән улар колледждың мәртәбәһен күтәрә һәм үҫтерә.

➔ **Бөгөнгө көндә колледж алдында торған төп маҡсат нимәгә ҡайтып ҡала? Колледждың белем биреү процесына яңы, заманса технологияларҙы индереү нисегерәк тормошҡа ашырыла?**

- Әлеге ваҡытта эш урыны табыу ауыр мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала килә. Шуға күрә дипломлы йәш белгес үҙ һөнәрен һәйбәт белергә һәм иң яҡшылар рәтендә булырға тейеш. Бының өсөн уға уҡыу йортонда алған теоретик белемен ғәмәли йәһәттән сифатлы ҡуллана белеү мөһим. Был оҫталыҡты һәм маһирлыҡты беҙҙең колледжда белем алыусылар яҡшы үҙләштерһен өсөн тырышабыҙ.

Бөгөн уҡыу процесына Федераль дәүләт белем стандарттарын индереү төп урынды алып тора. Был йәһәттән беҙҙең колледж уҡытыусылары һөҙөмтәле эшмәкәрлек алып бара. Мәҫәлән, быитыр Рәсәй федераль белем биреүҙе үҫтереү институты беҙҙең өс профессиональ белем биреү программаһын, йәғни өс йүнәлеш буйынса уҡыу стандартын, бөтә ил кимәлендә миҫал булырлыҡ статус менән раҫланы. Рәсәй территорияһындағы урта махсус белем биреү учреждениеларының күплеген иҫәпкә алғанда, был беҙҙең уҡытыусылар коллективының, колледждың замандан артта ҡалмайынса, яңы технологияларҙы күҙ уңында тотоп, инновацион йүнәлештәрҙән тайпылмайынса юғары кимәлдә эшләй алыуының асыҡ миҫалы.

➔ **Колледжға белем алырға килеүсе контингентты нисек билдәләр инегеҙ?**

- Беҙҙең колледжда бөгөнгө көндә киң популярлыҡ менән файҙаланған компьютер селтәрҙәре, автоматлаштырылған системаларҙың мәғлүмәти хәүефһеҙлеге, компьютер системаларында программалау, мәғлүмәти системалар, иҡтисад һәм бухгалтер иҫәпләү, ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре һәм башҡа һөнәрҙәрҙе үҙләштерергә, белемде үҫтерергә һәм квалификацияны күтәрергә мөмкин. Шуға күрә беҙгә уҡырға килергә теләүселәр һаны кәмемәй, ә йылдан-йыл арта ғына бара. Уларҙы ике категорияға бүлеп ҡарарға мөмкин.

(Дауамы 6-сы биттә).

ҺОРАУ - ЯУАП

# ҺАЛЫМ ХӘЛЕ НИСЕК?

**Һалым һалыуҙың патент системаһына күсеү өсөн шәхси эшҡыуарға нимә эшләргә кәрәк?**

- РФ Һалым кодексының 346.43-сө статьяһына ярашлы, һалым түләүҙең патент системаһы Һалым Кодексы менән билдәләнә, Рәсәй Федерацияһы субъекттары законы менән ғәмәлгә индерелә һәм күрһәтелгән субъекттар территорияһында тормошҡа ашырыла. Башҡортостан Республикаһында һалым һалыуҙың патент системаһы 2012 йылдың 29 октябрендә ҡабул ителгән "Башҡортостан Республикаһының һалым һалыуҙың патент системаһы тураһында" 592-з һанлы законға ярашлы ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инде.

Күрһәтелгән Закон тарафынан һалым һалыуҙың патент системаһы ҡулланылған һәр төрлө шәхси эшҡыуарлыҡ буйынса бер йылда алырға мөмкин булған потенциаль килем күләме билдәләнгән. Шулай итеп, ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан һалым һалыуҙың патент системаһына күсергә теләүсе шәхси эшҡыуарҙар патент алыуға ғариза яҙырға тейеш.

**Ниндәй закон нигеҙендә дәүләт чиновниктарынан килемдәре хаҡында отчет талап итәләр?**

- Рәсәй Федерацияһы Президентының 2009 йылдың 18 майында ҡабул ителгән Указына ярашлы, федераль дәүләт хеҙмәтендә эшләүселәр һәр йылдың 30 апреленән дә ҡалмай үҙҙәренең килеме, мөлкәте һәм мөлкәт рәүешендәге йөкләмәләре тураһында мәғлүмәт тапшырырға тейеш. Башҡортостанда был нормалар Башҡортостан Республикаһы Президенты тарафынан 2009 йылдың 31 декабрендә ҡабул ителгән Указға ярашлы атҡарыла.

**Нимә ул һалым бәхәсе? Ойошма, шәхси эшҡыуар һәм ябай граждандар һалым органдарына ниндәй бәхәсле һорауҙар менән мөрәжәғәт итергә мөмкин?**

- Һалым кодексы, һалым һалыу системаһы, ғөмүмән, һалымға ҡағылышлы һәр бәхәсле һорау - һалым бәхәсе, тип атала. Һалым инспекторы, һалым ойошмаһы етәксеһе һәм тотош һалым ойошмаһы үҙ эшмәкәрлеге, ҡарары йәки, киреһенсә, тейешле эшмәкәрлекте башҡармауы менән һалым ҡануниәтен боҙҙо, тип иҫәпләүсе һәр кеше йәки ойошма был хаҡта тейешле органдарға еткерә ала. Һалым органына килгән һәр ялыу объектив рәүештә махсус һалым аудиты бүлексәһе тарафынан тикшерeләсәк. Әйтергә кәрәк, һалым ойошмаһына килгән күпселек ялыуҙар һалым тикшереүҙәре һөҙөмтәһендә ҡабул ителгән ҡарарҙар менән ризалашмауға ҡайтып ҡала. Мәҫәлән, 2012 йылда республика һалым органдары тарафынан 740 ялыу ҡаралған һәм уларҙың 32 проценты тулыһынса йәки өлөшләтә ҡәнәғәтләндерелгән. Шулай уҡ һалым түләүсенең хоҡуҡтарын боҙған өсөн һалым органдарының 31 хеҙмәткәре дисциплинар язаға тарттырылған.

**БР буйынса Федераль Һалым инспекцияһы әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Диабет

Әгәр ҙә саманан артыҡ һыуһайһығыҙ, күп бәүел бүленеүе күҙәтелә, устар, аяҡ табандары яна, хәлегеҙ бөтә, тирләйһегеҙ һәм күреү һәләте насарайһа, тиҙ арала эндокринологҡа мөрәжәғәт итеп, шәкәргә анализ бирергә кәрәк. Ҡанда йәки бәүелдә шәкәр табылһа, уның нигеҙен асыҡларға һәм шунан һуң ғына 5 төп ҡағиҙәне - асығыу, өшөү, әселек, хеҙмәт һәм организмдың әселеген үтеүгә тотонорға кәңәш итәм. Ҡыҫҡаһы, асыҡҡанда, тире өшөгәндә (мәҫәлән, контраст ҡойоноу, һыу инеү) шәкәр түбәнәйә. Тик өшөгәндән һуң тиҙ генә йылынырға кәрәк. Әсе ризыҡтар, үләндәр ашҡаҙан аҫты биҙҙәренең инсулин эшләп сығарыу буйынса эшмәкәрлеген көсәйтә. Физик эш ҡандағы шәкәрҙе мускулдар ярҙамында яндыра. Әселек шәкәр һәм майҙарҙың тарҡалыуына булышлыҡ итә. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: "татлы" ауырыу әселек ярҙамында иҫкәртелә.

Әсе үләндәрҙән ҡурҡмағыҙ, улар бәләкәй күләмдә организм өсөн бик файҙалы. Шуны ла онотмағыҙ - шәкәр диабетынан дауланыу бик еңел түгел, унда һәр ауырыуға һәр аныҡ осраҡта айырым ҡараш кәрәк һәм былар барыһы ла тәжрибәле табип күҙәтеүе аҫтында башҡарылһын.

Диабетҡа ҡаршы дарыу үләндәренең тәьҫире төрлөсә. Уларҙың береүҙәре ҡандағы шәкәр күләмен түбәнәйтә, ҡайһылары ашҡаҙан аҫты биҙе күҙәнәктәренән инсулин бүленеүен әүҙемләштерә. Шуны ла әйткем килә: үләндәрҙең тәьҫире химик препараттарға ҡарағанда көсһөҙөрәк булһа ла, улар яҡшы сифаттарға ла эйә, мәҫәлән, уларҙы оҙайлы ваҡыт организмға зыян килтермәйенсә ҡабул итергә ярай.

❖ 20-шәр грамм ҡара көртмәле, ҡыҙыл көртмәле (брусника) япраҡтары, галега үләне, 10-ар грамм эт муйылы ҡайырыһы (кора крушины) һәм ҡайын япрағы алырға. Эт муйылын ваҡлап, 20 минут ҡайнатырға, ҡалған компоненттарға 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, утта 3 минут дауамында йылытырға, бергә ҡушып болғатырға. Ашар алдынан көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Йәш баланы һаҡлауға бәйле им-том

**Ҡором һөртөү.** Күҙ теймәһен өсөн баланың маңлайына, шуға күҙе төшһөн, тип, ҡором һөртәләр йә күмер һыҙалар. Ҡором аша күҙ тейһә, имләп булмай икән. Шуға әбейҙәр әүәле ҡором һөрттөрмәгән.

### Сәңгелдәккә бәйле им-том

Яңы тыуған балаға сәңгелдәк әҙерләнә. Уны талдан, миләштән, муйылдан, шыршынан, ҡарағайҙан, усаҡтан, туҙҙан, ҡабыҡтан, йүкәнән яһағандар. "Ҡайын ҡайғылы ағас", тип, ҡайындан бишек яһау тыйылған. "Миләштән зәхмәттәр, ен-пәрейҙәр ҡурҡа", тип миләш сәңгелдәкте хуп күргәндәр. Бишеккә, сәңгелдәккә, зәхмәт, ен-шайтан килмәһен, тип, бетеү, боронғо китап, артыш сыбығын, баланың киптерелгән кендеген, ҡарын сәсен, миләш тағыу йолаһы булған. Баланы сит-ят күҙҙән, ен-шайтандан һаҡлау өсөн бишеккә мотлаҡ шаршау элгәндәр. Сәңгелдәккә тағы төрлө суҡтар, тәңкәләр тағыу, бысаҡ, ҡайсы йә башҡа тимер әйбер һалыу йолаһы ла булған. Элек бишек төбөнә сөрөк һалғандар. Еүешләнһә, бысранһа, алыштырып, киптереп торғандар.

Ышаныуҙар буйынса, баланы сәңгелдәктән алғас, урынына берәй тимер әйбер, Ҡөрьән, бетеү һалырға кәрәк, сөнки шайтан менеүе ихтимал. Бишек янынан алыҫ китергә ярамаған. Алыҫ китһәң, баланы шайтан алыштыра, тиҙәр. Бишекте урамға, сит кеше булған ергә сығарыу ҙа тыйылған. Ололар әле лә буш бишекте бәүетергә ҡушмай, бала илаҡ була, тиҙәр. Бәүетһәң, бишеккә шайтан менә икән. Ололар бишектең өҙөләп төшөүөн дә яратмаған. "Бала бишегендә шайтан ятҡан, шуға уны күтәрә алмайынса, бишек бауы өҙөлгән", - тиҙәр.

### Йәш баланы ҡырҡ көнгә тиклем һаҡлау

**Көҙгө менән бәйле тыйыу.** Йәш баланы көҙгөгә ҡаратырға ярамай. Көҙгөгә ҡараһаң, бала оҙаҡ һөйләшмәй, йә тотлоғасаҡ, йә үсмәйәсәк. Йәш балаға көҙгө бирергә ярамай, аҡылы зәғифләнә.

**Бала кейеме менән бәйле тыйыу.** Йәш баланың кулдәгән әйләндереп йыуырға ярамай, зәғиф, ауырыу була. Баланың йыуып кибергә элгән кейемдәрен төнгә урамда ҡалдырырға ярамай. Ен-шайтан сихыры тейә.

**Ҡырҡ көнгә тиклем һаҡлау.** Баланы ҡырҡ көнгә тиклем яңғыҙын ҡалдырырға ярамай. Баланы ен-шайтандар алмаштыра. Бала боҙола, ауырый башлай.

**Ел зәхмәте менән бәйле тыйыу.** Йәш бала эргәһенән итәк елберләтеп үтеүҙе, янында кейемһалым ҡаҡҡылауҙы ла тыйған боронғолар. Ышаныуҙар буйынса, ел зәхмәте тейеүе ихтимал.

### Ҡыҙыл әҙер менән бәйле тыйыуҙар

Ишек асҡанда, бигерәк тә кис ҡыҙыл әнерҙә, йәш баланы шаршау артынан сығарырға ярамай.

Йәш бала булған өйгә ҡыҙыл әнерҙә барырға ярамай, һиңә эйәреп, ен-шайтан, төрлө зәхмәт инеүе ихтимал.

### Мунса менән бәйле тыйыуҙар

Мунсала йыуындырғанда йәш баланы эләүкәгә һалырға ярамай. Шуға баланы мунсаға мотлаҡ ике кеше алып барырға тейеш. Йәш баланы ҡулдан ҡулға биреп кенә мунса төшөрәләр. Ҡыҙыл әнерҙә йәш баланы мунсаға алып барырға ярамай.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

АБРУЙЛЫ БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ӨЛӘСӘЙ-ОЛАТАҺЫ ӨЛГӨҺӨНДӘ...

## ейәндәре лә бында уҡырға килә

**(Башы 5-се биттә).**

Тәүге төркөмгә бер нәҫелдән булғандарҙы индерергә була, йәғни ошо уҡыу йортонда ҡасандыр белем алған кешеләрҙең балалары, ейәндәре лә нәҡ бында уҡырға килә. Бындай нәҫелдәр беҙҙә байтаҡ һәм артабан да был матур йола боҙолмаҫ һәм дауам итер, тип ышанам.

Һәр кем балаһына һәйбәт белем бирергә ынтыла, ләкин барыһы ла юғары уҡыу йортонда уҡытырлыҡ, ундағы ҙур суммаларҙы түләрлек мөмкинлеккә эйә түгел. Тик юғары уҡыу йортона бара алмау бөтөнләй белемһеҙ ҡалыуҙы аңлатмай. Юғарыға үрләүҙе бәләкәй еңеүҙәрҙән дә башларға мөмкин. Нәк ошондай уҡыусылар өсөн колледж оло донъяға илтеүсе, яңы тормошҡа старт биреүсе майҙансыҡ булараҡ сығыш яһай. Улар беҙҙә уҡый, төплө белем ала, һәйбәт эшкә урынлаша һәм артабан ҡыҫҡартылған программа буйынса юғары уҡыу йортона уҡырға инеп, белемен камиллаштыра. Был юлды мин кешене бейеккә илтеүсе социаль лифтҡа тиңләйем.

Һәр кеше үҙ карьераһын йә вертикаль, йә горизонталь йүнәлештә яһай. Вертикаль йүнәлеш, тигәндә, мин урта мәктәптән һуң артабан юғары уҡыу йортонда уҡыуҙы, аспирантура, магистратура тамамлауҙы, эшкә урынлашыуҙы күҙ уңында тотам. Ә горизонталь йүнәлештә "үҫкән"дәр рәтенә урта мәктәптән һуң ниндәйҙер колледж йәки училищела белем алып, һәйбәт эшкә урынлашып, үҙенең донъяуи сығымдарын ҡаплай алырлыҡ аҡса эшләү мөмкинлегә алған һәм, тәбиғи, юғары уҡыу йортона уҡырға инеү өсөн етерлек финансҡа эйә булғандарҙы индерергә була. Беҙгә уҡырға нәҡ ошо икенсе юлды һайлағандар килә лә инде. Бөгөнгө көн белем биреү сәйәсәте лә, минең аңлауымса, кешене горизонталь йүнәлештә үҫеүгә этәрә һәм дөрөҫ эшләй ҙә. Кешенең аңына бер ниндәй ауырлыҡтарға, кәртәләргә ҡарамайынса, бары тик юғары белемгә ынтылырға кәрәк, тигән стереотип һалынған. Ләкин юғары белем мотлаҡ был тормошта лайыҡлы урын табырға ярҙам итәсәк, тип уйлау хата фекер. Әҙме ни бөгөн, мәҫәлән, юғары белем алып та үҙ һөнәре буйынса эш тапмайынса башҡа йүнәлешкә киткәндәр? Юғары белемле юрист, иҡтисадсы һәм башҡа һөнәр эйәләре ҡыҫҡа ваҡытлы курстар тамамлап, һатыусы, кассир һәм башҡа ошондай эштәрҙә эшләй. Тимәк, уларға тормоштарын вертикаль йүнәлештә ҡороу уңыш килтермәгән һәм улар уны горизонталь йүнәлештә яңынан ҡорорға мәжбүр.

**➔ Республиканың ниндәй уҡыу йорттары менән бәйләнеш тотаһығыҙ?**

Колледж төбәктәге юғары белем биреү йүнәлешендә эшләгән бөтә уҡыу йорттары менән дә тиерлек тығыҙ бәйләнештә эшләй. Атап әйткәндә, Башҡорт дәүләт университеты, Өфө дәүләт авиация университеты, Башҡорт дәүләт аграр университеты, Башҡорт дәүләт нефть техник университеты, РФ Хөкүмәте янындағы финанс академияһы, Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идараһы академияһы, Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис университеты һәм башҡа уҡыу йорттары менән тығыҙ эшмәкәрлек алып барабыҙ. Беҙҙең колледжды тамамлағандар артабан ошо уҡыу йорттарында ҡыҫҡартылған программа буйынса белемдәрен камиллаштырыу мөмкинлегенә эйә.

**➔ Колледжды тамамлағандарҙың эшмышын күҙ уңында тотаһығыҙмы?**

- Һәр уҡыу йорто үҙенең кисәге студенттарының эшмышы менән ҡыҙыҡһына. Был йәһәттән беҙҙә лә эш төплө ҡуйылған. Әгәр ҙә колледж тамамлаусыларҙың ҡайҙа эшкә урынлашыуын, күпме белгестең эш менән тәьмин ителеүен, ниндәй өлкәлә үҙҙәрен табыуын белмәһәк, артабанғы уҡыу процесын лайыҡлы ойоштора алмаҫ инек. Хеҙмәт баҙарындағы теге йәки был һөнәрҙең ниндәй һорау менән файҙаланғанлығын белеү өсөн бындай эшмәкәрлек мөһим алып барылырға тейеш, сөнки "кисә" булған белем биреү программаһы "бөгөнгө" талапҡа тура килмәүе бар. Бындай рәсмилек менән бер рәттән, кешелеклелек факторын да күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Оло тормошҡа беҙҙең ишектәр аша сығып киткән студенттар әллә күпме ваҡыт үтһә лә беҙгә кисә генә мәктәптән һуң уҡырға килгән балалар булып ҡаласаҡ. Уларҙың эшмышы колледж, ә колледждағы улар менән тығыҙ бәйләнгән һәм был еп, йылдар үтеү менән нескәрһә лә, өҙөлмәй. Быны шулай иҡәнлеге яңыраҡ булып уҙған юбилей кисәһе миҫалында асыҡ күренде. Колледжды 40-50 йыл элек тамамлап сыҡҡандар ҙа әле булһа үҙҙәрен ошо уҡыу йортоноң бер өләшө итеп күрәп, сағыу сығыштар яһаны, матур теләктәрен еткерҙе.

**➔ Уҡыу йортон студентһыҙ күҙ алдына баҫтырып булмай. Һеҙҙең ҡарамаҡҡа, ниндәй ул бөгөнгө студент?**

- Йылдан-йыл студент мөхите ҡыҙыҡлыраҡ була бара. Уларҙа яҡшы рухи үҫеш яғынан прогресс күҙәтелә, тип әйтер инем. Тирәяҡҡа, донъяға, кешегә ҡарата булған ҡараштың яҡшыра барыуы шатландыра. Алдағы йылдарҙа белем алыусылар менән сағыштырғанда, хәҙерге студент үҙен иркенерәк тоя һәм йәшәй. Ул был тормоштан үҙенең нимә көткәнен һәм телә гәнен яҡшы аңлай. Күнелендә йөрөткән хыялына табан ҡыйыу аҙымдар менән атлай һәм төрлө кәртәләрҙе үтергә ҡурҡмай. Белем алыуҙың, һөнәрле булыуҙың мөһимлеген яҡшыраҡ төшөнә һәм уҡыу процесына яуаплыраҡ ҡарай. Шулай уҡ ул һәр ваҡыт эҙләнеү өҫтөндә. Элекке ваҡыттың бер ҡалыпҡа һалынған тормош талаптарынан арынып, улар йәмғиәттә үҙҙәренә генә хас булған һәм күңелдәренә яҡын урын эҙләй. Бөгөн беҙгә уҡырға килгән студент колледждың беренсе курсында уҡ үҙенең киләсәген уйлап, уны яҡшы һәм лайыҡлы итеү өсөн аҙымдар эшләй. Шул уҡ ваҡытта йылдан-йыл студенттарҙың теоретик белемдәренең кәмеүе хәүефкә һала. Әлбиттә, көслө әҙерлек менән килгән балалар ҙа бар, ләкин шул уҡ ваҡытта бик һай белемлеләре лә етерлек.

**➔ Студенттың шәхси үҫешенә булышлыҡ итеү маҡсатында колледжда ниндәй эштәр башҡарыла?**

- Студент йылдары ғүмерҙең иң матур осороноң береһе. Йәш саҡта энергия ташып тора, амбициялар юғары, бар нәмә лә ҡулдан килгән кеүек тойола. Һәм, әлбиттә, был осорҙа бары тик уҡыу менән генә шөғөлләнеү мөмкин түгел, сөнки күңел талпына, ашҡына, йөрәк сығып бара. Беҙ, үҙ йәһәтебеҙҙә, ошо ташып торған энергияға һыңай йүнәлеш биреп ебәрергә тейешбеҙ. Был йәһәттән колледжда студентты шәхси яҡтан үҫтереүгә һәм профессиональ йәһәттән камиллаштырыуға йүнәлтелгән тәрбиәүи эштәр алып барыла. Быныҡ өсөн колледжда төрлө түңәрәк, ойошмалар эшләй, гөмүмән, һәр кем буш ваҡытын үҙенең теләге, мөмкинлеге һәм ҡыҙыҡһыныуына ярашлы уҙғара ала. Атап әйткәндә, беҙҙә "Эдельвейс" вокал, "Жизель" эстрада бейеүҙәре, "Ынйы" халыҡ бейеүҙәре, "Караш" телевизион, "Үҙебеҙ" тигән шаяндар һәм тапҡырҙар командаһы, "Брифинг" журналистика, "Ҡурай" милли ҡоралдарҙа уйнау, "Сюжет" театраль студиялары һәм башҡа төрлө түңәрәктәр уңышлы эшләй. Шулай уҡ спортҡа, сәләмәт тормош алып барыуҙы пропагандалауға ла ҙур иғтибар бүленә. Студент үҙидарағының үҫтереү шулай уҡ педагогик коллектив алдында торған тәүбурыстарҙың береһе. Колледжда булдырылған һәм уңышлы эшмәкәрлек алып барған Лидерҙар мәктәбе, Студенттарҙың ҙур Советы быға булышлыҡ итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Уҡыу йортоноң олпатлығын һәм дәрәжәләгән уның юбилей һандары ғына билдәләмәй. Йәмғиәттең ышаныһын һәм ихтирамын яулау өсөн көсөргәнешле хеҙмәт, үҙ эшеңә иғтибарлы һәм етди ҡараш талап итеlә. Быларҙың барыһының да Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжына хас булыуы уны халыҡ араһында киң билдәле итә лә инде. Бай тарихлы, ышаныслы бөгөнгөһө һәм өмөтлө киләсәге булған был уҡыу йортоноң алда яулаясаҡ уңыштарының күп һәм әһәмиәтле буласағына шик юҡ.**

**Гөлназ САФУАНОВА әңгәмәләште.**

✓ *Зәйнулла ишан үҙ тыуған ауылынан 40-45 саҡрым ерҙә ятҡан Ирәмәл һәм уның армыттары менән рухи бәйләнештә йәшәгән. Тауҙарға сәфәргә сығыр алдынан, тау эйәһенә арнап, ҡорбан салдырған.*



*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ РУХИ ШАҺЫ...

## Зәйнулла ишан тураһында тағы бер кәлимә һүҙ



Суфыйсылыҡтың сабырлыҡҡа, түҙемлелеккә өндәгән вәғәздәре ҡәтғи холоҡло яу кешеләрен, мәҫәлән, башбирмәҫ башҡортто кәрәкле урында күп ҡырылыуҙан да һаҡлаған. Рух тойғоһо тәғлимәте зиһене менән эске ауаздашлыҡ табып, теләгенә ярашлы хис уятҡан. Суфыйсылыҡҡа шаманлыҡ ҡамлау ҙа хас. Традицион исламда Ҡөрьән Кәримде үҙ алдына ғына, йәки өндәшмәй генә уҡыу - төп алым. Мәҫәлән, көндәлек башҡарылған биш намаҙ. Намаҙ уҡыған кеше ҡиблаға ҡарап тороп, алдына намаҙлыҡ йәйеп, сүрә аяттарын ҡысҡырмай ғына үҙ алдына эстән һөйләй. Ул яңғыҙы. Намаҙ уҡыған кешенең алдында башҡа кеше торорға ла тейеш түгел. Мулланың вәғәз һөйләүе ҙур дини байрамдарҙа, аят мәжлестәрендә тыңлана. Дөйөм алғанда, намаҙ уҡыу - үҙ алдыңа ғына Аллаһы Тәғәләгә инаныу. Унда йәмғиәт талап ителмәй.

Суфыйсылыҡта, бигерәк тә уның ҡамлау алымдарына, йәмғиәттең булыуы мотлаҡ. Ҡамлау кешеләргә үҙендә ышаныс көсөн тыуҙырыу өсөн кәрәк. Тиккә генә кешеләр һәм йәмғиәт Зәйнулла ишанға тартылмаған. Уның мөриттәре үҙҙәрен иркен һәм азат тойған.

Ҡайһы бер дин әһелдәре Зәйнулла ишанды аңламаған. Уны һәр төрлө мөртәтлек, сихыр, сифатһыҙ ҡамлау алымдары ҡулланып, халыҡты батшаға ҡаршы ҡоторта, тип, төрмәгә, ә унан һөргөнгә ебәреүгә өлгәшәләр. Уларҙың был ялыуҙары империализм һәм шовинизм дегетенә ҡойонған батша ялсылары өсөн бик тә уңай сәбәп була. Шул бысраҡ алым Рәсәйҙе бөтә тарихы буйлап оҙатып килә. Ул бөгөн дә шулай. Әҙ генә тыуған халҡыңды, телеңде, ереңде, тәбиғи булмышыңды яҡлап бер-ике һүҙ әйттеңме, һин радикал, һин милләтсе. Кавказдарға хатта "Вор, бандит, экстремист" кеүек тупаҫ исемдәр тағып ҡуйҙылар. Һәр төрлө исем тағыуҙар Рәсәй сәйәсмәндәре алымы...

Суфый тәриҡәтенең төп сифаты, үрҙә әйткәнемсә, шәхси кисерештәрҙе йыйып үткәреү. Кисерештең эсенә инеү. Һүҙ, тойғо кеше балаһын хәрәкәткә килтерә. Кисереш үҙенән-үҙе хәрәкәт талап итә. Ә хәрәкәт - кеше тәбиғәтенә ярашлы. Юҡҡа ғына халыҡ "Хәрәкәттә - бәрәкәт" тимәйҙер. Суфыйсылыҡ түҙемлек, сабырлыҡ, йыуашлыҡ менән бер ҡатарҙан, кешене кешелекле, тоғро һәм дөрөҫ, таҙа күңелле булырға өйрәтә. Ул һәр ваҡыт кире яҡты тәнҡитләй. Уға фани тормошҡа ҡәнәғәт булыу хас, әммә уға баһа биреүҙе өнәмәй. Кешеләргә рәхәтлек тыуҙырыуға, йылы мөнәсәбәт ҡылыуға баһа биреүҙе хуп күрә. Шулай ҙа суфыйсылыҡты ислам тәғлимәте фәйләсуфтары тыуҙырған һәм ул, нигеҙҙә, дүрт йүнәлештә - Нәҡшбәндиә, Хәлидиә, Нәсәвиә һәм Ҡәҙриә исемле йүнәлештә һәр береһе үҙ аллы юл алған. Һәр береһен дини мәғрифәтселектә генә түгел, донъяуи алымдар һәм үҙ тәғлимәте өлкәһендә остаз булырлыҡ шәхестәр етәкләгән. Әммә тәбиғәт, тереклек донъяһын бер төрлө итеп яратмаған кеүек, уның остаздарының да, уларға эйәргән йәмғиәттең дә рухи кимәле, тормош, йәшәү шарттары төрлөсә. Бәхәстәр ҙә, тәкә булып төкәшеүҙәр ҙә әҙ булмай. Остазға эйәреп, йәмғиәттәре лә үҙ-ара айпалышып, гонаһҡа керә. Әммә уларға дөйөм һыҙат - мәғрифәтселек һәм мәҙәниәттәренең дөйөм һыҙаттары хас. Йәмғиәт үҫешенең артта ҡалыуы менән килешмәүсәнлек, кеше зиһененең камиллығы, сикһеҙлеге, әхлаҡ алымдарын йылдам үҫтереү, төрлө сифатта рухи һәм фани азатлыҡ эҙләү - суфыйҙарҙың эске ҡануны ғына түгел, ә булмышы.

Тәриҡәттәгеләр шәхси хужалыҡты ойоштороу алымында ла азатлыҡты өҫтөн күргәндәр. Матди байлыҡты, ҡулланыу әйберҙәрен, аҙыҡ-түлекте үҙҙәре етештереүгә, дөйөм хеҙмәт, дөйөм хужалыҡҡа төп урын биреү ҡаралған. Быны Зәйнулла ишандың хужалығы, дөрөҫөрәге, Рәсүлиә мәҙрәсәһе хужалығы миҫалында асыҡ күрергә була. Әгәр ҙә Рәсүлиә мәҙрәсәһендә дөйөм хужалыҡ алымы ҡулланылмаһа, уның бинаһын, ике йөҙҙән артыҡ шәкертте, егермеләгән хәлфәне, ғаиләләрен, уҡыу, уҡытыу әсбаптары һатып алыу, ойоштороу эштәрен хәйер-саҙаҡа килемենә генә аҫрап, ғәмәлгә ашырып булмаҫ ине. Беҙ быны хәҙерге заман кешеләренең хәтирәләренә лә таянып, Зәйнулла ишанға тасаууыф ғилемен, Нәҡшбәндиә тәриҡәтен өҫтәмә өйрәтеүсе остазы, Сарҙаҡлы ауылының шәйехе Ғәбделхәлим хәҙрәт тураһында һөйләнгәндәрҙән дә беләбеҙ. Ул да мәҙрәсә тотҡан, уның да мәҙрәсәһенең төп нигеҙе булып тәриҡәт ғилеме, шулай уҡ дөйөм хужалыҡ алымы торған.

Суфыйсылыҡта, дөйөм хеҙмәттән тыш, тормош һабаҡтарын өйрәтеү ҡомары, өгөт-нәсихәт йоғонтоһо көслө була. Һәм был алымдар Зәйнулла ишандың вәғәздәренә бер юлы хатта меңәрләгән кешеләрҙе йәлеп иткән. Башҡорт илендә колонизация сәйәсәте көсәйеүе халыҡ күңеленә азатлыҡ орлоғон әленән-әле һала тора. Азатлыҡ фекере киңерәк тамыр йәйһен өсөн дини, фәлсәфәүи йәки тормош ҡануниәтенән башҡа, фәнни белем дә талап ителә. Үҙ халҡыңдың тарихынан тыш, тәбиғәттең үҫеш ҡанундарын, ер хәритәһен өйрәнеү, есемдәрҙең сифатын һәм төҙөлөшөн белеү кәрәклеге зарур була. Уны ғилемгә ынтылыусы шәкерттәрҙең дә рухиәте талап итә. Шуға ла Зәйнулла Рәсүлев мәҙрәсәлә төп ислам тәғлимәте, уның сатамаҡайы булған суфыйсылыҡ тәриҡәтенән тыш, йәҙитсә уҡыу, фән нигеҙҙәрен уҡытыуҙы ла индерә. Был эштә уға Ҡаһирәлә Әл-Әзһәр университетын тамамлап ҡайтҡан улы, буласаҡ Башҡортостан мөфтөйө Абдрахманык ярҙам итә. Маҡсаты фәнни йәҙитселек, дөйөм ғилемдән тыш, мосолман төрки халыҡтарының тәбиғи тормошсанлығын, рухын үҫтереү бурысы була. Шәйех Зәйнулла бин Хәбибулла Нәҡшбәнди тәрән рухи әхлаҡлы кеше булараҡ, "ғүмер осоро мосолманын" эҙләгән. Йәштәр күңеленә азатлыҡ, ғилем орлоҡтары һалған.

Башҡорттар борон-борондан, үҙҙәре милләт булып ойошҡанға тиклем үк, меңәр йыллыҡ төпкөлөндә тәбиғәт менән рухи туғанлыҡты тойоп йәшәгән. Зәйнулла ишан да, башҡа башҡорттар кеүек үк, тәбиғәт балаһы була. Боронғо төркиҙәр кеүек, өс таған таймаҫ, хәҡиҡәтенә ышанып йәшәй. Улар, боронғо төркиҙәр, Аллаһы Тәғәлә ҡолдарына юл өйрәтеү өсөн күҙгә күренмәй торған бәләкәй бәйғәмбәрҙәрен өс мөһабәт тау аша ергә төшөрөр булған, тип иҫәпләгәндәр. Ул бәйғәмбәрҙәр кешеләрҙең фани донъяла ҡулланылырға тейешле бөтә хазиналарын да һаҡлаусы һәм яҡлаусы булып күңелдәрендә һынланған. Төркиҙәрҙең күңел хазинаһын дөйөмләштереүсе ул тауҙар өсәү: Тәнйәндә - Ҡайлас, Алтайҙа - Тәңрехан, Уралда - Ирәмәл.

Зәйнулла ишан үҙ тыуған ауылынан 40-45 саҡрым ерҙә ятҡан Ирәмәл һәм уның армыттары менән рухи бәйләнештә йәшәгән. Тауҙарға сәфәргә сығыр алдынан, тау эйәһенә арнап, ҡорбан салдырған. Әммә уның тәғәйенләнешен бар ғәләмгә фаш итмәгән. Шулар тураһында хәтерләп һөйләр ине Әүеш, Әүлиә тауы буйындағы Иҫке Байрамғол ауылында йәшәп, күптән инде баҡыйлыҡҡа күскән, атайымдың бер туған оло апаһы Сабира әбейем Сәйфетдинова-Ильясова. Ғөмүмән, Зәйнулла ишандың тауҙар менән бәйләнеше үҙе бер тарих, үҙе бер сер... Тура килһә, ул турала ла, бәлки, киләсәктә бәйән итербеҙ.

Зәйнулла ишан бигерәк тә яҙ миҙгелен һағынып көткән. Ер-һыу кибеп, япраҡ йәбешкәкләүенән туҡтағас, килгән кешеләрҙән ул: "Уй шырлығында, ҡарағас түбә арҡаһындағы сауҡалыҡта кәкүк саҡырамы?" - тип һораған. "Саҡыра" тиһәләр, "Әләйһә, иртәнән һуңға иртәнге намаҙҙан һуң аттарҙы егегеҙ, ала юрғаны эйәрләп бәйгә алығыҙ", тип бойорған.

Ғөмүмән, суфыйсылыҡ тәриҡәте һәр кемгә еңел бирелмәгән. Ни тиһәң дә, уға айырым бер һәләттең юлдаш булыуы шарттыр. Һәр кем уға өлгәшә лә алмаған. Шуғалыр ҙа, бәлки, күп рух һәм хеҙмәт талап иткән тәриҡәтте үҙ итеүсе лә күп үк булмай. Халыҡтағы "Соҡоп ҡарға булмаҫһың, уҡып, суфый булмаҫһың", тигән мәҡәлде ул өлкәләге өмөтһөҙ шәкерттәргә әйтер булғандарҙыр, тип уйланыла. Йәнәһе, тәғлимәтте камил итеп өйрәнә алмаҫһың, уны үтәүсе генә булһаң да сауап алырһың. Суфыйҙар -эскерһеҙҙәр. Үҙ рухына мөкиббән инанып йәшәүселәр. Улар исламдың рухи үҙәгендә тороусылар. Аҡыл менән зиһен бер түгел, зиһен төптәрәк ятһа ла, аҡылдың өҫтөндә ултыра, тип өйрәткән ишан. Һәм, ысынлап та, аҡыл зиһендең бер өлөшө кеүек. Аҡыл анды тыуҙырыусы. Һәр кешене тәбиғи аҡылы үҙ юлынан алып йөрөтә. Аҡылға мохтажыраҡ булһаң, зиһен тауы үҙенә мендермәй. Шыуаһың да кире төшәһең.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**(Дауамы. Башы 16-17-се**
**һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡортостан - умартасылыҡтың классик иле, бында солоҡсолоҡ бик борондан сәскә ата. Ил иҡтисадында солоҡсолоҡтоң ҙур роле тураһында башҡорттарҙың булғарҙар хакимлығында булған заманында ла, һуңынанараҡ, Рус подданныйлығына күскәс тә яһаҡты баллата түләү фактынан сығып та һығымта яһарға мөмкин. 1627 йылда яҙылған "Ҙур Һыҙма китабы"нда "башҡорттарҙың аҙығы - бал, йәнлек һәм балыҡ" тип билдәләнә. XVII һәм XVIII быуаттарҙағы барлыҡ беҙгә билдәле башҡорттарҙың аҫаба ерҙәренә припущенниктарҙы индергәндәге йәки уларҙы оброкка биргәндәге документтарҙа теге йәки был формала "солоҡ биләмәләре" менән файҙаланыу хоҡуғы билдәләнелә. Үҙҙәренең солоҡ ерҙәрендә башҡорттар ҡырағай бал ҡорттары эйәләшә торған эсе ҡыуыш ағастарҙы һәм яһалма солоҡтарҙы - ағасты соҡоп яһалған солоҡтарҙы айырған. Эсе ҡыуыш ағастар ҙа, яһалма солоҡ кеүек үк, шәхси милек булып торған һәм уларға тамға һалынған.

Солоҡсолоҡ менән Башҡортостандың урманлы барлыҡ территорияһында ла шөғөлләнгәндәр. Солоҡсолоҡтоң күләме хаҡында ҡайһы бер башҡорттарҙың 100-әр солоғо булыуынан сығып та фекер йөрөтөргә мөмкин. 1716 йылда ялланыу тураһындағы яҙмаларҙың береһендә, Ҡаҙан даруғаһы татары Йылан олоҫо башҡортонан алған аҡса өсөн уның аҫаба ерендәге урманда 600 солоҡ эшләргә тейешлеге күрһәтелгән. "Ырымбур губернаһының географик лексиконында" П. И. Рычков: "Башҡортостанда ике мең йәки унан да күберәк солоҡ тотҡан хужалар аҙ түгел, улар шуның менән үҙҙәренә һиҙелерлек килем ала. Башҡортостанда йылҡы һәм ҡортсолоҡ заводтары иң яҡшы һәм килемле продукттар сығанағы, тиергә мөмкин", - тип яҙа. XVIII быуаттың беренсе яртыһында солоҡҡа 10 тин хаҡ ҡуйыла, ә ҡорттары булған солоҡ 1 һум тора.

Башҡорттар яһаҡты баллата түләгәс, уларҙың солоҡ биләмәләренә ҡыҙыҡһыныуы ла аңлашыла. Шуға күрә ҡайһы бер документтарҙа припущенникка йәки арендаторға "иҫке солоҡтарҙы ябыу һәм ағастарҙы файҙаланыу", "ағасҡа менеп балды һыҙырып алыу" рөхсәт ителһә, икенселәрендә "яңы солоҡтар яһау"ға рөхсәт бирелә, ә "иҫкеләрендә уның эше (ҡыҫылышы) юҡ" тип яҙыла. Өсөнсөләрендә "балды алмаҫҡа. Тағы ла баллы ағас ҡыуышы тапҡанда, ундағы балды ла беҙ булғанда ғына алырға" тиелә. Хатта бик йыш ҡына "үҙемдең ерҙәремде бирҙем, ә солоҡсолоҡ биләмәмдә уның эше (ҡыҫылышы) юҡ" тиелә.

Башҡорттарҙың көнкүрешен тикшереү буйынса эшмәкәрлегем ваҡытында уларҙа солоҡсолоҡ, утар умартасылығы (пасечные) һәм баҡсаларҙа умарта тотоу таралғайны. Ул ваҡытҡа солоҡсолоҡ урмандарҙы ҡырҡыуға һәм башҡорттарҙан ҙур урмандарҙы тартып алыуға бәйле XVIII быуат менән сағыштырғанда күпкә кәмегәйне. Шуға ҡарамаҫтан, XIX быуатта ла солоҡсолоҡ башҡорттарҙа юғары баһалана ине әле. Сөнки ҡайһы бер ваҡыттарҙа башҡорттар, урман дачаларын һатҡанда ла, уларҙа солоҡтар менән файҙаланыу хоҡуғын үҙҙәрендә ҡалдырған һәм яңы хужалар, һатып алыу килешеүенә ярашлы, башҡорттарҙың солоғо булған ағастарҙы ҡырҡа алмаған.

# Геройҙар ҡасан яҡлау табыр,

## йəки Сит дошмандан əҙəпһеҙ күршең яман…

**Бер аҡыл эйəһе əйткəнсə, хəбəрһеҙ юғалған һуңғы һалдатты табып ерлəмəйенсə тороп, һуғыш бөткəн тип иҫəплəп булмай. Был күҙлектəн сығып ҡарағанда, Ерҙə һуғыш мəңге бөтмəҫ кеүек. Кешелек барлыҡҡа килгəндəн алып, бөгөнгəсə ни бары 250 көн генə тыныс, һуғышһыҙ, ҡан-ҡойошһоҙ үткəн, тигəн мəғлүмəт тə бар бит. Тимəк, кешелек ғүмер буйы һуғышып, бер-береһенең ҡанын көҫəп йəшəй. Ни тиһəң дə, һуғыш - уйын эш түгел. Ярай ҙа ул һуғышсыны үлтереп кенə ҡалһа, əммə унда ҡатнашҡандарҙың тəне генə түгел, рухы, йəне лə зəғифлəнə бит. Бер түгел, ике һуғыш күргəн, йəғни Афғанстан һəм Чечен республикаһында барған һуғыштарҙы имен үткəн, бөгөнгө көндə Башҡортостан Республикаһының Хəрби бəрелештəр ветерандары берлеге рəйесе вазифаһын иңенə йөкмəгəн, тыумышы менəн Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылы ир-уҙаманы Тимерйəн Рəжəп улы РƏЖƏПОВ менəн һуғыш, еңеү, кеше ғүмере тураһында əңгəмə ҡорҙоҡ.**

**▸ Бөйөк Ватан һуғышында еңеүҙең əһəмиəтен нимəлə күрəһегеҙ?**

- Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан атай-олатайҙарыбыҙҙың ҡаһарманлығына бала саҡтан һоҡландыҡ, хайран ҡалдыҡ. Беҙҙең быуын балалары барыбыҙ ҙа һуғыш тураһында фильмдар ҡарарға, ошо темаға яҙылған шиғри шəлкемдəр, проза китаптары уҡырға яраттыҡ. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын мəктəптəргə лə йыш саҡыралар ине. Ул ваҡытта, бəлки, балалыҡ менəн һуғыштың ни икəнлеген күҙ алдына ла килтермəгəнбеҙҙер, шулай ҙа Бөйөк Еңеүҙең беҙҙең илгə ни тиклем ҙур əһəмиəткə эйə ҡиммəтле бүлəк икəнлеген бөгөнгө балаларҙан яҡшыраҡ аңлай инек шикелле. Шуға ла "Əгəр беҙҙең ил был һуғышта еңмəгəн булһа, бөгөн нисек йəшəр инек икəн?" тигəн һорау башыбыҙға ла инеп сыҡҡаны булманы. Егерме беренсе быуатта ҡайһы бер йəш быуын вəкилдəре ауыҙынан бындай һорау, ниңəлер, бик йыш ишетелə башланы. Ҡайһы бер йəш кешелəр, төрлө ҡотҡо таратыусылар йоғонтоһона бирелеп: "Бөйөк Ватан һуғышында еңелгəн булһаҡ, рəхəтерəк, байыраҡ, бавар һыраһы ғына эсеп йəшəр инек", - тип уйлап, яңылыша. 20 миллиондан ашыу ҡорбан биргəн халҡыбыҙға ҡарата кəмһетеү тип һанайым мин бындай ҡарашты.

Дөрөҫөн əйткəндə, ниндəйҙер аңлашылмаған заман башланды. Бəлəкəй саҡта инəйҙəр: "Килер заман, ул заманда ата - улын, ул - атаһын, инəһе - ҡыҙын, ə ҡыҙы инəһен белмəҫ", - тип əйтə торғайны. Шул заман килеп етте, ахры. Сөнки бер кем дə бер кемгə лə ышанмай. Һəр береһенең уйында - күберəк аҡса эшлəү, кемделер алдап китеү. Ветерандарға ла ҡараш үҙгəрҙе. Ваҡытлы матбуғатта, радио-телевидениела ла ысынбарлыҡ дөрөҫ сағылдырылмай һымаҡ: батырҙар - бахыр, ə əрмегə лə бармаған егеттəр - батыр итеп күрһəтелə.

Мине аптыраҡан хəл былар ғына түгел əле. 97 проценты башҡорттарҙан торған, 78 Советтар Союзы Геройы тəрбиəлəгəн 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры генерал Миңлеғəле Шайморатовҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелеүен һорап, Рəсəйҙең төрлө төбəктəренəн, хатта Франциянан, Италиянан һəм Украинанан да 500 меңдəн ашыу ҡултамға йыйылды, был турала РФ Президентына хат та яҙылды. Əммə батырға был исем, ниңəлер, əле булһа бирелмəй. Бының сəбəбе, бəлки, Шайморатов шəхесен һəм уның батырлығын танымауҙан да түгелдер. Бəлки, батырҙарын дəүлəт кимəлендə таныған, баһалаған хəлдə, ветерандарға ла тейешенсə ярҙам күрһəтеү зарурлығы ҡалҡып сығыуҙан ҡурҡыуҙандыр был. Башҡорт халҡынан, уның башҡа халыҡтар алдында статусы күтəрелеүҙəн ҡурҡҡандан түгелме икəн был, тип тə уйланыла. Сөнки Украинала: "Беҙҙе башҡорт атлылары ҡотҡарҙы, шуға ла беҙ Башҡортостан улдарына рəхмəтлебеҙ", - тип асыҡтан-асыҡ əйтəлəр бөгөн. Тотош армияны түгел, ə Башҡорт кавалерия дивизияһын "Ҡотҡарыусыбыҙ" тип атау, бəлки, кемдеңдер сəменə лə тейə торғандыр инде...

**▸ Һуғышта Үлем тигəн нəмəне тəүге тапҡыр ниндəй һынланышта күрҙегеҙ? Был мəлдə ниҙəр кисерҙегеҙ?**

-Мин бронетранспортер водителе булып хеҙмəт иттем. Билдəле булыуынса, был төр машина танк һəм БМП кеүек үк, һалдаттарҙың көнкүреш һөйлəшендə "консерва банкаһы" тип нарыҡлана, йəғни, был техника эсендə булған һалдаттар үҙҙəрен икелəтə ҡурҡыныс аҫтына ҡуя. Техниканың алыҫтан яҡшы сəпкə тотолоуы шуға ишара. Иллə мəгəр, үлем ҡурҡынысы менəн тəү тапҡыр осрашыуым дошман уты менəн бəйле булманы: тəүге тапҡыр заданиеға сыҡҡан көндө ҡоралды ҡаршылыҡты имен-һау ғына үтеп, һалдаттарҙы ултыртып, алға китеп барғанда БТР менəн тəрəн упҡынға ҡолап төшə яҙҙыҡ. Ни өсөндөр юлдың был арауығында упҡын барлығы тураһында иҫкəртмəгəндəр. Хəл иткес моментта техникамдың төҙөк булыуы һəм алдағы упҡынды ваҡытында күреп ҡалыуым арҡаһында ғына иҫəн ҡалдыҡ. Əлегелəй хəтеремдə - машинаны туҡтаттым да, башымды сығарып, алға ҡараным. Алда - упҡын. Үлемде тəү тапҡыр үҙ күҙҙəрем менəн күреүем шунда булды.

Икенсе бер хəтирə. Бер мəл күрше разведчиктарға гранатомет менəн ата башланылар. Уларҙың БТР-сыһы миңə килде лə: "Башҡорт, бензин бир əле", - тине. Мин уға бензин ҡойоп бирҙем. Артабан ул БТР-ына ултырып, сығып та китте. Ҡарап торам: күп тə барманы, теге БТР-ға төбəп ата ла башланылар. БТР, енлəнгəн һымаҡ, шəп итеп бер тирəлə сабып йөрөй башланы. Үҙен дошман тарафынан сəпкə алырға мөмкинлек бирмəүен аңлатып тороу кəрəкмəйҙер. Мин командирға: "Ярҙам итəйек", - тип мөрəжəғəт иткəйнем, "Юҡ!" тигəн ҡəтғи яуапты ишеттем. "Был - уларҙың үҙҙəренең эше" - булды командирҙың яуабы. Теге БТР өҫтөндə разведчиктарҙың командиры ла ултыра ине, бер мəл ул дошман гранатометсыһын атып йыҡты. Улар шулай тере ҡалды. Шулай ҙа була шул һуғышта.

Һуғышта һəр көн иртəн билдəһеҙлеккə, юҡлыҡҡа, русса əйткəндə, "небытие"ға китəһең: был киткəнеңдə хəрби билəмəгə кире əйлəнеп ҡайтырһыңмы, юҡмы - билдəһеҙ.

БТР-сы һалдаттың иңенə бер нөктəнəн икенсеһенə кеше ташыу, һыуға барыу һəм башҡа шуның кеүек мəшəҡəттəр төшə. Һəр сəфəр алдынан мин үҙемə: "Имен-аман ҡайтырбыҙ", - тип əйтə торғайным. Тере ҡалаһыңмы, юҡмы - быныһы күп осраҡта үҙеңдəн дə тора, əлбиттə. Мəҫəлəн, юлда түңкəрелеп ятҡан ябай ғына тəрилкə аҫтында йəшерелгəн минаға ла абайламаҫтан барып менеүең бар, юл ситендə ялтырап ятҡан башҡа берəй көнкүреш əйберен тотоп ҡарауың да мөмкин. Беҙҙең һалдаттар араһында тыйылғанды онотоп, аңһыҙ үлем менəн һəлəк булыусылар ҙа булғыланы. Ни тиһəң дə, 18 йəшлек бала бит ул һалдат: ялтыраған нəмəне тотоп ҡарағыһы килə. Күптəр ҡамауҙа йəн бирҙе...

Бер көн иртəнге аштан һуң алты кешене командир һыуға ебəрҙе. Фамилияларҙы атаны ла, аталған егеттəр, тиҙ арала йыйынып, сығып та китте. Беҙ полкта тороп ҡалдыҡ. Биш минут та үтмəне, атыш тауыштары ишетелде, һауаға ҡыҙыл сигнал ракетаһы атылғаны күренде. Беҙҙең постҡа һөжүм иткəндəр икəнен аңлата ине был ракета. Беҙ барып етеүгə, өс һалдат йəн биргəн, өсөһө яралы ине. Береһенең, рус егетенең эсенəн үтəнəн-үтə сыҡҡан яра бар ине, бəйлəйек, тиһəк, миңə түгел, тəүҙə башҡаларға ярҙам итегеҙ, тип, үлгəн егеттəргə ымлап ятты, бахыр. Үтəнəн-үтə яра алған был егеттең үҙен дə, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ҡотҡара алманыҡ. Ҡатыны, балаһы етем ҡалды.



*- Беҙҙе һуғышҡа оҙатҡан ил хəҙер юҡ. Əрменəн ҡайтыуыбыҙға беҙҙе бөтөнлəй икенсе ил ҡаршы алды. Хəҙер беҙгə: "Беҙ һеҙҙе һуғышҡа ебəрмəнек", - тиҙəр. Мин шундай бюрократтарҙы эштəренəн бушатыр инем. Күп кенə етəкселəр əрмелə булмаған. Улар ветерандарҙың ниндəй батырлыҡ эшлəүен һəм, əлбиттə, ниндəй ауырыуҙарға дусар булыуын аңламай һəм аңларға ла телəмəй."Афған синдромы", "чечен синдромы"на килгəндə, был - ғүмереңə ҡурҡыныс янаған ваҡытта, йəиһə, оҙайлы ауырыуҙан, атыштарҙан, миналар шартлауынан шаңғығандан һуң барлыҡҡа килə торған психик ауырыу, ти белгестəр. Был ауырыуға дусар булған кешелəргə һуғышты хəтерлəткəн телəһə ниндəй сағыу картинаны күреү, тауышты ишетеү ҙə зарарлы. Шунлыҡтан, күп кенə ветерандар бөгөн фатирҙарына биклəнеп йəшəргə мəжбүр. Һуғыш хəтирəлəрен ҡуҙғытып ебəрерлек һəр тауыш, һəр һүрəт ундай кешелəрҙе сығырынан сығарырға мөмкин.*

Шулай, аҙым һайын ҡурҡыныс менән осраша инек, әммә бер ваҡытта ла, мине үлтереп ҡуйһалар, тигән уй башыбыҙға ла инмәне. Бер кем дә "ҡурҡам, үләм", тимәне. Хис ҡапсығым, хәрби хеҙмәт буйы бикле булып, Афғанстандан ҡайтып ингәс кенә, бер еңгәмдең мине күреп: "Һине күрер көндәрем дә бар икән", - тип илап күрешеүенән һуң ғына асылып китте - мин дә уны ҡосаҡлап, ирекһеҙҙән, илап ебәрҙем. Афғанға барып эләккәс, мине мотлаҡ унда үлтерәсәктәр, тип уйлаған икән яҡындарым. Күп егеттәр һәләк булды шул унда.

**Афғанстанда һәм Чечен республикаһында барған һуғыштарҙан имен ҡайтыусылар араһынан күптәр үҙ-үҙенә ҡул һалды, тиҙәр. "Афған синдромы", "чечен синдромы" тип аталған ауырыуға юлығыусылар тураһында ни әйтерһегеҙ?**

-Беҙҙе һуғышҡа оҙатҡан ил хәҙер юҡ. Әрменән ҡайтыуыбыҙға беҙҙе бөтөнләй икенсе ил ҡаршы алды. Хәҙер беҙгә: "Беҙ һеҙҙе һуғышҡа ебәрмәнек", - тиҙәр. Мин шундай бюрократтарҙы эштәренән бушатыр инем. Күп кенә етәкселәр әрмелә булмаған. Улар ветерандарҙың ниндәй батырлыҡ эшләүен һәм, әлбиттә, ниндәй ауырыуҙарға дусар булыуын аңламай һәм аңларға ла теләмәй.

"Афған синдромы", "чечен синдромы"на килгәндә, был - ғүмереңә ҡурҡыныс янаған ваҡытта, йәиһә, оҙайлы ауырыуҙан, атыштарҙан, миналар шартлауынан шаңғығандан һуң барлыҡҡа килә торған психик ауырыу, ти белгестәр. Был ауырыуға дусар булған кешеләргә һуғышты хәтерләткән теләһә ниндәй сағыу картинаны күреү, тауышты ишетеү ҙә зарарлы. Шунлыҡтан, күп кенә ветерандар бөгөн фатирҙарына бикләнеп йәшәргә мәжбүр. Һуғыш хәтирәләрен ҡуҙғытып ебәрерлек һәр тауыш, һәр һүрәт ундай кешеләрҙе сығырынан сығарырға мөмкин.

Минең быға тиклемге һуғыштарҙан инвалид булып ҡайтҡан ветерандарҙың үҙ ирке менән донъянан китеүе тураһында ишеткәнем булманы. Ә бына был "Афған синдромы" менән яфаланыусылар араһында ундайҙар бихисап, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Бындай ауырыуҙы комплекслы һауыҡтырыу ярҙамында ғына йүнәлтеп була, ти табибтар. Дарыуҙар һәм яҡшы мөнәсәбәт ярҙамында ғына теләгән һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкинлеген дә билдәләйҙәр.

Был йәһәттән Базилевкала (Өфө ҡалаһы Калинин районы) урынлашҡан реабилитация үҙәге маҡтауға лайыҡ. Уның баш табибы Кузеева Ирина Рәйес ҡыҙына рәхмәт, ҡасан мөрәжәғәт итһәк тә, ярҙам итергә әҙер. Шулай ҙа ветерандарға был ярҙам ғына аҙ, минеңсә. Ҡайһы бер егеттәр 25 йыл буйы иҫәптә тора, дөйөм ятаҡтарҙа йәшәй.

Йомғаҡлап әйткәндә, "афған синдромы"ның сәбәбе - ветерандарға дәүләт тарафынан социаль ярҙам булмауы. Элегерәк льготалар яҙамында кәрәк нәмәне түбәнерәк хаҡҡа алырға мөмкин ине, бөгөн униһы ла юҡ. Власть вәкилдәре телевизорҙан: "Беҙ ветерандар ойошмаларына ярҙам итәбеҙ", - тип әйтеүен ишетеп ҡалғаным бар. Әммә әле беҙ дәүләт тарафынан бер ярҙам да күргәнебеҙ юҡ. Һис юғы, беҙҙең ветерандарға арнап ҙур ғына сара уҙғарһындар ине, ул да үҙенә күрә социаль ярҙам булыр ине. Ул сағында ветерандар үҙҙәренең иптәштәре менән осрашып, үҙенә күрә реабилитация үтер ине.

Бер хәл иҫкә төштө. Өфөнән бер программист егетте, ҙур өмөттәр уятҡан студентты, Калифорнияға саҡыралар. Егет риза булмай: "Барыр инем дә, атайымды һәм әсәйемде - Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын ҡалдырып китә алмайым", - тигән. Атаһы - һуғышта һалдат, ә әсәһе - медсестра булған икән. Американлылар егеттең атаһын һәм әсәһен дә бергә алып килергә өгөтләгән. Килеп төшөүҙәренә быларға ҙур, бөтә уңайлыҡтары булған фатир әҙерләп ҡуйғандар, ә ҡарт ветерандарға ғүмерҙәренең аҙағынаса бушлай медицина хеҙмәтенә хоҡуҡ биргән танытма тотторғандар. Америкала ветерандарға мөнәсәбәттең ошондай кимәлдә булыуына һоҡланырға ғына ҡала инде беҙгә.

Афғанда һәм Чечняла хеҙмәт иткән кеше булараҡ, шуны әйтә алам: беҙ, ветеран итерҙәр, ниндәйҙер льготалар бирерҙәр, тигән өмөт менән барманыҡ хәрби хеҙмәткә, ә илебеҙ алдындағы бурысыбыҙҙы ғына үтәргә теләнек. Ә һуғышта ҡатнашырға тура килеүен килгәс, Бөйөк Ватан һуғышы батырҙары алдында ла үҙ бурысыбыҙҙы үтәгәнбеҙҙер, уларҙың йөҙөн ҡыҙартмағанбыҙҙыр, тип ышанам. Беҙҙең башҡорт егеттәре ҡайҙа ғына хеҙмәт итмәне, иллә мәгәр бер ҡасан да, бер башҡорт егетенең дә эш боҙоуын, ҡасыуын, пленға бирелеүен фашлаған хәбәрҙәр беҙгә килеп ишетелгәне булманы. Һәйбәт хеҙмәт итте башҡорт улдары...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ни өсөн Рәсәйҙә геройҙарҙы белмәйҙәр?" тигән һорау менән РФ Президенты Владимир Путинға 25 апрель көндө үткән "тура бәйләнеш" ваҡытында мөрәжәғәт иткәйнеләр. Ил башлығы был мәсьәләнең дөрөҫ күтәрелеүен билдәләне һәм ... хеҙмәт ваҡытында үҙ ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйырға мәжбүр булған бер полиция хеҙмәткәрен миҫал итеп килтерҙе. Һорау биреүсе кемде күҙ уңында тотҡандыр, әммә был һорау яңғырағас та беҙ генерал Шайморатовты күҙ алдына килтерҙек. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бындай "тура бәйләнеш"тәрҙә беҙҙең ошондай аныҡ һорауҙарҙы яңғырата алмайбыҙ шул. Ә инде ярты миллионлаған ҡултамға менән яҙылған хаттар адресатына әллә барып етмәне, әллә...**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо,**
**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

*ҺАБАҠТАР*

# ШАТЛАНА БЕЛ -

## бөтәһе лә яҡшыға!

**Америка яҙыусыһы Элеанор Портер "Поллианна" исемле яҡты, изге китап яҙған. Геройы бәләкәй генә ҡыҙ булһа ла, был әҫәр өлкәндәргә тәғәйенләнгән. Ата-әсәһеҙ ҡалған ун бер йәшлек Поллианнаны уҫал холҡо менән билдәле ҡәрҙәш ҡатын аҫырауға ала. Иркә генә үҫкән ҡыҙыҡай ҡырыҫ тәртиптәр һәм тыйыуҙар донъяһына килеп инә. Әммә ул бирешмәй! Сөнки атаһы уға ябай һәм матур уйын өйрәтеп ҡалдырған була. Ул уйын "Шатлана бел!" тип атала.**



Поллианна бәләкәй саҡта атаһы ҡыҙына ҡурсаҡ ебәреүҙәрен һорап, бер мәрхәмәтлек фондына хат яҙа. Әммә унан килгән посылка эсенән... ҡултыҡ таяҡтары килеп сыға. Атаһы ҡыҙыҡайға ҡайғырмаҫҡа, ә, киреһенсә, аяҡ-ҡулы теүәл булыуына, ғәриптәр өсөн тәғәйенләнгән таяҡтарға мохтаж булмауына ҡыуанырға кәрәклеген аңлата. Һәм атай менән бала тормоштағы һәр бер көйһөҙлөктән ҡыуаныс эҙләү буйынса уйын башлайҙар...

Сарҙаҡҡа бикләп ҡуйылғас, илайһы урынға, Поллианна уның тәҙрәһенән күренгән матур тәбиғәткә һоҡлана. Был көләкәс, аралашыусан ҡыҙыҡай башта ҡәрҙәш ҡатындың ғына түгел, эс бошорғос ҡаласыҡта йәшәүсе, үҙ проблемаларына йомолған, үҙ-ара үпкә тотоп, бер-береһе менән оҙаҡ йылдар һөйләшмәгән кешеләрҙең дә йәнен көйҙөрә. Әммә тиҙҙән улар Поллианнаның сәйер уйыны менән таныша һәм һәр береһенең тормошо ыңғай яҡҡа үҙгәрә башлай! Ҡәрҙәш ҡатындың һәр бер мыжыуын, язаларын рәхмәт һәм ҡыуаныс менән ҡабул итә белгән Поллианна тора-бара бөтә ҡаласыҡ халҡының һөйөүен яулауға өлгәшә...

Яҡын кешеңдең үлеме, төҙәлмәҫлек сир йәки ғәриплек - ошоларҙан башҡа бөтә трагедияларҙан да шатланырлыҡ сәбәп эҙләп табырға мөмкиндер ул. Әммә Поллианна хатта түшәктән тора алмай ятҡан сирле ҡатынға ла ҡыуанырға тәҡдим итә: башҡалар һеҙҙең хәлдә ятмаған өсөн шатланығыҙ, ти ул. Поллианнаның был уйыны беҙҙең бөтәбеҙгә лә яҡшы билдәле "Нимә генә эшләнһә лә - бөтәһе лә яҡшыға!" тигән ҡанатлы һүҙҙәргә ауаздаш. Был афоризмды һәр беребеҙ ишеткәне һәм ҡулланғаны бар. Айырыуса күңелһеҙ хәлгә тарыһаҡ, эргәбеҙҙә ошо һүҙҙәрҙе әйтеп, беҙҙе йыуатырға тырышҡан, Поллианна кеүек "Шатлана бел!" уйынын өйрәткән кемдер берәү мотлаҡ табыласаҡ. Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә ошо бәләкәй ҡыҙыҡайҙың уйынына өйрәнеп ҡарайыҡ.

➔ **Тышта берәй эшегеҙгә тотонорға ниәтләнегеҙ, тик ямғыр яуҙы ла ҡуйҙы, ти. Шатланығыҙ: күптән ҡарарға теләп тә ваҡыт тапмаған фильмды ҡарарға йә ҡул етмәгән бәйләмгә тотонорға форсат тыуҙы.**

➔ **Яратҡан кешегеҙгә кейәүгә сыға алманығыҙ икән, ти. Тимәк, ысын мөхәббәт әле алда көтә. Хәтерләйһегеҙме, "Москва слезам не верит" фильмының төп геройының һүҙҙәрен? "Миңә өйләнмәүең яҡшы булған. Юғиһә, мин донъялағы иң һөйөклө кешем эргәһенән яҙа үтеп китер инем", - ти ул.**

➔ **Эшегеҙҙә оптималләштереү булып, ҡыҫҡартыуға эләктегеҙме? Артыҡ бошонмағыҙ: алға атлағыҙ, тормош һеҙгә бөтәһен дә тамырынан үҙгәртерлек мөмкинлек бирә: белем алығыҙ, шөғөлөгөҙҙө, йәшәү урынын алыштырығыҙ, яңы, ҡыҙыҡлы, уңышлы эш йә бизнес башлағыҙ.**

➔ **Йәйгеһен, ниһайәт, күптән хыялланған диңгеҙгә барып ял итеү мөмкинлеге тыуҙы, әммә етәксегеҙ һеҙгә отпуск бирмәй. Ҡыуанығыҙ: тимәк, акулаға башҡа берәй турист менән хушһынырға тура киләсәк. Шаяртыу, әлбиттә, әммә Хоҙай, ғәҙәттә, беҙгә бәлә янаған пландарҙы тормошҡа ашырырға ашыҡмай...**

Яңыраҡ ҡына минең үҙемә лә бер апайға "Бына бит, нимә генә эшләнһә лә - бөтәһе лә яҡшыға!" тигән һүҙҙәрҙе әйтергә тура килде. Мөмкинлек булмағандырмы инде, ниңәлер уның хатын гәзиттә баҫманылар. Бар ихласлығын һалып, һәр һүҙен уйлап, өс көн буйы яҙғайны ул мәҡәләһен. Һәр эшкә оло яуаплылыҡ менән ҡарай торған апай ул. Шуға, хеҙмәте лайыҡлы баһаланмауына эсе бошоуын яҡшы аңлайым. Мин уға был хатын һис юғы Башҡортостан юлдаш радиоһының "Изге хәбәрҙәр"енә шылтыратып уҡырға кәңәш иттем. Ул шулай эшләне һәм бына нимә килеп сыҡты: ул радио хеҙмәткәрҙәренән, тыңлаусыларҙан әллә күпме маҡтау һүҙҙәре ишетеп ҡыуанды. Ул ғына ла түгел, апай һөйләгән ваҡиға менән БСТ репортерҙары ла ҡыҙыҡһынып, районға килеп, телевизион сюжет төшөрөп алып киткәс, бөтөнләй шатлығының сиге булманы... Ғәҙәттә, бәләкәй генә көйһөҙлөктәрҙе сабыр үткәрә белһәк, Хоҙай беҙгә ҙурыраҡ бүләген ебәрә бит...

Һәм ошо темаға тағы бер хикәйәт. Борон бер батшаның "Бөтәһе лә яҡшы! Был хәл тик яҡшыға ғына!" тип ҡабатларға яратҡан вәзире булған, ти. Бер ваҡыт һунар мәлендә батша үҙенең бармағын өҙә атҡан. Вәзир һәр ваҡыттағыса: "Бөтәһе лә яҡшы! Был хәл тик яҡшыға!" - тип әйтеп ҡуйған. Асыуы килгән батша уны төрмәгә яптырған. Сираттағы һунар мәлендә батшаны кеше ашаусы ҡәбилә вәкилдәре әсирлеккә алған. Уны баҙрап торған усаҡ өҫтөндә ҡурырға йыйынғанда, кеше ашаусылар тотҡондоң бер бармағы юҡлығын шәйләп ҡалалар. Баҡһаң, уларҙың хөрәфәттәре буйынса, зәғифлеге булған кешеләрҙе ашау харам һанала икән. Батшаны ирекҡә ебәргәндәр. Ҡайтып барышлай, ул үҙенең аҡыллы вәзирен иҫенә төшөргән. Төрмәгә килеп, тоғро хеҙмәтсеһенән ғәфү итеүен һорағас, униһы йәнә: "Бөтәһе лә яҡшы! Был хәл дә тик яҡшыға!" - тип әйтеп ҡуйған. "Төрмәгә ултырыуыңдың нимәһе яҡшы инде?" - тип аптыраған батша. "Әгәр һин быны эшләмәгән булһаң, мин һунарҙа янында йөрөгән булыр инем һәм ҡырағайҙар мине мотлаҡ ашар ине... Шулай булғас, был хәл яҡшыға ғына булған бит!" - тигән вәзир.

Тормош үҙгәреп тора. Һәм ниндәй генә хәлдәр булмаһын һәм улар ни тиклем насар, өмөтһөҙ тойолмаһын, ахыр сиктә, барыһы ла яҡшыға, үҫешкә алып килә - йәшәйештең иң мөһим ҡағиҙәләренең береһе шундай. Бер яҡшы хәлдең артынан насары килә, йәки - киреһенсә... Бәхетһеҙлек беҙ бәхеттең ҡәҙерен белһен өсөн бирелә: тоҙ яламайынса шәкәрҙең татлылығын тойоп булмай. Шуға күрә, янығыҙҙағы "Нимә генә эшләнһә лә - бөтәһе лә яҡшыға!" тип, күңелегеҙгә өмөт һалып торған кешегә асыуланырға ашыҡмағыҙ...

**Рәхимә МУСИНА.**
**Әбйәлил районы.**

***✓ Унының һымаҡ ҙур кешеләр ҡайҙалар алыҫта, беҙҙең планетанан башҡа ерҙә йәшәгән һымаҡ тойола ине Зәлифәгә. Бына кем өсөн уны ҡиммәткә "һатып алғандар" ҙа, шулай оҙаҡ әҙерләгәндәр...***






* * *

Тәү тапҡыр бөҙрәханаға ингәнендә сәсен киҫеүҙәрен дауламағанға хәҙер үкенеп бөтә алмай ул. Бейеү дәрестәренең береһендә Заря "ошо оҙон толомоң арҡаһында харап булдың һин, ҡыҙыҡай", тип ысҡындырғайны. Ысынлап та, сәсен киҫтергән булһа, башҡаларҙан бер ере менән дә айырылмаҫ та, Замирҙың да иғтибарын йәлеп итмәгән булыр ине, бәлки...

Борон-борондан башҡорт халҡын алдап, иҙеп йәшәгән паразиттар хаҡындағы тарихи хәлдәрҙе Зәлифә элегерәк әкиәт һымаҡ ҡына итеп ҡабул итә ине. Бөгөн ул үҙен ана шундай ҡәбәхәт бәндәләрҙең меңәрләгән ҡорбандарының береһе икәнен уйлап ултырҙы. Аянысլы яҙмышлы боронғо ҡатын-ҡыҙҙарҙы бөгөн ысынлап та йәлләп, уларҙың исемдәрен иҫләне: Ғилмияза, Зөлхизә, Зәлифәкәй...

Күптән түгел генә Замир өсөн дөрләп янған мөхәббәт ялҡыны, нәфрәт утына әйләнеп, йөрәгендә тағын да көсәйә төштө. Кистәрен йоҡларға ятҡас та, нисегерәк Замирҙан үс алырға, тип төрлө хыялдарына сумып, сәғәттәр буйы йоҡлай алмай, таңға табан ғына йоҡлап китә ине ул. Милицияға нисектер хәбәр иткәндә? Тик Зәлифәнең үтә лә сибек пландары әлеге ҡәһәрле фотоларға килеп бәрелә лә селпәрәмә килә...

Зәлифә, намаҙ ниәттәрен белмәһә лә, Аллаһҡа ышана ине. Ҡайһы берҙә ҡибла яғына ҡарап теҙләнеп ултырып ала ла, ике ҡулын юғары күтәреп, шыбырлап ҡына, ихлас күңел менән Аллаһҡа ялбарып, үҙен ошо бәләнән ҡотҡарыуын һорай, уны әсир хәленә килтереүселәргә тейешенсә яза биреүен үтенә. Бәлки, Аллаһы Тәғәлә унын ошо һүҙҙәрен ҡабул итер...

Тағы ике ай самаһы үтеп китте. Көнсығыш бейеүен өйрәнеү ваҡыты ла тамамланып килә. Заря менән бер аҙ дуҫлашып та алды Зәлифә. Үҙ-ара һөйләшергә уртаҡ һүҙ ҙә табалар. Әммә һөйләшеүҙәре тик записка яҙышыу ысулы менән генә бара. Сөнки Зәлифә Заряға Замир тураһында, ғөмүмән, был йорттағы тормош хаҡында һорауҙар бирә башлағас та, тегеһе һуҡ бармағын ауыҙ тирәһенә ҡуйып, "тауышланма", тигән һымаҡ билдә бирҙе. Унан кескенә ҡағыҙға "Был бүлмәнең "ҡолаҡтары" бар", тип яҙыу яҙып тотторҙо. Яҙыуҙар уҡылып бөткәс тә, мотлаҡ рәүештә камин мейестә утта юҡ ителә. Заря үткән йыл Венера исемле сибәркәйҙе лә бейергә өйрәткән. Уны Украина яғына алып киткәндәр, буғай.

-Замир ниндәй милләт кешеһе ул? - тип һораны Зәлифә, ҡатын үҙенең Ҡаҙағстандан икәнлеген әйткәс.

-Был хаҡта бер ни ҙә әйтә алмайым, - тине Заря.

-Ә ул миңә, башҡортмон, тигәйне. Хатта "миңә ағай тип өндәшһәң дә була", тип әйткәйне...

-Их, һин, бигерәк ябай, бер ҡатлы ғынаһың шул. Замир тап ана шундайҙарҙы ғына һағалап йөрөй ул. Башҡортса, ҡаҙаҡса бер-нисә һүҙ ятлап алған да, йәш ҡыҙҙарҙың башын әйләндерә. Биш йыл элек мин бер һылыу ғына ҡаҙаҡ ҡыҙын да бейергә өйрәткәйнем. Уға Замир үҙен ҡаҙаҡ егете итеп таныткан...

Бейеү дәрестәре тамамланырға бер көн ҡалғас, Зәлифә менән оҙағыраҡ һөйләшеп, Заря һуңғы автобусҡа ла өлгөрмәй ҡалды.

-Бында йоҡла ла ҡуй, - тине Зәлифә яҡын күреп өлгөргән Заряға. - Моғайын, өйөңдә әрләшеп ултырыр кешең юҡтыр...

Артығыраҡ ысҡындырғанына эстән генә үкенеп ҡуйҙы Зәлифә. Заряның унһыҙ ҙа әрнегән яраһына тоҙ һалған һымаҡ хис итте үҙен. Унын яңғыҙ ҡатын икәнен белә ине бит инде...

...Эйе, япа-яңғыҙ бисара Заря. Унын да яҙмышы ошо "уҡыусыһы" Зәлифәнекенә оҡшаш. Уны ла Зәлифә кеүек йәш, һылыу сағында еңел эш һәм "оҙон аҡса" вәғәҙә итеп, алдаштырып алып киткәйнеләр. Ул саҡта исеме лә Зарина ине унын. Шул уҡ һыналған ысул - хәтәр оҫта итеп яһалған фотомонтаж... Әммә йәш, дыуамал Заря, үҙен ҡурҡытып, "ни менән шөғөлләнеп йөрөгәнеңде яҡындарыңа, туғандарыңа күрһәтәсәкбеҙ", тип ҡурҡытып йөрөгән кешеләрҙең һүҙҙәренә әллә ни әһәмиәт бирмәй, уларҙан ҡасып, ата-әсәһенә - Ҡаҙағстанына ҡайтып киткәйне. Тик, күп тә үтмәй, теге ҡәһәрле фотолар, ысынлап та, уларҙың ауылына килеп етте. Тәүҙәрәк ауыл егеттәре ҡулына килеп эләккән фотоһүрәттәр һуңынан унын иптәш ҡыҙҙарына, ә унан - ағаларына килеп еткән. "Ғаилә намыҫын аяҡ аҫтына һалып тапаған һеңлекәшен" был донъянан юҡ итергә йыйынған ике ағаһының һөйләшкәнен кескәй ҡустыһы Жумабай ишетеп ҡалып, ашығыс рәүештә был турала апаһын иҫкәртеп өлгөргән. Шул көндө үк, ашығыс ҡына йыйынып, йәшерен рәүештә Заря һыуға бата. Йылға яры буйында унын кейемдәре генә ятып ҡала. Бер-нисә көндән, ирекһеҙҙән, ҡаҙаҡ һылыуы үҙенең "хужа"ларына әйләнеп ҡайта. Элекке Зарина Заря булып китә. Уға өр-яңынан паспорт яһап биреүе хужалар өсөн ауыр булмай. Ниндәй генә кешеләр менән осрашырға, кемдәрҙең генә алдында бейергә тура килмәй йәш ҡаҙаҡ ҡыҙына. Бейергә генә булһа икән дә һуң. Аҡсаһы ла зарланырлыҡ булмай ҙа. Әммә, ғүмерлеккә яҡын туғандарын, ата-әсәһен, дуҫтарын юғалтҡан ҡыҙ, өҫтәүенә, ер йөҙөндә бәхетле йәшәр өсөн иң кәрәк булған иркенән мәхрүм булыуына ҡайғырып, төндәр буйы йәш түгә. Күпме тапҡыр үҙ-үҙенә ҡул һалырға ла самалап ҡуя ул. Әммә, оҙаҡ ҡына уйлағас, әҙәм балаһына бер генә тапҡыр бирелгән ғүмер тигән иң ҡәҙерле нәмәһен аңлы рәүештә юғалтыуҙан, ахырҙа, ҡырҡа баш тарта. Ваҡыт үтеү менән ошо тормошҡа күнегеп тә ала, үҙ яҙмышы менән килешеп, ошо көнгәсә йәштәрҙе өйрәтеү менән мәшғүл. Ошо хаҡта күҙ йәштәрен түгә-түгә бәйән итте ул Зәлифәгә яҙған "хатында". Зәлифә уны йәлләп, илай-илай уҡып сыҡҡандан һуң, ошо аһ-зарлы ҡағыҙҙы камин утына ташланы. Эйе, ниндәй генә серҙәрҙе, ниндәй генә аһ-зарҙарҙы йотманы икән ошо усаҡ...

Имтихандан һуң Заря башҡаса күренмәне. Бер ай тирәһе Зәлифәне берәү ҙә бимазаламаны. Ҡайсаҡ көндәр буйы телевизорҙан ялыҡтырғыс тапшырыуҙар ҡарай, йәиһә кәштәлә тулып ятҡан ҡалын-ҡалын сәйәси китаптарҙы уҡыштыра. Улар араһында бер бөртөк әҙәби китап та юҡ. Матур рәткә теҙелеп торған өр-яңы был күн тышлы китаптарҙың барыһын да тиерлек уға ҡәҙәре бер кем дә асып ҡарамағаны күренеп тора. Бәлки, ошо марксизм-ленинизм классиктары яҙған томдарҙы кемдәрҙер яратып уҡый, өйрәнә торғандыр. Айырыуса, бәхетле коммунистик киләсәккә етәкләп алып барған башлыҡтарыбыҙ. Әммә коммунистик йәмғиәт әлегә тик китаптарҙа ғына. Ә магазиндарҙа аҙыҡ-түлек кәштәләре һаман да буш көйө. Зәлифә аҙыҡ-түлектә мохтажлыҡ кисермәй ҙә, әммә унын үҙен кемдеңдер ниндәйҙер хәжәтен үтәү өсөн, йәиһә нәфсеһен баҫыр өсөн әҙерләйҙәр. Ҡасандыр күреп йәлләгән ирекһеҙ цирк йәнлеге, йә һуғымға һимертергә бикләп ҡуйып ашатҡан мал һымаҡ тойҙо үҙен Зәлифә.

Олег биргән аҡса һаман да дипломатта ята бирҙе. Әлегә Зәлифә аҡса кәрәклеген тойманы. Аҙыҡ-түлекте Олег һәр саҡ ҡайҙандыр килтереп торҙо. Унын әллә өс айға яҡын өйрәнгән бейеүенең, массажист һөнәренең дә кәрәге юҡтыр һымаҡ тойолдо. Ул ғына ла түгел, үҙен дә хәҙер бер кемгә лә кәрәкмәй, тип уйлай башланы...

* * *

Көндәрҙән бер көндө Олег Зәлифәгә иртәгә хужа "Үҙе" киләсәген әйтте. Инструктаж да биреп ҡуйҙы:

-Хужаға бер һорау ҙа бирмәҫкә, унын теләгәнен һис һүҙһеҙ үтәргә. Һеҙҙең өсөн ул ғәйәт күп аҡса түләгәнлеген һәр саҡ иҫегеҙҙә тотоғоҙ. Таң менән тороп, сәс-башығыҙҙы рәткә килтереп, унын килгәнен көтөгөҙ...

Ҙур начальникты ҡаршы алғанда Зәлифәгә ниндәй кейем кейергә икәнлеген дә әйтте Олег. Тап көнсығыш бейеүе өсөн махсус күлдәген кейеп, шуға яраҡлаштырып буянырға тейеш ине.

Йыйыштырыусы булып илле йәштәр самаһындағы Маша исемле бер ҡатын эшләй. Бешереүсе лә шул. Тәүҙәрәк Зәлифә унын менән бер ҙә аралашманы. Тик Маша унын өсөн дә ашарға бешереү теләген белгерткәс, Зәлифә үҙенә үҙе әҙерләйәсәген әйтте. Шуға күрә лә Маша иҙән балаҫтарының саңын һурҙырып, мебелдәрҙең туҙандарын һөрткөләй ҙә, сығып китә. Ә бөгөн, иртәрәк килеп, ул бүлмәне оҙағыраҡ, ентекләберәк йыйыштырҙы ла, кухняла ниҙер әҙерләй башланы.

-Үҙем дә әҙерләр инем бит, Маша апай, - тине Зәлифә.

-Әле һиңә әйтмәнеләрме ни, Зоечка, бөгөн Вениамин Петрович үҙе килергә тейеш. Бер аҙнаға. Бәлки, яңғыҙы ғына ла булмаҫ. Ҡайһы берҙә яҡындары, дуҫ-иштәре менән дә килә торған. Ул фәҡәт минең әҙерләгәнде генә ашарға ярата.

- Вениамин Петрович?

-Эйе, Вениамин Петрович. Шефыңдың кем икәнен дә белмәй инеңме?

"Вениамин Петрович... Бик тә таныш исем..." Зәлифәнең уйҙарын белгәндәй, кинәт Олег килеп инде. Ҡулында бергилке гәзит- журналдар.

-Шеф өсөн, - тине ул һәм гәзиттәрҙе тәпәш өҫтәлгә һалды.

Олег сығып киткәс, Маша гәзиттәрҙең береһен алып, Зәлифәгә һондо:

-Бына ошо инде - Вениамин Петрович, - ул гәзиттең тәүге битендәге фотоһүрәткә төртөп күрһәтте.

Ҡыҙ телһеҙ ҡалды. Элек йыш ҡына телевизорҙа, гәзиттәрҙә күренгән хөрмәтле Вениамин Петрович - тап үҙе! Бына һиңә - мә... Унын һымаҡ ҙур кешеләр ҡайҙалар алыҫта, беҙҙең планетанан башҡа ерҙә йәшәгән һымаҡ тойола ине Зәлифәгә. Төп эше - Мәскәүҙә, ә бында ял итергә, күңел асырға ғына килә. Быны кем өсөн уны ҡиммәткә "һатып алғандар" ҙа, шулай оҙаҡ әҙерләгәндәр...

Бәхеткә, Вениамин Петрович яңғыҙы ғына килде. Әлбиттә, тағы бер йәш ярҙамсыһын һәм Олегты иҫәпкә алмағанда. Бүлмәгә әйберҙәрен урынлаштырғас та шеф ярҙамсыһына бүлмәнән сығырға ҡушты. Ярҙамсы егет менән Олег икеһе бер юлы сығып китте. Шаҡтай арыған, талсыҡҡан йөҙлө был кеше йылмайып иҫәнләште лә:

- Ну, Машенька, бөгөн мине нимә менән һыйларға булдың? - тине. Ситтәрәк ни эшләргә белмәй, ҡыйыуһыҙ торған Зәлифәгә лә баштан-аяҡ күҙ йүгертеп алды.

-Һәр ваҡыттағыса, Вениамин Петрович, - тине Маша ла ихлас йылмайып, - һеҙҙең яратҡан люля-кебаб татарский соус менән.

-Татарский, тиһең инде. - Яҡшы-ы-ы, - тип һуҙҙы хужа. - Ә нишләп башкирский менән түгел? - Ул мут йылмайып Зәлифәгә ҡараны.

Зәлифәнең башҡорт ҡыҙы икәнен, биографияһын да, әлбиттә, хужаға әллә ҡасан уҡ һөйләгәндәрҙер. Фотоһын да күрһәткәндәрҙер. "Тоҡ эсендәге бесәй балаһы" өсөн шундай ҙур аҡса түләмәйҙәрҙер бит.

-А башкирский будет потом, Вениамин Петрович, - Маша ла шаярыу тонына күсте. Күрәһең, хужа менән нисегерәк һөйләшергә өйрәнеп бөткән. - Тәүҙә тамаҡ ялғап алығыҙ. Ә ванна инергә уйлаһағыҙ, һеҙ яратҡан экстракт менән һыу әҙер...

Тамағын туйҙырып, ваннаға инеп киткәс, Маша Зәлифәне ымлап ҡына саҡырып алды ла уға ярым шыбырҙап:

-Шеф ванна бүлмәһенән сығыуға, музыка уйнатып ебәрер. Ә һин унын алдында бейей башла. Артабан ни эшләргә икәнен үҙе әйтер, - тине.

...Зәлифәнең биле-һынын уйнатып, һығыла-бөгөлә бейегәнен Вениамин Петрович яратып ҡараны. Һылыу башҡорт ҡыҙының көсөргәнеп булһа ла йылмайып йөрөүе бик тә тәбиғи һымаҡ килеп сыҡты. Хужа, креслоға ярым ятҡан килеш, ҙур бокалға Маша һалып биргән "Боржоми"ҙы тәмләп эсә-эсә, идеаль һынлы йәш ҡатындың һәр бер хәрәкәтен күҙҙәре менән йотто. Хатта, ауыҙында шыйыҡсаһы булмаһа ла, йыш ҡына йотоу хәрәкәттәре яһап, берәй тәмлекәй күргән кескәй бала кеүек, аратирә ирендәрен ялап ала ине.

Аш бүлмәһендә эшен тамамлаған Маша сығып киткәйне инде. Бында артыҡ оҙаҡ ваҡыт булырға ярамағанлығын ул яҡшы белә.

-Зоечка, кил әле бында, - тине сәстәре әллә ҡасан уҡ салланған, маңлайҙары, биттәре, хатта муйындары ла бураҙналанып, етмеш йәштән уҙған бабай икәнлеге әллә ҡайҙан күренеп торған Вениамин Петрович. Костюмын һалып, халатын кейеп алғас, яурынбаштары һөҙәкләнеп, бер аҙ кесерәйеп тә ҡалған һымаҡ. Артабан ни булырын үҙенсә күҙаллаған йәш ҡатын, йылан ауыҙына үҙе яҡынлашҡан тәлмәрйендәй, ҡурҡа-ҡурҡа ғына хужа янына килде. Ул Зәлифәнең ҡулдарынан тотоп һыйпаҡланы, бармаҡ йыуанлығындай булып ҡалҡып торған вена тамырҙары менән биҙәлгән ябыҡ, ҡарт ҡулдарын унын бил, арҡа тирәләренән йөрөттө. Тулышып бешкән алмалай йәш ҡатынға баҡҡан күҙҙәренән "Эх, исмаһам егерме-утыҙ йәшкә йәшерәк булһамсы", тигән тормошҡа ашмаҫтай теләген уҡырға булыр ине. Башҡа ваҡыт берәй йәш егет шулай наҙлаһа, ғәйрәте ташып барған ҡатын тәне тейешле тойғолар кисерер ине. Әммә ҡарт ҡулдар ҡағылыу менән Зәлифәнең ҡош тәне ҡалҡып, иттәре йырылып, йөрәге эҫеле-һыуыҡлы булып киткәндәй булды. Әйтерһең дә, кемдер унын яланғас нәфис тәненә боҙло һыу сәсрәтә. Шуға ҡарамаҫтан, Зәлифә үҙенең бындай хәлен белгертмәне, кирећенсә, ҡарттың сәстәренән һыйпаған кеше булды...

**(Дауамы бар).**

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# КАВАЛЕРИСТ ЯҠТАШЫМ

**Ихласлыҡ һәм алсаҡлыҡ - Яҡуп Ҡолмойҙоң үҙенә лә, йыр-шиғырҙарына иң характерлы сифаттар булды, шулай булып ҡала. Ошо хаҡта уйлаһам, бер ваҡиға иҫкә төшә.**

"Башҡортостан" китап нәшриәтендә хеҙмәт итеп йөрөгән саҡ ине. Бергә эшләгән шағир Ғәлим Дәүләтовтың ғаиләһенә Өфөнөң Достоевский урамынан ике бүлмәле фатир бирҙеләр. Беҙ, нәшриәттәге дуҫтары, уларҙы яңы урынға күсерешеп ҡуйҙыҡ. Эш бөткәс, уйнарға ярай, тигән йола буйынса, кисен фатирҙы "йыуырға" ултырҙыҡ. Беҙҙең менән Яҡуп ағай ҙа бар ине. Баҡтиһәң, ул Ғәлимдәргә күрше генә йортта йәшәй икән. Бер ни тиклем "ҡыҙып" алғас, мин яҡташыма шундайыраҡ һүҙҙәр менән өндәштем:

- Хөрмәтле Яҡуп ағай, мин шиғырҙарығыҙ аша һеҙҙе бик күптән беләм, теләйһегеҙме, уларҙы яттан һөйләйем?

Яҡуп ағай, үтә ныҡ аптырауҙан, ахырыһы, аяҡ өҫтө тороп:

- Кит анан, булмаҫ! - тине.

Мин уңайлыраҡ урынға баҫтым да мөхәббәт хаҡындағы бер шиғырҙы яттан һөйләй башланым.

*Мөхәббәтем ҡасан тыуғандыр ул,*
*Һиҙмәй ҡалдым хатта үҙем дә.*
*Йөрәгемде елкендереп бер ҡыҙ*
*Урын алды минең күңелдә.*
*Һиҙмәй ҡалдым, әллә тәүге тапҡыр*
*Ҡыймай һүҙ әйткәндә тыуҙы ул.*
*Һис тә тынғы бирмәй, хыялымда*
*Көлөмһөрәп һаман торҙо ул...*

Яҡуп ағай, ике ҡулын да күкрәгенә ҡуйып, шаҡ ҡатып торҙо ла, ҡапыл ғына:

- Етте! - тине.

Мин аптырап туҡтап ҡалдым. Шул саҡ ағайыбыҙ салбар кеҫәһенән шыптырҙап торған биш һумды тартып сығарҙы ла:

- Мә, магазинға йүгер! - тип аҡсаны миңә һуҙҙы.

Ағайым әйткәненән кире сигенерлек түгел ине - йүгерергә тура килде.

Беҙ "ҡыҙа" барҙыҡ. Бына бер саҡ бергә эшләгән Фәнил Йомағужин менән икәүләп, минең яҡташтың һүҙҙәренә яҙылған, киң билдәле "Былбылым"ын һуҙып ебәрҙек. Был юлы ла ағайыбыҙ, йөрәгенә түҙә алмай, бүлмәлә йөрөй башланы ла, беҙ йырлап бөтөр-бөтмәҫтән, тағы ла яңы "бишлек"те тартып сығарып, беҙҙе магазинға йүгертте...

Яҡуп ағайҙың ихласлығы, йомартлығы, ғәжәп бер үҙенсәлекле кеше булыуын мин ошо кисәлә беренсе тапҡыр күрҙем. Әммә Яҡуп ағайҙың ғүмер һуҡмағы, үҙе яҙғанса, "оҙон да, бормалы ла һәм янар утлы ла, текә таулы ла. Уны үткәндә, тирең генә түгел, күҙ йәшең дә түгелә".

Эйе, Яҡуп ағайға был тормошта, күҙ йәше генә түгел, яу яланында ҡан ҡойорға, ут-дауылдары аша үтергә лә тура килә. Шуға ла уның шиғриәтендә һуғыш темаһының төп урын биләүе бик тәбиғи хәл. Был хаҡта ла оҙон-оҙаҡ һөйләргә булыр ине. Шуны ғына әйтке килә. 1939 йылда Яҡуп Ҡолмой Ҡыҙыл Армия сафына саҡырыла. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, тәүҙә Мәскәүҙе һаҡлауҙа, унан Әрмәнстанда ойошҡан атлылар дивизияһына эләгеп, ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша. Йәш шағир 1944 йылда Яҙыусылар союзы ағзаһы итеп ҡабул ителә. Ҡыйыу кавалерист күрһәткән батырлыҡтары өсөн II дәрәжә Дан ордены, һигеҙ миҙал менән наградлана. Уны белгән кешеләр, бигерәк тә ҡәләмдәштәре, яратып, "кавалерист" тип шаяртырҙар ине. Мин дә ҡыҫҡа ғына иҫтәлегемде шиғри етди шаяртыу менән тамамлайым:

*Кәмһетмәйем һис,*
*Арттырмайым һис:*
*Һин булдың һәр саҡ*
*Ҡыйыу кавалерист.*
*Яу туҡтағанда*
*Һиндә - тойғо-хис.*
*Ут кисеп тыуған*
*Шағир-кавалерист.*
*Булманы һиндә*
*Алдау, нәфрәт, үс:*
*Ҡалдың саф килеш,*
*Яҡташ, кавалерист.*
*"Атлы Яҡуп" һин -*
*Ихласлыҡ һәм хис.*
*Күңелдән китмәҫ*
*Шағир-кавалерист!*

**Риф МИФТАХОВ.**

*ӘЙТӘГҮР!*

# КАМИЛ ӘҘӘБИ ТЕЛ ӨЛГӨҺӨ...

## радионан да яңғыраһын

**Радио тиһәләр, ниңәлер, һәр саҡ Левитандың үҙенә генә хас көр тауыш менән "Говорит Москва..." тигәне ҡолаҡта сыңлап киткәндәй. Юҡ, мин Бөйөк Ватан һуғышы осоронда күҙҙәре өмөт менән ауылдағы берҙән-бер "тәрилкә"гә төбәлгән быуындың балаһының балаһы ғынамын, әммә ошо һүҙҙәр мәңгелеккә хәтерҙә уйылып ҡалған. Мәктәп йылдарында һәр иртән һәр өйгә мотлаҡ индерелгән радионөктәләрҙән яңғыраған Наилә Ғәләүетдинова, Ғәлинур Бикбулатовтар тауышы ла күңелгә һеңгән. Һуңынан яйлап һәр өйҙә тиерлек транзисторҙар, магнитолалар күренде һәм улар шунһы менән уңайлы булды - транзисторҙарҙы теләгән ереңә үҙең менән алып барып, теләгән йышлыҡтарға көйләп, рәхәтләнеп тыңларға мөмкин ине. Әлбиттә, батареялары ултырғанға тиклем. Хәҙерге үҫмерҙәр һәм йәштәрҙең күбеһе, моғайын, радио тигән һүҙҙе иҫкелек ҡалдығы кеүек кенә күрәлер. Сөнки һәр өйҙә тиерлек музыкаль үҙәктәр, өй кинотеатрҙары түрҙән урын алған. Уларҙан хатта раидоканалдарҙы ла эҙләп тормайҙыр күптәр, сөнки был эште интернет тиҙ арала башҡара. Теләгән радио каналының сайтына инеп, кәрәкле тапшырыуыңды он-лайн режимында тыңларға мөмкин. Шуға ла хәҙер һәр радиоканал, беҙҙе шунда-шунда тыңлайҙар, тип, бик күп географик нөктәләрҙе атай. Әммә был ысынбарлыҡта шулаймы һәм бөгөнгө Башҡортостан радиоһының төрлө каналдары һәм тапшырыуҙары тыңлаусыла рухи ҡәнәғәтлек тыуҙырамы?**

**Әлфиә ФӘЙЗУЛЛИНА, Татарстандың Яр Саллы ҡалаһындағы "Шоңҡар" башҡорт милли-мәҙәни автономияһы ағзаһы:** Ҡаланың үҙендә Башҡортостан радиоһын, "Юлдаш", "Ашҡаҙар" каналдарын тыңлауы ҙур бер проблема. Бәйләнеш өҙөлөп-өҙөлөп тора, шуға, мөмкинлек булғанда интернет аша он-лайн тапшырыуҙарҙы тыңларға тырышам. Әммә мәсьәләнең бер яғы бар: йәштәр, ярай, интернет аша булһа ла туған моңдарҙы, туған телдә тапшырыуҙар тыңлап, күңел бушлығын тултырабыҙ, сарсаған күңелебеҙҙе саҡ ҡына булһа ла баҫабыҙ, әммә бына өлкән йәштәге милләттәштәребеҙ бындай бәхеттән мәхрүм. Кемдәр Аҡтаныш районына яҡыныраҡ йәшәй йәки шул яҡта баҡсалары бар, улар Башҡортостан радиоһын тыңлайбыҙ, тиҙәр, әлбиттә. Әммә бына Яр Саллы ҡалаһында был мәсьәлә проблемаға әйләнде. Элегерәк Башҡортостан юлдаш телевидениеһын да ҡарай инек. Яңы форматҡа (һанлы телевидение) күсеүе сәбәпле, хәҙер телевидение тапшырыуҙарын да ҡарай алмайбыҙ. Әлбиттә, тыуған ерҙән ситтә туған телдең ҡәҙере нығыраҡ беленә. Шуға ла башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә интерент аша ғына түгел, ә магнитола, радотапшырғыстар аша ла үҙ моңобоҙҙо тыңлай алырлыҡ шарттар булһын ине.

**Ансар НУРЕТДИНОВ, "Юлдаш"тың даими тыңлаусыһы:** Ун йыллыҡ тарихы булған "Юлдаш" радиоһы бөгөн тыңлаусыларҙың һөйөүен тулыһынса яулап алған, тип әйтһәк, бер ҙә хата булмаҫ: ул тәүлек әйләнәһенә йыр-моң менән ҡыуандыра, республика, ил, донъя яңылыҡтары менән таныштыра, һауа торошондағы үҙгәрештәрҙе ваҡытында еткереп тора. Халыҡ бигерәк тә ҡотлауҙар программаһын көтөп ала. Тәләүселәргә тура эфирға сығырға мөмкинлек биргән төрлө тапшырыуҙар менән бер рәттән, фәһемле һәм ғәмәлдә файҙа алырлыҡтары ла бар "Юлдаш"та. Тыуған төйәгенән ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙ өсөн үҙ телен ишетеүҙең берҙән-бер сығанағы булып тап "Юлдаш" тора тиергә лә булалыр. Сөнки уны республикабыҙҙа һәм Башҡортостан менән сиктәш төбәктәрҙә генә түгел, Ер шарының төрлө мөйөштәрендә - Америкала, Австралияла, Мысырҙа һәм башҡа ҡитғаларҙа - тыңлайҙар. Ә был инде уның коллективына икеләтә яуаплылыҡ йөкмәтә: театр һәм мәҙәниәт һарайҙары сәхнәләренән, радио һәм телевизорҙан саф әҙәби тел яңғырарға тейешлеге бер кемгә лә яңылыҡ түгел. Бигерәк тә радио һәм телевидение халыҡ араһында әҙәби телде таратыусы һәм пропагандалаусы ролен үтәргә, ә уларҙың тапшырыуҙар теле тыңлаусылар өсөн үрнәк булырға тейеш. Сөнки радио һәм телевидение телендәге хаталарҙың халыҡ араһында тиҙ таралыу ихтималы хәүефләндерә. "Юлдаш" тапшырыуҙарын даими тыңлау уның ҡайһы бер алып барыусыларының үҙ телмәренә иғтибары түбән кимәлдә, тигән һығымтаға килтерә. Донъяның бар ҡитғаларына төбәп һүҙ һөйләйһең икән, әҙәби тел ҡағиҙәләрен белергә һәм уларҙы мотлаҡ үтәргә кәрәк. Фәлсәфәүи юҫыҡта әйткәндә, телгә булған ихтирам һәм хөрмәт бар халыҡҡа булған ихтирам һәм хөрмәтте сағылдыра бит. Ун йылдан артыҡ эшләү дәүерендә ысынлап та халыҡ һөйөүен яулаған "Юлдаш" артабан да үҙ тыңлаусыларын һөйөндөрһөн, ә уның алып барыусылары үҙ телмәренә талапсаныраҡ булһын ине.

**Шәрифә САЛАУАТОВА яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# КЕМ АЛДЫНДА БАШ ЭЙӘБЕҘ?

Эйе, беҙ, рухын һаҡлап ҡала алғандар, тарихи шәхестәребеҙ алдында баш эйәбеҙ. Салауат Юлаев, Кинйә абыҙ, Зәки Вәлидиҙәр тормошон, эшләгән эшен, һөйләгән һүҙен рухи ҡиммәт итеп йөрәккә һеңдергәнбеҙ, әйләнәбеҙ ҙә, улар өлгөһөндә таяныс эҙләйбеҙ. Ләкин ни өсөн бер быуат арауығында бындай шәхестәр күтәрелмәне? Сөнки ошо бер быуат арауығында ундай шәхестәргә баш ҡалҡытырға бирмәнеләр, рухи ҡиммәттәребеҙ аҡрынлап-аҡрынлап юйыла барҙы. Бөтөн табыныуҙарҙың да табыныуы булыр динебеҙҙән яҙҙырҙылар башта. Уның менән бергә башҡа ғилемдәребеҙ, йолаларыбыҙ юҡҡа сыҡты. Сөнки... Һәр яңы ҡоролош һайын яңы идея тыуып тора ул, ләкин дини тәғлимәт, халыҡтың рухиәте үҙгәрешһеҙ ҡалырға тейеш. Бына ошо хәҡиҡәткә, тамырҙарыбыҙға киҙәнде тәүҙә теге быуат башында власҡа килгән ҡоролош эйәләре.

Хәҙер бына уларҙың идеяһы ла юҡҡа сыҡты. Мәңгелек идея булыр Ватанды һөйөү, әхләҡ, үҙ халҡыңдың йолаларын, мәҙәниәтен таныу тигәне лә юҡ дәрәжәһендә. Зыялыларыбыҙ күптән инде ошо хаҡта, рухи ҡиммәттәребеҙҙе тергеҙеү тураһында саң ҡаға.

Ләкин салауаттар, вәлидиҙәр булмауға былар ғына сәбәпсеме? Уйлайыҡ әле. Сәбәпте үҙебеҙҙән дә эҙләйек. Киләсәк, милләт, балалар хаҡына һәр кем үҙ ғаиләһендә, үҙ урынында ҡулынан килгәнде эшләйме? Иң мөһим эштәрҙең дә иң мөһиме - үҙеңдән һуң һине, һинең милләтеңде дауам итер балаларың ҡалырға тейеш бит! Ошо бурыстың үтәлеше ни хәлдә һинең ғаиләлә, милләттәш?

# БЕҘГӘ ШУЛ КӘРӘК...

Ни өсөн республикала йәшәгән башҡа милләттәр алдында беҙ, башҡорттар, өҙлөкһөҙ аҡланырға тейешбеҙ? Йәнәһе, юҡ, беҙ улай уҡ насар түгел, беҙ һәйбәт... Ниңә улар республикала эшләнгән һәр эштең йөйөн табырға ынтыла, шәхестәребеҙҙе, тарихыбыҙҙы юҡҡа сығарырға тырыша, мәҙәниәтебеҙҙе, телебеҙҙе һанға һуҡмай маташа? Ашаған табағыңа төкөрөү йәмһеҙ күренеш кенә түгел, ә оло гонаһ та бит...

Ошо көндәрҙә беҙҙең республикаға күсеп килеп, танылыу яулаған, баһаланған бер иптәштең иҫерек сығышын тыңларға тура килде. Әйткәндәй, ул табында ултырған бер генә башҡорт та эсмәне. Ә ул сусҡалай араҡы һемерҙе-һемерҙе лә, тост әйтергә сират еткәс, барыбыҙҙы ла аптыратып, былай тине: "Әйҙәгеҙ, тураһын әйтеп һөйләшәйек. Беҙҙең республика йырлай һәм бейей... Ә күпме етешһеҙлектәр! Шуларҙы бөтөрөргә тырышырға кәрәк йырлап-бейеп йөрөгәнсе..."

"Эш бөткәс, байрам итергә ярай, тигән аҡыл бар беҙҙең башҡортта. Беҙҙә лә шулай: эшләйбеҙ, төҙөйбөҙ, ижад итәбеҙ, аҙаҡ йырлап-бейеп байрам итәбеҙ - бының ниндәй насарлығы бар?" тип ҡаршы төшөп маташтыҡ уға. Әммә теге иптәш үҙ фекерендә ҡалды. Ә бит уны әҙәмгә һанап, табыныбыҙға саҡырған булдыҡ, уны күтәргән, уны баһалаған, хатта дәүләт наградалары алыуға тиклем алып барып еткергән кешеләр ҙә шул уҡ башҡорттар. Ә ул беҙҙең изгелеккә лысҡылдатып төкөрҙө... Хәйер, беҙгә шул кәрәк!..

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘ АШАҒАН - һомғол булыр

■ British Medical Journal журналы асыҡлауынса, фармацевтик компаниялар матди килем алыу өсөн "уйлап тапҡан" ауырыуҙарҙың һаны 200-ҙән ашып киткән. Был дарыуҙарҙың күбеһе организмын йәш итеп һаҡлап ҡалырға теләүсе хәлле кешеләр өсөн тәғәйенләнгән. Иң күп "ауырыуҙар" Америкала уйлап табыла. Мәҫәлән, әгәр ҙә мәктәптә бала үҙен әүҙем тота, күп йүгерә һәм уҡырға теләмәй икән, мәктәп психологы уны хроник психик ауырыуҙар исемлегенә индереп, табип уға мотлаҡ транквилизаторҙар һәм көс биреүсе дарыуҙар тәғәйенләй. Дөйөм алғанда, Америкала йәшәүсе һәм "әүҙем тормош" алып барыусы һәр икенсе кеше антидепрессант курсы үтә. Ә Рәсәйҙә был ысул менән башлыса косметик компаниялар аҡса эшләй.

■ Туҡлыҡлы иртәнге аш кешегә көн дауамында төрлө эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн энергия бирә, мейенең дөрөҫ эшләүен тәьмин итә, метаболизмды тиҙләтә. Быларҙың барыһы ла кәүҙәне һомғол көйө һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Иртә - тәм-том менән һыйланыу ваҡыты ла, тип белдерә Тель-Авив университеты ғалимдары. Сөнки был ваҡытта матдәләр алышыныуы яҡшы эшләй һәм артыҡ калориялар шунда уҡ янып юҡҡа сыға. Идеаль иртәнге аш сәғәт 6-нан 8-гә тиклем булырға тейеш. Емешеләкте көндөҙгө 16 сәғәттән һуң ашау ҙа зыянлы икән. Йоҡларға ятырҙан ике сәғәт алда бал ҡушылған һөт эсеү сәләмәтлеккә яҡшы тәьҫир итә, ти ғалимдар.

■ Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы һәм Еврокомиссия белгестәре белдереүенсә, экологик үлем һәм ауырыуҙарҙы булдырыусылар исемлегендә беренсе урында бысранған һауа, икенсе урында тауыш тора. Баҡтиһәң, тауыш хатта йоҡлаған саҡта ла ҡан баҫымын, стресс гормондары күләмен күтәрә икән. Яйлап был ауырыуҙар ҡан тамырҙарының тарайыуына һәм йөрәк ауырыуҙарына килтереүе ихтимал.

■ Ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда күпкә хислерәк, тип белдерә Вашингтон университеты менән Джорж Мейсон университеты белгестәре. Һәр хәлдә, улар йышыраҡ беренсе ҡараштан ғашиҡ була, тип раҫлай улар. Төрлө илдәрҙә йәшәгән 70 мең кешенән һорау алғандан һуң, тап ир-егеттәрҙең көтөлмәгән ярһыулыҡҡа һәләтле икәне асыҡланған. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы ир-аттарҙың 48 проценты тәү ҡараштан ғашиҡ булған, ҡатын-ҡыҙҙар араһында бындайҙар иҫәбе 28 процент ҡына. Дөрөҫ, ир-егеттәр яратҡан кешеһенә йышыраҡ хыянат итә, ситкә йөрөүселәр һаны улар араһында 33 процент, ҡатын-ҡыҙҙарҙа - 19.

■ Колорадо университеты ғалимдары әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡулында микроорганизмдар үҫеше өсөн шарттар яҡшыраҡ. Көн һайын эштә лә, өйҙә лә саң йыйылған әйберҙәр менән эш итергә тура килә, әммә улар ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡулдарына күберәк йыйыла, сөнки ир-егеттәрҙең тиреһенең әселеге күпкә юғарыраҡ. Гүзәл заттарҙың косметика ҡулланыуы һәм гормональ фоны ла ҙур роль уйнай. Косметика ҡул тиреһен майлыраҡ итә, был микробтар үҫешенә булышлыҡ ҡына итә. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡулдарҙы йыуыу ундағы микробтар һанына тәьҫир итмәй икән. Кешенең устарында даими рәүештә 150 бактерия йәшәй, уларҙың 17 проценты ғына ике ҡулда ла осрай.

КОНКУРС: "ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ"

**Быйыл йыл һыңлап килһә лә, йылы көндәр барыбер үҙенекен итә. Көндәр яйлап йылына. Йәмле яҙ билдәһе булып, иң тәүгеләрҙән булып йылы яҡтан ҡарғалар ҡайта. Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй, тигән булһаҡ та, ҡарға ҡарҡылдауы барыбер ҙә күңелдә шатлыҡ уята. Шунан инде башҡа ҡоштар үҙ төйәгенә ҡайта башлай. Был ваҡытта ҡайһы берәүҙәр осоп ҡайтһа, ҡайһы бер йән эйәләре ер аҫтынан яйлап өҫкә үрмәләй башлай. Былары иһә, ауыр ҡыш осорон ер йылыһы ҡуйынындағы ышанысылы ояларҙа үткәргәндәре. Ошондай тереклектәрҙең береһе - йылан.**

# НУХ ПӘЙҒӘМБӘР ХӨРМӘТЕНӘ...



## яҡтан ерҙә ҡат, йылан!

Йылан һүҙен ишетеү менән күптәр һиҫкәнеп ҡуя. Ысынлап та, кеше өсөн тәбиғәттә көн күргән башҡа тереклектәр араһында йылан айырым урын алып тора. Уны күреү менән генә түгел, хатта күҙ алдына килтереү менән әллә нисек булып китә. Йәй көнө, бесән әйләндереп йөрөгән мәлдә, ҡапыл бакуй аҫтынан йылан килеп сыҡһа, бер метр түгел, биш метрға һикереп киткәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Шунан инде һәнәк оса бер яҡҡа, үҙең осаһың икенсе яҡҡа.

Шул уҡ ваҡытта йыландың йәшәү рәүеше башҡа хайуандар тормошонан әллә ни айырылмай кеүек. Улар ҡатнаш урманды, оҙон үлән баҫҡан далаларҙы, һаҙлыҡтарҙы, йылғаларҙы һәм күлдәрҙе үҙ итә. Ғәҙәттә, йыландар бер ергә эйәләшә. Бер йылан биләмәһе алтмыш-йөҙ метрҙан артмай. Бер ғаилә дүрт гектар майҙанды биләй ала. Ҡышлау өсөн улар йәйге урындарынан биш саҡрымға тиклем күсә. Ҡыш осорон ике метрға тиклем тәрәнлектә үткәрәләр. Берәмләп йә төркөм-төркөм булып ҡышлайҙар. Күп осраҡта бер урынға унар йылан йыйыла. Әммә ҡайһы ваҡыт өс йөҙ йыланға тиклем булған төркөм дә осрап ҡуя. Яҙҙың килеүенә ҡарап, май баштарында ер өҫтөнә сығалар. Беренсе булып ата йыландар сыға, ә бер нисә көндән инә йыландар һәм балалары ер өҫтөнә күтәрелә. Йәй көндәрендә йәшәү урыны итеп төрлө хайуандар ояларын, ҡороған ҡыуаҡтарҙы һәм серек ағастарҙы һайлайҙар. Һунарға ҡояш байығас сығалар. Көндөҙ ҡояшта ҡыҙынып ятырға яраталар. Уңышлы һунарҙан һуң йыландар йәшәгән урынынан ике-өс көн сыҡмай ҙа ятырға мөмкин. Ояла тыныс ҡына ятыу улар өсөн отошлораҡ, сөнки уларҙың дошмандары көслө. Йыландарҙың дошмандары - бөркөт, өкө, ябалаҡ, бурһыҡ, төлкө һәм терпе.

Шуныһы үҙенсәлекле - йылан йыл һайын тиреһен һала. Уның һалған тиреһен миңә лә күрергә насип булды. Аптырамалы хәл инде. Тире шул килеш ятып ҡалған, хатта күҙ бәбәктәренә, тештәренә хәтлем тире тотош көйө һаҡланған. Үҙенән үҙе һорау тыуа. Ә йылан үҙе ошо тире эсенән ҡайһылайтып сыға алды икән? Бәлки, был турала белгән кешеләр яҙып ебәрер?

Бына шулай, йыландың тәбиғәттәге тормошо тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына һымаҡ. Әммә уның образы кешелек тормошонда бөтөнләй икенсе урын алып тора. Был турала халыҡ әйтемдәре лә асыҡ һөйләй. Йыландың ҡараһы ла йылан, ағы ла йылан, тигән әйтем уның дошман икәнен асыҡ күрһәтеп тора. Йәне теләгән - йылан ите ашаған, тигән әйтем бик үҙенсәлекле. Йылан ите ашаған кеше башҡа хайуандарҙың телен аңлау һәләтенә эйә була икән. Ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә белә ул - ауылдағы бар яңылыҡты белгән кешегә ҡарата ҡапылда әйтеп ҡуябыҙ был һүҙҙәрҙе. Һәйбәт тип йөрөгән кешебеҙ ҡапылдан ғына насарлыҡ ҡылып ташлаһа, ҡуйынынбыҙҙа йылан аҫырап ятҡан икәнбеҙ, тип аптырап бот сабабыҙ.

Йыландың ун ике аяғы бар, тип иҫәпләй башҡорт халҡы. Әммә йылан үҙ аяҡтарын бик һирәктәргә генә күрһәтә. Шуға күрә, йылан аяғын күргән бәхетле булыр, тигән әйтем бар. Ә инде, йылан аяғын киҫкән, тигән әйтем бик тәжрибәле кешегә әйтелә.

Халыҡ ижады буйынса, йылан кешегә яҡшылыҡ та, яманлыҡ та ҡыла ала. Әммә уның кире яҡтары күберәк буғай. Шулай ҙа һүҙҙе ыңғай яҡтарынан башлап китәйек. Бына аҡ йылан менән туҙбаш йылан - ыңғай "геройҙар". Уларҙы үлтереү генә түгел, хатта тейергә лә ярамай. Бигерәк тә аҡ йыланға теймәҫкә кәрәк, сөнки ул йыландарҙың батшаһы булып иҫәпләнә. Аҡ йыланды үлтергән кешене йыландар торған ерендә ашар, ти халыҡ. Аҡ йыланға аҡ яулыҡ һалһаң, ул мөгөҙөн һала. Ул кеше бәхетле була, тигән ышаныу һаман йәшәп килә халыҡ күңелендә.

Йыландарҙың башҡа төрҙәре дошман булып иҫәпләнә. Шуға күрә йыландарҙы һәр ваҡыт үлтерергә тырышҡандар. Ат тире һеңгән сыбыртҡы менән туҡмап үлтереү иң һәйбәте булып иҫәпләнгән. Шуныһы аяныслы. Һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙ өсөн йыландың яңы төрө бигерәк тә ҡурҡыныс булып сыҡты. "Йәшел йылан" тип атала ул.

Йылан ни тиклем оҙаҡ йәшәй, ул шул хәтлем зәһәргә әйләнә икән. Был ысынлап та шулай микән, белмәйем. Әммә халыҡ ижадында, йөҙ йыл йәшәгән йылан аждаһаға, мең йыл йәшәгәне юхаға әйләнә, тип әйтелә. Шуға күрә юха һүҙе хәйләкәр, таҫма телле кешегә төбәлгән.

Юха-йылан тора-бара матур ҡыҙға әйләнеп китә икән. Был турала Урал батыр әкиәтендә лә әйтелә. Әкиәттән өҙөк килтереү урынлы булыр. "Ҡатын айыуҙың маңлайына бер сирткәйне - теге бүрегә әйләнде, ти. Бүренең маңлайына бер сирткәйне - арыҫлан булды, ти. Шунан теге ҡатын ана шул арыҫланға атланып алды ла үҙ юлына саптырып сыҡты ла китте, ти. Был ҡатын тигәнебеҙ юха йылан булған икән. Һылыу ҡатын ҡиәфәтенә ингән ана шул юха йыландың хәйләһе арҡаһында Шүлгән, үҙенең кешелеген ғүмергә юғалтып, кейек булып ҡалған. Бер ҡараһаң - айыу, икенсе ҡараһаң - бүре йәки арыҫлан булып йөрөгән-йөрөгән дә, йөрөй торғас, бер күлгә батып үлгән, ти".

Йылан күрһәң, йылан доғаһын уҡырға кәрәк, ти халыҡ әйтеме. Шуға борон йылан арбаусылар булған. Йылан арбаусылар бик көслө кешеләр рәтендә торған. Уларҙың арбауына сыҙай алмайынса, йылан хатта һуҙылып ятып үлгән. Йылан арбау һамағының аҙағын уҡыйыҡ әле:

*Сәңке, сәңке, сәңке йылан,*
*Сәңке башлы ҡара йылан,*
*Атҡан уҡтан етеҙ йылан,*
*Ағын һыуҙан ауан йылан,*
*Аҡ мамыҡтан йомшаҡ йылан,*
*Сағыр булһаң, саҡ, йылан,*
*Саҡмаҫ булһаң, ят, йылан,*
*Нух пәйғәмбәр хөрмәтенә*
*Ятҡан ерҙә ҡат, йылан.*

Факиһа Туғыҙбаева үҙ ижадында был турала ошолай яҙып китә.

*Ҡустым! Ҡурҡма йыландан,*
*Булһа ла ул ҡап-ҡара!*
*Бына уны нишләтәм,*
*Миңә ентекләп ҡара.*
*Алам ҡулыма ҡурай,*
*Моңло көйҙәр уйнайым;*
*Ҡурайымда уйнағанда,*
*Матур уйҙар уйлайым.*
*Йоҡлай ҙа китә йылан*
*Сағам тигән еренән.*
*Мин ҡурай уйнағанда,*
*Уянмаҫ ул киренән.*
*Ҡустым! Ҡурҡма йыландан -*
*Көслө унан ҡурайым.*
*Моңло көй уйнай-уйнай,*
*Йыланды ла арбайым.*

Был мәҡәләне халҡыбыҙҙың тапҡыр әйтеме менән тамамлағы килә. Арбауын белһәң, ҡара йылан да ҡарышмай, тип әйтә беҙҙең халыҡ. Бик дөрөҫ әйтелгән һүҙҙәр, тип уйлайым мин. Шуға күрә тәбиғәттә тереклек иткән йыланға ҡарағанда, "йәшел йылан"ға ҡаршы арбауҙы тиҙерәк табайыҡ. Аллам һаҡлаһын, уның аждаһаға, тора-бара юхаға әйләнгәнен көтмәйек. Берүк халҡым был зәһәр йыландан арынырға үҙендә көс таба алһын, тип Аллаһы Тәғәләнән һорайыҡ.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**

**РЕДАКЦИЯНАН:**
**Быйылғы йыл Башҡортостанда Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип нарыҡланды. Ошо айҡанлы гәзитебеҙҙәге "Тәбиғәт мөғжизәләре" тигән рубрикабыҙҙы әүҙемләштереп, иң яҡшы мәҡәләләргә конкурс иғлан итәбеҙ. Даими авторыбыҙ Әғләм Шәрипов уны башлап ебәрҙе лә инде бына. Ошо авторыбыҙ кеүек тәбиғәт йәнле, тәбиғәт телен аңлаған, тәбиғәт тауышын ишетә белгән, тәбиғәттәге төрлө күренештәр, үҫемлектәр, кейек-йәнлектәр, ер-һыуыбыҙ тураһында ата-бабалар һүҙен хәтерендә һаҡлаған, тәбиғәт балаһы булған уҡыусыларыбыҙҙан мәҡәләләр көтәбеҙ. Йыл аҙағында йомғаҡ яһалып, өс еңеүсе билдәләнер, тип ниәтләйбеҙ.**

ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

# ҺАҠЛАНҒАНДЫ...

## Хоҙай ҙа һаҡлай!



**Үҙемде сәләмәтмен тип иҫәпләйем, сөнки баш ауыртыуының ни икәнен дә белмәйем, киҙеү менән дә ике-өс йылға бер генә ауырып алам. Даими рәүештә һалҡын һыу эсәм, туңдырма ашайым, ләкин ҡайһы берәүҙәр кеүек, тамағым шешеп интекмәйем, күҙ теймәһен.**

Ауыр эш эшләп өйрәнеп үҫкәнгәме, артыҡ ҙур физик көсөргәнеште лә организмым енел ҡабул итә. Ә бит физик эш - ул үҙе сәләмәтлек нигеҙе. Шулай ҙа ике проблемам бар: тештәр һәм ашҡаҙан. Тештәрем тиҙ боҙола, уларҙы даими тикшертеп торорға кәрәк, быны өсөн аҡса ла күп китә. Ҡайһы бер ваҡыт үҙәк көйөүҙән интегәм. Әммә мин быға артыҡ бошонмайым - үҙәк көйөүҙе (һарыу ҡайнау) мин үҙенә күрә бер сигнал тип ҡабул итәм. Тимәк, артыҡ тоҙло, артыҡ шәрбәтле, ҡыҙҙырылған аҙыҡты ашарға ярамай. Ғөмүмән, ашаған аҙығыңдың организмға тәьҫирен тойорға өйрәнергә кәрәк ул. Сөнки ашаған аҙыҡ менән организмға йөҙ ауырыу инә, тиҙәр бит.

Шулай ҙа үҙемде, ҡайһы бер кешеләр менән сағыштырғанда, организмымдың кәмселектәре, "йомшаҡ" ерҙәре булһа ла, сәләмәт тип иҫәпләйем. Тағы шуны ла әйтер инем: былар үҙ-үҙеңде һаҡлауға ла нык бәйле. Һыуыҡтарҙа йәки нык эҫелә яланбаш йөрөһәң, ҡыш көнө еңелсә генә кейенһәң, әлбиттә, сирләйһең. Ә Хоҙай "һаҡланғанды һаҡлармын" тигән. Шуға сәләмәтлектең ниндәйҙер өлөшө нәҫелдән килә, ә ҡалғанына үҙеңдең тырышлығың менән өлгәшәһең, тиер инем.

**Сөмбөл ШАКИРЙӘНОВА,**
**матбуғат хеҙмәткәре.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Ҡариҙелдең тере легендаһы

...Тәғәйен урынға килеп еткәндә көн болотло, елле, әммә ҡоро ине. Мин бөгөн дә аңымдан ямғыр бары тик беҙҙе, беҙҙе генә эҙәрлекләгән, тигән уйымды сығарып ташлай алмайым. Һуныраҡ ғына Асҡын яғына боролош күрһәткес бер көн элек, кискеһен алыныуын белдек. Әммә барыһынан бигерәк мине хәҙер ҙә "Золотарев ҡултығы" тип яҙылған һыу ситендәге һөҙәк ярҙа торған күрһәткес аптыратты.

Золотарев оҙаҡ йылдар Павловка һыу һаҡлағысының тәбиғи байлыҡтарын эскерһеҙ һаҡлаған легендар балыҡсылыҡ инспекторы була. Уның һоҡланғыс намыҫлылығы, килешмәүсәнлеге һәм ҡурҡыу белмәҫлеге хаҡында Ҡариҙелдән хат алғанға тиклем бер нәмә лә белмәй инем. Ул ваҡытта мин "Совет Башҡортостаны" гәзите редакцияһында бүлек мөдире булып эшләй инем. Гәзит башҡорт телендә генә сыға, шуға күрә уҡыусылар башлыса башҡортса хат яҙа. Мин алған хат рус телендә яҙылғайны һәм уның йөкмәткеһендә иламһырау, истерикаға бирелеү түгел, ә лайыҡлы үтенес тойҙом. Миңә билдәһеҙ булған Ҡариҙелдән билдәһеҙ ҡатын үҙенең үтенесе менән бик күп дәүләт органдарына һәм гәзит редакцияларына мөрәжәғәт итеүе, әммә бер ҡайҙа ла уның бәхетһеҙлеге менән ҡыҙыҡһыныусы булмауын белдереп яҙғайны. Бер нисә ай элек уның ире - барлыҡ ғүмерен ошо ауыр һәм хәүефле эшкә арнаған балыҡсылыҡ инспекторы Золотарев юғала. Уға ғәҙел һәм ҡыйыу гәзиткә - "Совет Башҡортостаны" редакцияһына мөрәжәғәт итергә кәңәш биреүҙәрен бәйән итә. Хат авторы журналистарҙан кемдәндер булһа килеүен үтенеп һорай. Хатты тотоп, баш мөхәррир Мансур Әйүповҡа индем. Ҡыҫҡаса ғына уның йөкмәткеһе менән таныштырғас, был районға иртәгә үк юлға сығырға әҙерлегемде белдерҙем.

Иртәгәһенә кисен Золотаревтарҙың өйөндә ултыра инем инде. Хужабикә мин уны хат, дәлилдәре буйынса нисек күҙаллағанмын - шундай: башлаған эшен ахырынаса еткермәй туктамаясаҡ көслө ихтыярлы һәм ҡаһарман ҡатын булып сыҡты. Ул иренең фажиғәһен ауыр кисерһә лә, хис-кисерештәрен йөрәгендә һаҡланы һәм ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙар кеүек, уларҙы тышҡа сығарманы. Мин өҫтәл артында ултырып, юғалған инспекторҙың фотоларын, гәзиттән ҡырҡып алынған, уның көндәлек батырлығы, ҡыйыулығы, иҫ китмәле намыҫлылығы тураһында һөйләгән мәҡәләләрҙе ҡараймын. Намыҫлы һәм ғәҙел булған, бер ваҡытта ла ришүәт алмаған һәм браконьерҙарҙың, хатта юғары етәкселек иҫәбенән булғандарының да ҡырын эштәрен йәшереп ҡалдырмаған. Ҡурҡыу белмәгән, уға һәр ваҡыт янап торғандар, бер нисә тапҡыр ғүмеренә һәм сәләмәтлегенә ҡул һуҙғандар, бик йыш ярҙағы ҡыуаҡтар артынан атҡандар, әммә ул бер ваҡытта ла ҡурҡмаған һәм борсолмаған. Ҡайһы бер ваҡытта уға балыҡтар ыуылдырыҡ сәскән мәлдә ау менән балыҡ тоторға ниәтләнгән тиҫтәләрсә иҫерек браконьерҙы тынысландырырға тура килгән. Золотаревты яҡын-тирәләге ауылдар һәм ҡалалар халҡы ғына түгел, хатта Силәбе, Пермь өлкәләре, Удмуртия һәм Татарстан балыҡсылары ла белгән.

Һәм бына шундай кеше эҙһеҙ юғала. Башта был ваҡиғаға иғтибар бирмәйҙәр, ә инде иҫтәренә төшкәс, һуң була. Водолаздар килеп, һыу төбөн дә тикшереп сыға. Һыу төбөндә улар бүрәнә ҡыйыу ваҡытында ятып ҡалған ҙур-ҙур ағастарҙы, бүрәнәләрҙе күрә. Урыны менән баткылдарҙың бейеклеге 20 метрға етә! Улар ер аҫты өңдәре һәм мәмерйәләре барлыҡҡа килтергән була. Уларҙа кеше генә түгел, хатта кәмә лә, ҙур булмаған караптар ҙа юғалыуы ихтимал. Бигерәк тә ләм ҡамасаулай: водолаздар бер урындан икенсе урынға күсенә башлаһа, ул төптән күтәрелеп, тирәләй ҡараңғы шаршау барлыҡҡа килтерә. Шуға күрә һыу аҫтын күпме генә төшөп эҙләмәһендәр, һөҙөмтә булмай.

Әммә Золотарева быны менән генә тынысланмай. Үҙәк гәзиттәрҙең береһендә фото һәм урындың картаһы буйынса кешенең ҡайҙалығын әйтеп биреүсе күрәҙәсе тураһында уҡып, ул редакция аша ғәҙәти булмаған һәләтле ҡатын менән бәйләнешкә сыға. Золотарева почта аша күрәҙәсегә кәрәк булған бөтөн нәмәне ебәрә. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң шундай яуап килә: кеше тере түгел, кәүҙәһен район картаһында билдәләнгән урындан эҙләргә кәрәк. Был картаны мин ентекләп өйрәндем һәм үҙем өсөн шуны асыҡланым - Павловка һыуһаҡлағысы бик күп ҡултыҡтары, утрауҙары һәм ярымутрауҙары булған тотош диңгеҙ. Уның урта өлөшөндә балыҡсылыҡ инспекторының кәүҙәһе булыуы ихтимал булған ҙур булмаған ҡултыҡты күрҙем.

Өфөгә ҡайтҡас, Золотаревтың тормошо һәм уның юғалыу шарттары тураһында ентекләп мәҡәлә яҙҙым. Ҡариҙел район гәзите уны руссаға тәржемә итеп, үҙҙәрендә баҫтырып сығарҙы. Мин бер нисә тапҡыр юғалған кешене эҙләүҙе әүҙемләштереү маҡсаты менән республика прокуратураһына барҙым. Әммә өҫтәмә саралар ҙа бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәне. Золотарева ханым менән һуңынан бер нисә йыл хат алыштыҡ. Артабан инде бәйләнештәр өҙөлдө. Бер нисә йыл үткәндән һуң, икенсе эштәр менән ҡабат Ҡариҙелгә килгәнемдә район хакимиәте башлығы Аҡбүләков менән һыуһаҡлағыс буйлап бик ҙур араны үтергә тура килде. Һөйләшеү ваҡытында ул күптән түгел ниндәйҙер балыҡсының һыуҙан кеше кәүҙәһен һөйрәп сығарыуы, әммә ҡурҡышынан уны кире ташлауы, тиҙ генә ҡармаҡтарын йыйып ҡайтып китеүе хаҡында һөйләне. Әммә аҙаҡ ошо уҡ урында мәйетте эҙләү ыңғай һөҙөмтә бирмәй.

Золотарев хаҡындағы һуңғы һөйләшеүем Ҡариҙелме, Асҡынмы районы кешеһе менән булды. Ул, йәнәһе, балыҡсылыҡ инспекторын үлтергәндәр һәм ошо енәйәттә ҡатнашыусыларҙың береһе вафаты алдынан был хаҡта туғандарына һөйләгән һәм ҡылған яуызлығы өсөн үкенеүен, Аллаһы Тәғәләнән ғәфү итеүен һораған, тип һөйләне. Был ысынбарлыҡҡа тап киләме, юҡмы, белмәйем. Әммә шуны ғына әйтә алам: минең яҙмышым күренмәҫ ептәр менән Золотаревтарҙың яҙмышы менән бәйләнде. Үрҙә яҙып үтелгән сәйер тарихҡа бәйле һыу сығанағы эргәһендәге "Золотарев ҡултығы" тигән яҙыуҙы күреүем Ерҙә йәшәүсе һәр кем был тормошта бер тапҡыр ғына булһа ла күргән йәки аралашҡан кеше менән ғүмерлеккә бәйле булыуын раҫлай.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

130. Үҙегеҙҙә тирә-яҡ мөхиткә ҡыҙыҡһыныуҙы үҫтерегеҙ. Уны тикшереүсе булығыҙ. Башҡалар ғәҙәти кеүек ҡабул иткән нәмәләрҙән дә ҡәнәғәтлек табығыҙ. Урамда туҡтап торбала уйнап торған музыкантты тыңлағыҙ. Атайығыҙ һоҡланған классиктың китабын уҡығыҙ. Бер-ике көнгә генә ҡаланан сығып китеп, ҡеүәтле тәбиғи энергетикаһы булған тәбиғәт ҡосағында йәшәгеҙ. Ҡыҫҡа ял алып, аңығыҙға, тәнегеҙгә һәм йәнегеҙгә иғтибар бүлегеҙ. Был саралар һеҙҙең тормош сифатын һиҙелерлек күтәрәсәк.

131. Үҙегеҙҙең иғтибарығыҙҙы һәм хистәрегеҙҙе белдереү өсөн туғандарығыҙға ҡотлау открыткалары ебәрергә онотмағыҙ. Хатта саҡ ҡына ваҡытығыҙ булмағанда ла аҙнаһына биш минут табып, бер генә открытка яҙғанда ла, йылына 52 открытка килеп сыға. Был саҡ ҡына иғтибар ҙа тиҙҙән үҙенең емештәрен бирә башлар.

132. Танышҡан һәм аралашҡан кешеләрҙең исемдәрен хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Һәр кем өсөн үҙ исеме - иң матур яңғыраған өн.

133. Урамға сығығыҙ һәм ярты сәғәт зәңгәр күкте күҙәтегеҙ. Тәбиғәт менән туранан-тура бәйләнештә аңлатып булмаҫтай көслө хис-тойғоно тойоғоҙ. Ҡәтғи төҙөлгән көн тәртибен саҡ ҡына үҙгәртеп, төштән һуңғы ваҡытығыҙҙы тәбиғәттең матур мөйөшөндә уҙғарығыҙ. Урман ҡыҙырығыҙ йәки йылға буйында ултырығыҙ. Балыҡ тотоғоҙ йәки кәмәлә йөрөгөҙ. Көн тәртибе хаҡында бөтөнләй онотоғоҙ, ә инде өйгөҙгә ҡайтҡанда үҙегеҙҙә тау аҡтарырҙай көс тойорһоғоҙ.

134. Айына бер-ике тапҡыр сәғәтегеҙҙе өйөгөҙҙә ҡалдырығыҙ. Заманса йәмғиәттә кеше үҙ сәғәтенең ҡолона әүерелә һәм улар беҙҙең менән идара итә башлай. Был көндә нимә оҡшай - шуны һәм күпме теләйһегеҙ, шунса эшләгеҙ. Ваҡытығыҙҙы кем менәндер осрашыуға барырға кәрәк икәнен иҫегеҙҙә тотоп түгел, ә яйлап үткәрегеҙ. Ошо мәлдәрҙән ҡәнәғәтлек алығыҙ һәм тап һеҙгә нимә кәрәк, иғтибарығыҙҙы шуға туплағыҙ, ваҡ-төйәккә бүленмәгеҙ. Сәғәтегеҙ хаҡында онотоп, саҡ ҡына булһа ла ваҡытығыҙҙы яңы сифатлы кимәлдә үткәрегеҙ.

135. Эш урынында көлөгөҙ һәм хеҙмәттәштәрегеҙ һеҙҙе "төҙәтеп булмаҫтай" оптимист тип белһен.

136. Яңы идея аңда уйҙағы образды тыуҙыра. Артабан был образ үҫешеп, характер һыҙаты сифатында сағылыш тапҡан уй ғәҙәтенә әйләнә. Уйҙарығыҙҙы камиллаштырыу өҫтөндә эшләгеҙ һәм шулай итеп аңығыҙҙы камиллаштыраҫаҡһығыҙ; аңығыҙҙы камиллаштырып, тормошоғоҙҙо яҡшыртаһығыҙ; тормошоғоҙҙо яҡшыртып, яҙмышығыҙҙы үҙгәртәһегеҙ.

137. Алмаштырыу фекерләүенең бар ҡеүәтен тойоғоҙ. Был ябай ысул аңығыҙға үтеп инеп һеҙҙе юлығыҙҙан ситләштерергә тырышҡан барлыҡ кире идеяларҙы ыңғай уйға күсерергә ярҙам итеүҙе күҙаллай. Мәҫәлән, йәкшәмбе кисен: "Иҫ киткес ял көндәренән һуң иртәгә эшкә барғы килмәй", - тигән уй тыуа икән, был зарарлы уйҙы, ул һеҙҙең аңығыҙ менән идара итә башламаҫ элек, икенсе уй менән алмаштырығыҙ. Мәҫәлән: "Ҡыҙыҡлы проект өҫтөндә эшемде дауам итер өсөн эшкә сығыуымды көтөп ала алмайым. Ә аҙна һуңында инде тамамланған эшем миңә аңлатҡыһыҙ ҡәнәғәтлек кисерергә ярҙам буласаҡ". Артабан үҙегеҙҙе күрһәтә алған эшегеҙ булыуы менән бәхетле икәнлегегеҙ хаҡында уйлағыҙ. Әлеге вазифағыҙҙың иң яҡшы яҡтарының исемлеген төҙөгөҙ һәм уны ҡабат-ҡабат күҙҙән үткәрегеҙ. Тиҙҙән кире стереотип һындырылып, яңы аҙна башланыуын ҙур энтузиазм менән көтәсәкһегеҙ.

**Робин ШАРМА.**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# РАДИО КӨНӨ МЕНӘН!




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**ИҒТИБАР!**

**Түңәрәкле шаҡмаҡтарҙағы "өндәмә"ләрҙе табып, 8-962-521-19-39 телефонына шылтыратҡан уҡыусыны "Юлдаш" радиоһынан бүләк көтә.**

**17-се һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Күскилдина. Хоҙайбирҙина. Теннис. Плита. Томан. Моталов. Такси. Иҙелбаев. Иваси. Бураҡаева. Мунда. Авангард. Каа. Арпа. Дин. Ресторан. Буранshина. Армыт. Аспирант. Сәүек. Дуға. Сакура. Ғафаров. Орбита. Люстра. Ураҡсин. Күрк. Скипидар. Ураҙа. Кворум. Елемсә. Нәрәтә. Ағас.

**Вертикаль буйынса:** Краб. Меркадер. Үркәс. Нунчак. Алама. Даға. Рами. Хата. Гвиана. Астма. Аккордеон. Көҙән. Вакса. Сантим. Ирис. Кәмә. Парк. Йосопов. Охра. Инициатива. Бард. Африка. Рейка. Рамзес. Вече. Саңлау. Сироп. Лангет. Ифтира. Отпор. Ахыр. Анчоус. Душнам. Түркен.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ДЕПУТАТТАР ҘА...

## алғы һыҙыкта булһын

**Өфө ҡала округы Советының сираттағы сессияһында депутаттар башҡа һорауҙар менән бер рәттән, алда торған мөһим ваҡиғаға - Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 68 йыллығын байрам итеүҙе ойоштороу һәм уны үткәреү мәсьәләһенә лә ҙур иғтибар бүлде.**

Ҡала округы Советы депутаттары үҙҙәре өсөн саралар планы төҙөгән һәм ултырышта уны бер тауыштан раҫлап, ҡабул итте. Был документ сиктәрендә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына матди ярҙам күрһәтеү буйынса мәрхәмәтлек акциялары уҙғарыу, һуғыш һәм тыл ветерандары менән осрашыуҙар үткәреү, уларҙы Еңеү көнө менән тәбрикләү, ҡала Советының наградаларын тапшырыу; һуғыш ветерандары госпиталендә дауаланыусы ветерандар өсөн байрам саралары уҙғарыу; йәштәрҙә ватансылыҡ рухы тәрбиәләү маҡсатынан Ҡаһарманлыҡ дәрестәре ойоштороу һәм тематик сараларҙа ҡатнашыу; Еңеү паркындағы Мәңгелек ут һәйкәленә, шулай уҡ башҡа һәйкәлдәргә, обелисктарға, мемориаль ҡоролмаларға тантаналы шарттарҙа сәскәләр һалыу, тантаналы йыйылыштарҙа ҡатнашыу; депутаттар етәкселек иткән учреждение һәм ойошмаларҙың хеҙмәт коллективтарында Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын һәм уларға тиңләштерелеүселәрҙе тәбрикләү, уларға Георгий таҫмалары таратыу һәм башҡа саралар үтәсәк.

Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына, уларҙың яу яландарында күрһәткән тиңһеҙ ҡаһарманлығына, батырлығына рәхмәт сағылышы һәм үҫеп килеүсе быуынға әхлаҡи-патриотик тәрбиә биреү маҡсатында депутаттар корпусы байрам көндәрендә уҙғарыласаҡ сараларҙа тулы корпус менән ҡатнашырға килеште.

Ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов та үҙенең сығышында республика кимәлендә уҙғарылған сараларҙа ҡала округы Советы депутаттарын әүҙем ҡатнашырға саҡырҙы. "Был, тәү сиратта, Бөйөк Еңеү яулаған атай-олатайҙар рухына, әлеге ваҡытта иҫән-һау булған ветерандарға ихтирам күрһәтеү ул. Юҡһа, тантаналы сараларға ветерандар нисек булһа ла килергә тырыша, ә депутаттарҙың бик һирәктәре генә йөрөй. Йәш быуынды патриотик рухта, тарихҡа ихтирамлы итеп тәрбиәләйбеҙ тиһәк, иң элек үҙебеҙ өлгө күрһәтәйек", - тине ул.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# РОБОТТАР БӘЙГЕ ТОТТО



**Өфө дәүләт авиация техник университетында робот техникаһы буйынса Халыҡ-ара олимпиаданың төбәк этабы үтте. Бәйгелә Өфө, Стәрлетамаҡ ҡалаларынан, Салауат районынан килгән 41 команда ҡатнашты. Ярыш өс йәш төркөмөндә барҙы. Кесе төркөм роботына туҡыма буяуҙы моделләштереү, урта төркөм роботына ғибәҙәтхана төҙөү, өлкән төркөм роботына варан йомортҡаларын йыйыуҙы һәм һаҡлауҙы тәьмин итеү йөкмәтелде. Бәйге көсөргәнешле үтте. Һөҙөмтәлә иң күп призлы урындар Республика Башҡорт лицей-интернаты командаларына эләкте.**

**Айрат Ишимбаев, РБЛИ-ның информатика уҡытыусыһы:** Ике йыл элек башҡорт лицейынан бер нисә уҡытыусы, шул иҫәптән мин, Силәбе ҡалаһына барып, робот техникаһы буйынса семинарҙа ҡатнашып, тәжрибә туплап ҡайттыҡ. Үҙебеҙҙә лә ошо йүнәлеште үҫтереү маҡсатында бер робот һатып алдыҡ, иң һәләтле уҡыусыларҙан торған төркөм төҙөнөк. Силәбелә, Мәскәүҙә үткәрелгән ярыштарҙа ҡатнаштыҡ. Тәү тапҡыр ҡатнашыуыбыҙға ҡарамаҫтан, уңышлы ғына сығыш яһаныҡ, иң көслө ун команда араһына индек. Шунан ҡайтҡас, робот техникаһына күберәк уҡыусыларҙы ылыҡтырыу маҡсатында үҙебеҙҙең лицейҙа түңәрәк астыҡ. Лицей фонды тағы бер нисә робот һатып алырға ярҙам күрһәтте. Беҙҙең башланғысты күреп, башҡа мәктәптәр ҙә робот техникаһын уҡытыуға ҙур иғтибар бүлә башланы. Һөҙөмтә булараҡ, үткән йыл аҙағында тәүге тапҡыр Башҡортостан чемпионаты үткәрелде. Бөгөн инде халыҡ-ара ярыштарҙың төбәк этабын үткәреү кимәленә лә еттек.

**Рөстәм Монасипов, Өфө дәүләт авиация техник университеты профессоры:** Донъяла йылдам үҫешкән робот техникаһы Рәсәйҙең күп төбәктәрендә, шулай уҡ Башҡортостанда ла аҡһай ине. Беҙҙең университетта робот техникаһы уҡытыла килә ул, ләкин мәктәптәрҙә был мөмкинлек ҡулланылманы. Республика Башҡорт лицей-интернаты тырышлығы менән генә ул республикабыҙҙың урта белем биреү учреждениеларында киң танылыу ала башланы. Түңәрәктәр асылды, ошо йүнәлеш буйынса эшләгән өҫтәмә белем биреү үҙәктәре барлыҡҡа килде. Был бик мөһим. Сөнки робот техникаһы донъяла нанотехнологиялар кеүек үк ҙур популярлыҡ яулай. Яҡын киләсәктә роботтар сәнәғәттә генә түгел, көнкүреш өлкәһендә лә киң ҡулланыласаҡ.

**Фәнил Нуриев, РБЛИ директоры:** Былтыр Силәбелә үткән бәйгелә еңгән команда етәкселәре менән шундай һөйләшеү булды. Улар уҡыусыларының әҙерлекле, техник яҡтан көслө, проекттары төплө була тороп та, инглиз телен насар белеүҙәре арҡаһында, донъя кимәлендәге ярыштарҙа ҡыйынлыҡтарға осрауҙарына зарланғайны. Ә беҙҙең лицей-интернат өсөн был проблема түгел. Сөнки беҙҙең уҡыу йортонда инглиз телен уҡытыу юғары кимәлдә алып барыла, уҡыусылар иркен аралаша, Халыҡ-ара кимәлдәге конференцияларҙа сығыш яһайҙар. Шуға күрә робот техникаһы йүнәлешендә үҙебеҙгә юғары маҡсаттар ғына ҡуя алабыҙ.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ошо көндәрҙә Республика Башҡорт лицей-интернаты уҡыусылары Мәскәүҙә робот техникаһы буйынса Халыҡ-ара олимпиаданың Рәсәй этабында икенсе урын алып ҡайтты. Шулай итеп, улар Индонезияның баш ҡалаһы Джакартала үтәсәк Халыҡ-ара олимпиаданың финал өлөшөнә барыу хоҡуғын яуланы.**

**Азамат САЛАУАТОВ.**

АФАРИН!

# БАЛАЛАР ЙӨРӘГЕНДӘ...

## рух та булһын, тип

**Өфөнөң "Салют" балалар шифаханаһында республиканың төрлө ҡала-райондарынан килгән балалар өсөн махсус "Йәйләү" лагеры ойошторолдо. Белеүегеҙсә, "Йәйләү" лагеры яҙыусы Мәрйәм Бураҡаеваның халыҡ этнопедагогикаһына һәм йолаларына нигеҙләнгән программаһына ярашлы ун биш йыл ойошторола килә. Ошо ваҡыт эсендә "Йәйләү" башҡорт балаларының яратып ял иткән урынына әйләнде, ата-әсәләр тарафынан да яҡшы баһа алды. Мәғариф министрлығы йәйгеһен бер генә тапҡыр ойошторолған "Йәйләү"ҙе был юлы Өфөлә уҡыу йылы миҙгелендә лә ойоштороп һынап ҡарамаҡсы булып, "Салют" балалар шифаханаһына мөрәжәғәт итте. Шифахана еткәселеге тәҡдимде хуплап ҡаршы алды һәм йәйләүселәрҙе үҙ диуарҙарында ҡабул итте.**

**Рәйсә КҮЗБӘКОВА, тәрбиәсе:** "Салют" шифаханаһындағы "Йәйләү" лагерында тәүге ун көндә өлкән синыф уҡыусылары ял итте. Улар өсөн был лагерҙа ял итеү бигерәк тә мөһим булды, тим. Сөнки улар теүәл фәндәрҙән БДИ тапшырырға әҙерләнә. "Йәйләү"ҙә баш ҡаланың иң яҡшы уҡытыусылары урыҫ теленән һәм математиканан дәрестәр бирҙе. Бынан тыш, уҡыусыларға психологик тренингтар ҙа үткәрҙек. Беҙҙең балаларға үҙ-үҙҙәренә ышаныс етеңкерәмәй, улар яңы эшкә ҡурҡып, шикләнеп ҡарай, ҡыйыуһыҙлыҡ көслө. Тренингтар ошо насар һыҙаттарҙан арынып, үҙ-үҙҙәренә ышаныс тәрбиәләү өсөн бик кәрәк балаларға. Ғөрөф-ғәҙәттәргә, йолаларға бәйле саралар - төп урында беҙҙең "Йәйләү" программаһында. Был юлы ла балалар халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадын белеү кимәлен, ижади һәләттәрен төрлө конкурстарҙа һынаны. Бынан тыш, балалар "Киске Өфө", "Йәшлек" гәзиттәре, "Шоңҡар" журналы хеҙмәткәрҙәре, "Туған тел" һәм "Беҙ Башҡортостандың киләсәге" ойошмалары йәштәре менән осрашты.

**Асия ЛАТЫПОВА, тәрбиәсе:** Лагерҙың төп маҡсаты - башҡорт балаларында лидерлыҡ һыҙаттары, сәм, ғәм тәрбиәләүгә, милли рухты үҫтереүгә йүнәтелгән. Беҙ ошо маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн тырышып эшләнек һәм моратыбыҙға өлгәштек, тип уйлайым. Балалар, лагерға килгән саҡтары менән сағыштырғанда, әүҙемләштеләр, үҙ фекерҙәрен әйтергә өйрәнделәр. Осрашыуҙар ваҡытында төплө, матур һорауҙар бирҙеләр, ҡыҙыҡһындылар. Тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ хаҡында яҡшы хәбәрҙар булыуҙарын күрһәттеләр. Аудитория, таныш булмаған кешеләр алдында сығыш яһауҙан оялыуҙарына да еңә алдылар. Балаларҙың тормошҡа аңлы, айыҡ ҡарашлы булыуы һөйөндөрҙө.

**Урал ЙӘНҺАРИН, Әбйәлил районы Ғәбдин ауылы мәктәбенең 11-се синыф уҡыусыһы:** Илебеҙҙә һуңғы осорҙа барған күренештәргә шаһит булып, төрлө баҫмаларҙа, интернетта, башҡорт халҡы бөтә, тел бөтә, тигән хәбәрҙәрҙе уҡып, мин шуға ышанып, күнеп бөтә яҙғайным. Ә был лагерҙа республиканың төрлө мөйөштәренән килгән тиҫтәрҙәрем менән саф башҡорт телендә аралаштыҡ, башҡорт мөхитендә йәшәнек. Ә милләттең, телдең бөтөп барыуы хаҡындағы төрлө һүҙ ҡуйыртыуҙар беҙҙең күңелде төшөрөү, беҙ вайымһыҙлыҡҡа, төшөнкөнлөккә бирелһен өсөн генә уйлап сығарылғанын аңланым. Үҙем өсөн бик мөһим хәҡиҡәтте астым: әгәр беҙҙең аңыбыҙҙа, йөрәгебеҙҙә милләтебеҙ, уға һөйөү йәшәй икән, тимәк, бер ниндәй тышҡы йоғонтолар ҙа уға зыян килтерә алмаясаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балаларҙы дәртләндергән, рухландырған лагерь йылына бер нисә ағым эшләһен ине лә. Ләкин бының өсөн күп мәсьәләләрҙе хәл итәһе бар әле. Әлеге лә баяғы, төп ҡыйынлыҡтар аҡса етмәүгә килеп һуғыла. Ата-әсәләр битараф булмағанда, яуаплы органдар тарафынан ярҙам күрһәтелгәндә, хәлле милләттәштәребеҙ балаларҙы милли рухта тәрбиәләгән һәм уларҙа лидерлыҡ һыҙаттары формалаштырған лагерға йөҙҙәрен борғанда, хәл итмәҫлек мәсьәлә лә түгел был. Бары бер аҙ илһөйәрлек кенә кәрәк. Ә был программаны тормошҡа ашырыуға әҙер энтузистар табылыр ине ул.**

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҘҒЫ БОҘҒА...

## ярҙай булһа ла ышанма

Донъяның төҙөклөгө лә, боҙоҡлоғо ла ҡатындарҙан.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ни өсөн беҙ юғалтҡандан һуң яңынан табылған әйбергә ҡыуанабыҙ, ә ул гел генә яныбыҙҙа булғанда уны шәйләмәйбеҙ икән?

**(Изге Августин).**

Мөхәббәт арҡаһында еңелгә әйләнмәгән ауыр хеҙмәт юҡ ул.

**(Джордано Бруно).**

Ҡыйығы насар ябылған өйгә һыу үткән кеүек, аҡылы теүәл булмағандың башына ла нәфсе тигәнең үтеп инеп кенә тора.

**(Будда).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Искәндәр исемле йәш суфый һөйләгәндәрҙән: "Беҙ йыш ҡына Әнүәр суфыйҙың йортона киске намаҙға йыйылабыҙ, киске ашты бергәләп ашайбыҙ. Ләкин Әнүәр суфый бер ваҡытта ла башҡалар менән бер табынға ултырмай. Ул бер мөйөшкәрәк барып ултыра, берәүгә лә эргәһенә яҡынларға рөхсәт итмәй һәм алдына тәрән һауыт ултыртып, унда һалынған аҙыҡ менән аҡрын ғына ризыҡлана. Табындағылар уның был холҡона аптырай, ләкин бер ниндәй аңлатма ла бирә алмай. Ҡайһы берәүҙәргә был оҡшамай, улар: "Әнүәр суфый тәкәббер, изге түгел, ул үҙен башҡалар алдында һауалы тота..."- тип тә әйтеп ҡуя. Ә бына мин был өлкән, аҡыллы суфыйҙың сәйер ҡыланышын аңларға теләнем. Кис һайын ул ултырған урынға аҡрынлап яҡыная барҙым, яҡыная барҙым. Берҙән-бер көндө мин уға тамам яҡынланым һәм уның алдындағы һауыттың буш икәнлеген күрҙем. Ләкин ул һауыттан ризыҡ алып ашаған хәрәкәттәр яһауын дауам итте. Ҡыҙыҡһыныуымды еңә алманым һәм унан: "Һеҙҙең был ҡылығығыҙҙың сере ниҙә: ни өсөн һеҙ һауытығыҙҙа ризык булмаһа ла - ашаған, кәсәгеҙҙә һыу булмаһа ла һыу эскән булып ҡыланаһығыҙ? Ниңә шул тиклем етди, изге күңелле була тороп, үҙегеҙҙе кешеләргә һауалы итеп күрһәтергә тырышаһығыҙ?" - тип һораным. Ул миңә шулай тип яуапланы:**

**- Әгәр ҙә минең турала тышҡы билдәләремә ҡарап ҡына фекер йөрөтәләр икән, әйҙә, мине һауалы, тәкәббер тип уйлаһындар. Кешене уның тышҡы йөҙөнә, кейеменә, тотошона ҡарап ҡына баһалауҙан да ҙурыраҡ гонаһ юҡ. Былай эшләү - тимәк, изге кешенең эске донъяһын мыҫҡыл итеү ул. Һай аҡыллы кешеләр һәр ваҡыт һай нәмәләргә ҡарап һығымта яһар, уның ҡарауы, улар изге кешенең эсендә булғанды бысрата алмаҫ..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5505
Заказ 1678